ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 февраль (шаҡай) 2020

№5 (891)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 февралгә тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" дүрт айға 450 һум 68 тингә төшәсәк. Бергә булайыҡ!***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Себер китә ирҙәр...**

Себер китә ҡыҙҙар...



6

**Шанлы тарихлы ҡаҙлылар беҙ!**



7

**Ғаилә именлеге - ил именлеге,**



йәғни Яҡындарына ҡарата көс ҡулланғандарҙы тыйыусы закон бармы?

8-9

**Ауыл ҡатындары...**

донъя көтә, ижад итә



12-13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй Президенты балалы ғаиләләргә бығаса төшкә лә инмәгән матди ярҙам күрһәтеләсәге хаҡында иғлан итте. Бындай социаль контракт атай-әсәйҙәрҙең яуаплылығын арттырасаҡмы, тормоштарын яҡшыртасаҡмы?

***Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәгенең Сибай ҡалаһы буйынса филиалы директоры:*** Рәсәй Президенты В.Путиндың Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә күтәрелгән төп проблемаларҙың береһе - илдәге демография торошо. Ысынлап та, Рәсәй әлеге ваҡытта демография мәсьәләһенең бик ҡатмарлы осорон кисерә. Тыуым кимәлен арттырыу өсөн кешеләрҙә иртәгәһе көнгә ышаныс, үҙҙәрен социаль яҡлаулы итеп тойоу бик мөһим. Шул саҡта ғына ныҡлы ғаиләләрҙә бәхетле балалар тыуа. Быйылғы Мөрәжәғәтнамә тап ана шул ғаиләләр хаҡында хәстәрлектең дәүләт сәйәсәтендә өҫтөнлөклө йүнәлеш булып тороуын күрһәтте лә инде. Айырыуса күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә бығаса күрелмәгән-ишетелмәгән кимәлдә социаль ярҙам күрһәтеү программаһы иғлан ителде. Был ғаиләләрҙең тормош хәлен ниндәйҙер кимәлдә яҡшыртҡан хәлдә лә даими рәүештә ситтән ярҙам көтөп кенә йәшәү ҙә бигүк дөрөҫ түгелдер тип уйлайым. Ата-әсәнең үҙҙәренә лә, һеҙ әйтмешләй, балаларҙың киләсәген хәстәрләүҙә яуаплылыҡты бермә-бер арттырырға тура киләсәк. Ни өсөн тигәндә, балалар үҫә, ҙурая, ихтыяждары ла арта бара, шунын менән бәйле ғаиләнең сығымдары ла күбәйә. Шуға күрә ата-әсә иңенә күберәк аҡса табыу бурысы ята. Был осраҡта инде, әлеге ҡайһы бер ауылдарҙағы кеүек, эш юҡ, тип өйҙә ятыу килешкән нәмә түгел. Әйткәндәй, минә үҙебеҙҙең филиалға ҡараған Баймаҡ, Әбйәлил, Йылайыр, Хәйбулла райондары буйлап йөрөргә, урындағы халыҡ менән осрашып, аралашып торорға тура килә. Бына шул ваҡытта бөгөнгө ауылдарыбыҙҙың йөҙөн күреп, эс бошоп китә: иҫкергән, ярым емерек баҡса кәртәләүҙәре, буш торған өйҙәр, һикәлтәле бысраҡ юлдар... (Быйыл тораҡ пункттар эстетикаһы йылы тип юҡҡа ғына иғлан ителмәгән икән шул). Ҡайһы бер ауылдарҙа бит хатта мал аҫрау, баҡса ултыртыу тигәнде лә онотоп баралар! Бөтә урындарҙа ла тип әйтмәйем, бик шәп, матур йәшәгән ауылдар ҙа бар. Тик бына алыҫтараҡ ятҡан төпкөл ауылдарҙа хәлдәр шулайыраҡ тора. Аңлашылмай: ялҡаулыҡмы был, әллә икенсе берәй сәбәптәре бармы? Күп нәмә ауыл биләмәләре етәкселәренә, уларҙың ойоштороу һәләтенә бәйле. Ә бит ғаиләлә үҫеп килгән балаларҙы баҡса, йорт эштәрендә булышырға, мал-тыуар ҡарашырға ла өйрәтеп, хеҙмәт тәрбиәһе биреп үҫтерергә кәрәк. Юғиһә, киләсәктә ата-әсәнән күрмәксе, эш юҡ, тип, фәҡәт дәүләттән генә ярҙам өмөт итеп ятмаҫтар, тимә...

Мин үҙем дә, ҡатыным да, мәҫәлән, бишәр балалы ғаиләлә үҫкәнбеҙ. Үҙебеҙ ҙә бөгөнгө көндә биш бала тәрбиәләйбеҙ, шуға күрә күп балалы ғаиләләрҙең хәлен ишетеп-күреп кенә белмәйем, үҙ елкәмдә татып беләм. Бының менән нимә әйтергә теләйем? Эйе, эш хаҡына ғына көн күреүе ауыр, шуға ла беҙ бөтөн нәмәне үҙебеҙ эшләргә тырышабыҙ: картуф һатып алмайбыҙ - күп итеп үҙебеҙ сәсәбеҙ, хатта һатырға ла артып ҡала. Башҡа төр емеш-йәшелсә лә үҙебеҙҙең баҡсанан. Ауыл ерендә йәшәйбеҙ. Утын да һатып алғаныбыҙ юҡ, үҙебеҙ бысып-ярып яғыулыҡ әҙерләйбеҙ. Былар бөтәһе лә ғаилә бюджетына бик ҙур еңеллек килтерә. Донъя хәлен белеп булмай: бөгөн былай булһа, иртәгә ҡалай булырын кем әйтә? Шуға ла балаларҙы бәләкәйҙән эшкә күнектереп, проблемаларҙы үҙаллы хәл итергә өйрәтеп үҫтереү мөһим тигән фекерҙәбеҙ. Дөрөҫ, икенсе балаға бирелгән әсәлек капиталына йорт һалып индек, өсөнсө бала аҡсаһына ер участкаһы алдыҡ - дәүләтебеҙгә рәхмәт, ләкин гел генә дәүләттән көтөп ултырмайбыҙ, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күрергә тырышабыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ӨФӨБӨҘ - ДАН ҠАЛА!

**Башҡортостандың баш ҡалаһына "Хеҙмәт ҡаһарманлығы һәм Дан ҡалаһы" тигән абруйлы халыҡ-ара исем бирелде. Герой-ҡалаларҙың дәүләт-ара союзы президиумы шундай ҡарар ҡабул итте.**



Абруйлы исем өфөләрҙең фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә күрһәткән ҡыйыулығы, хеҙмәт батырлығы, Ватан алдындағы ҙур ҡаҙаныштары, ил өсөн мөһим йылдарҙа республиканың баш ҡалаһына эвакуацияланған завод-фабрикалар, белем биреү, мәҙәниәт йорттары, интеллигенция вәкилдәренең еңеү көнөн яҡынлаштырыу өсөн ҙур фиҙаҡәрлек күрһәткәне өсөн тапшырылды. "Икенсе донъя һуғышы тамамланыуҙың 75 йыллығы уңайынан Өфө ҡалаһына "Хеҙмәт ҡаһарманлығы һәм Дан ҡалаһы" тигән халыҡ-ара маҡтаулы исем бирергә", - тиелә Герой-ҡалаларҙың дәүләт-ара союзының Башҡортостандың баш ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин исеменә ебәрелгән хатында.

12+

БЫНАҒАЙЫШ!

# СЕҮ, КОЛЛЕКТОР ИШЕК ШАҠЫЙ...



**Был коллектор тигәндәре яман бер төш булып онотолоп ҡына бара ине, тағы шулар хаҡында һүҙ ҡуҙғатыла. Күрәһең, беҙҙә шул туҡмаҡтан башҡа халыҡты тыңлата алмайҙар. Кешеләрҙең өйөнә баҫып инеп, ут төртөп, тәҙрәнән шартлатҡыс ташлап, көнө-төнө телефондан янап бер килке әҙәмдең ҡотон алып, донъяны дер һелкетеп торғайнылар бит бер осор ана шул әллә коллектор, әллә каратель тигән бәғерһеҙҙәр.**

Онотолоп бара ине, тиһәм дә, оноторһоң ундай аҡса һығыу ысулын. Ошо көндәрҙә килеп ишетелгән хәбәрҙәр буйынса, Рәсәй хөкүмәте тарафынан бурыстарҙы ҡайтарыу тураһында закондың яңы варианты әҙерләнә, имеш. Унда физик шәхестәрҙән бурыстарҙы ҡайтарыу буйынса айырым статья буласаҡ, тип хәбәр итә мәғлүмәтле сығанаҡтар. Ошоноң менән бәйле коллекторҙарға бурыслыларҙан аҡса талап итеү хоҡуғы биреләсәк. Дөрөҫ, коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурыс күләмен (1 трлн һум) банк кредиторҙары бурысы (15 трлн) менән сағыштырырлыҡ та түгел, әлбиттә. Беҙҙә бит халыҡ, үҙегеҙ беләһегеҙ: нимә-нимә, әммә коммуналь хеҙмәттәр өсөн ваҡытында иҫәпләшеп барыуҙы хуп күрә. Айырыуса пенсионерҙар. Пенсия аҡсаһы килеү менән улар иң тәүҙә "квартплата" түләргә йүгерә. Йүгерә алғандары. Башҡалары ла әмәлен күрә һала, моңһоҙ ятып ҡалмай. Бары тик бер түләмәгән кеше түләмәй ҙә түләмәй, бурысы тиҫтәләгән, йөҙләгән меңдән ашып китә, ундайҙарҙы инде "злостный неплательщик" тип атай торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре. Шуға ла коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурыстарҙы ҡайтарыу буйынса эш фронты ҙур аҡса артынан ҡыуып өйрәнгән был бизнес эйәләренә әллә ни ҙур килем килтермәҫ тигән фекерҙә эксперттар. Шунлыҡтан, был эшкә тотонмауҙары ла бар. Ысынлап та, был башланғыстың, ғөмүмән, киләсәге юҡ, тип бара күптәр. Сөнки коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәрҙе йыйыусы идарасы компанияларҙың бурыслылар менән аралашыу мөмкинлектәре киңерәк һәм, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, кешелеклерәк тә. Хатта әлеге "злостный"ҙарҙың фатирына йә йортона электр энергияһы, газ һәм һыу биреүҙе өҙөү юлы менән аҡылға ултыртырға тырышыу осраҡтары ла бик һирәк. Эйе, хәҙер коллекторҙарға ла элекке "туҡмаҡ" алымдарын онотоп, замансараҡ эш ысулдары һайларға тура киләсәк, әгәр аҡса ҡайырыу эшенә тотона ҡалһалар. Тотонмай ҙа хәлдәре булмаҫ, әгәр быны тейешле власть органдары рәсми талап итә ҡалһа.

Ә был йүнәлештә әҙерлек эштәре бара ла икән әле. Юстиция министрлығында әҙерләнгән коллекторҙар эшмәкәрлеге хаҡында яңы закон проекты 2021 йыл ғәмәлгә инәсәк, тиҙәр. Был закон проектында, үрҙә әйтелеүенсә, бурыстарҙы ҡайтарыу эшенә хоҡуҡ алыусы профессиональ коллекторҙар тип исемләнгән айырым һөнәр төрө хаҡында һүҙ бара. Шуныһы күңелде бер аҙ йылыта: был документта коллекторҙарға ҡарата ҡәтғи талаптар ҙа ҡуйыла: бурыслылар менән закон нигеҙҙәрендә эш итергә, улар менән алып барылған һөйләшеүҙәр һәм хат алышыуҙарҙың төп нөсхәләрен һаҡлап барырға һ.б. Икенсе яҡтан, улар эшмәкәрлегенең кәрәклеге шуның менән дәлилләнә: был киләсәктә бурыслылар өҫтөнән яуған ялыуҙарҙы тикшереп, ҡарап өлгөрә алмаған суд органдары һәм приставтар эшен бер аҙ еңелләштерәсәк икән.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...



## Рәсәй Президенты балалы ғаиләләргә быйыл тәүге балаға ла матди ярҙам күрһәтеләсәге хаҡында иғлан итте. Был социаль контракт атай-әсәйҙәрҙең яуаплылығын арттырасаҡмы, тормоштарын яҡшыртасаҡмы?

(Башы 1-се биттә).

***Наилә ХӨСНУЛЛИНА, ике бала әсәһе:*** Ысынлап та, ил тормошонда ҙур ҡыуаныслы яңылыҡ булды Рәсәй Президентының быйылғы Мөрәжәғәтнамәһе, хатта уны тарихи ваҡиға тип тә атарға мөмкиндер, моғайын, сөнки ошоға тиклем ғаилә һәм балалар, шулай уҡ уҡытыусылар хаҡында бындай хәстәрлектең булғаны юҡ ине. Һәйбәт, әлбиттә, ләкин программа үҙәгендә хәле үтә мөшкөл, ярлы ғаиләләр күҙҙә тотола. Үкенескәме, әллә ҡыуаныскамы - беҙҙең ғаилә был социаль ярҙам проектына эләкмәй ҡала. Шөкөр, ғаиләбеҙ хәлен улай уҡ мөшкөл тип тә әйтә алмайым (ирем дә, үҙем дә меҫкенләнергә өйрәнмәгәнбеҙ), ә шулай ҙа айына 30 меңгә яҡын ипотека түләү барыбер хәлде ала икән шул... Ике балаға балалар баҡсаһына айына 6 мең, унан ҡала коммуналь хеҙмәттәр өсөн, унан иҫәпһеҙ-һанһыҙ башҡа сығымдарҙы иҫәпләй башлаһаң, барыбер әлеге ярлылар рәтенә инеп киткәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Ә бит коммуналь түләүҙәргә лә хаҡ артҡандан-арта бара. Шуға ҡарамаҫтан, беҙгә бер ниндәй ярҙам юҡ. Дөрөҫ, элек эшләгән ойошманан ай һайын 50 һум күсерәләр ине, мин тәүҙә уның ни икәнен дә аңламаным, баҡтиһәң, балаға пособие булған икән...

Мин балалар менән мәшғүл, ә иремә ал-ял белмәй эшләргә тура килә, нисә йыл хәҙер уның отпуск тигән нәмәне күргәне лә юҡ. Әлбиттә, беҙ ҙә ултыра алыр инек эшһеҙ-ашһыҙ, дәүләт ярҙамы көтөп, ләкин бит балаларҙы үҫтерергә, үҙ өлгөңдә эшлекле, яуаплы, тырыш, үҙаллы кешеләр итеп тәрбиәләргә кәрәк. Эш юҡ, тип өйҙә ятһаң, улар кемдән ниндәй өлгө аласаҡ? Балаларҙы тапҡас, уларҙы ҡарарлыҡ мөмкинлегең дә, хәлең дә булырға тейештер. Ә бына күршебеҙҙәге яңыраҡ ҡына ғаилә ҡорған йәштәр ярҙам алыр, тип уйлайым. Улар әлеге ваҡытта тәүге сабыйҙарына бирелергә тейешле 300 мең пособиены юллап йөрөй. Тиҙҙән икенсе бәпес тә килтерергә йыйыналар. Тимәк, улар дәүләт ярҙамына өмөт итә ала, тигән һүҙ, бирһен Хоҙай. Был йәш ғаиләнең башлығы Себерҙә эшләй ине, хәҙер ғаиләһе янына ҡайтты, хеҙмәт хаҡы бик ҙур булмаһа ла үҙебеҙҙә эш тапты. Тимәк, дәүләт ярҙамы киләсәктә аҫраусылары ситтә йөрөгән һәм шунлыҡтан айырым йәшәгән ғаиләләрҙе бергә туплап, ҡайтанан ҡауыштыра, бөтәйтә лә аласаҡ.

***Марат СӘФӘРҒӘЛИН, күп балалы ғаилә башлығы:*** Әлегә күп балалы тип әйтеп булмаһа ла, өсөнсө сабыйыбыҙҙы ошо көндәрҙә көтөп торабыҙ. Иң мөһиме - кәләштең иҫән-һау бушанып, сәләмәт сабыйҙың донъяға килеүе. Әсәлек капиталына ҡағылышлы яңылыҡтарҙы беҙ генә түгел, ауылдағы аралашып йәшәгән ғаилә дуҫтарыбыҙ ҙа бик ҡыуанып ҡабул иттек. Уларҙың да икешәр, өсәр балалары бар. Ғаилә башлыҡтарының береһе лә эшһеҙ ултырмай: улар araһында фермер ҙа, водитель дә, пекарня хужаһы ла бар. Беҙ ҡатыным менән мәктәптә уҡытабыҙ. Бынан бер нисә йыл элек икенсе балаға тейешле сертификат менән файҙаланғайныҡ инде: бәләкәйерәк булһа ла үҙебеҙгә айырым йорт һалып сыҡтыҡ. Туғандар ҙа ныҡ ярҙам итте, әлбиттә. Хәҙер шул йортҡа төкәтеп, уны ҙурайтыбыраҡ төҙөргә лә мөмкинлек булыр, тип өмөтләнәм. Йорт янында баҡсабыҙ бар, ҡошҡорт, мал-тыуар тотабыҙ. Теләгең, дәртең булһа, ауыл ерендә бына тигән итеп йәшәргә мөмкин. Шуныһы ла бик мөһим: һауаһы һулап туйғыһыҙ, экологик таҙа ризыҡ менән туҡланыу ҙа һау-сәләмәт балалар үҫтерергә булышлыҡ итә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ӘҘӘПҺЕҘЛЕГЕН...

## байраҡ итә түгелме?

Бер ижадсы егетте күҙәтеп барам. Һәләте бар һымаҡ, уҡымышлы ла үҙе. Быны мин үҙем уҡыған бер нисә генә әҫәренән алып та әйтә алам. Тик бына нимә бит әле: ул егет тәртипһеҙме, тәкәбберме. Кеше буларак уны ижады менән бер нисек тә йәнәш ҡуя алмайым. Олоно оло итә белмәй, кесене әҙәмгә һанамай, үҙ туҡһаны туҡһан. Күп кенә зыялылар, һүҙ оҫталары уға тартыла, күңеленә шаҡыйҙар - уға барыбер. Йә, барыбер ҙә булһын ти (ундай хәлдәр ҙә була), шул кешеләрҙе ул "тешләп" тә ала бит. Ауыҙ тултырып "Рәхмәт" тип әйтеү уның өсөн яза, минең уйымса. Әҙәпһеҙлеген байраҡ итеп йәшәгәндәр була, шулар рәтенән, күрәһең. Еңел бит, бер кемгә бер нимә тейеш түгелһең, бөтәһе лә һиңә тейеш, йәнәһе, күрәһегеҙме, мин ниндәй, ә һеҙ... фиии!

Бер мәл социаль селтәрҙә яңы сәхифә асып, мине лә саҡырҙы был. Дуҫтар булып киттек. Бәй, бер ҡараһам, күмә-ә-әк булып "ишеге төбөндә" торабыҙ. Был, кәйефенә ҡарап, бөтәбеҙҙе лә сәхифәһенән сығарған да бәргән. Һы, мин бит бер ерҙә лә ишек төбөн тапап торғаным юҡ, ҡайттым да киттем (тегеләрҙе кире керткән)...

Ул егетте батырыу өсөн яҙманым. Йәмғиәтебеҙҙә бындай күренештәр бик күп. Бер-береңде хөрмәт итеү, тәртип, әҙәп, олоно ололау төшөнсәләре юҡ кимәлгә төшөп бармаймы икән? Ошо турала һеҙ ҙә фекерегеҙҙе яҙығыҙ әле.

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Радий Хәбиров Миәкә районына эш сәфәре барышында район хужалыҡтары етәкселәре менән аралашты. Башҡортостан агросәнәғәт комплексына ярҙамды арттырырға һәм ауыл халҡына субсидиялар менән ярҙам итергә ниәтләй, тип билдәләне республика Башлығы. Уның һүҙҙәренсә, агросәнәғәт комплексы проблемаларын тикшереү, халыҡтың үҙҙәренең проблемаларын һәм тәҡдимдәрен әйтеү мөмкинлеге булһын өсөн айырым майҙансыҡ булдырыу хаҡында уйларға кәрәк.

✓Владимир Путин Рәсәй Федерацияһы Дәүләт советы президиумының яңы составын раҫланы. Уға һигеҙ төбәк башлығы инде. Улар - Санкт-Петербург губернаторы Александр Беглов, Волгоград өлкәһе губернаторы Андрей Бочаров, Ҡабарҙы-Балҡар башлығы Казбек Коков, Сахалин өлкәһе губернаторы Валерий Лимаренко, Тверь өлкәһе губернаторы Игорь Руденя, Алтай крайы губернаторы Виктор Томенко, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров һәм Ҡурған өлкәһе губернаторы Вадим Шумков.

✓Радий Хәбиров Көйөргәҙе районына эш сәфәре барышындағы аралашыу ваҡытында быйыл республикала 500-ҙән ашыу кеше йәшәгән ауылдарҙы даими автобус бәйләнеше менән тәьмин итеү бурысы тороуы хаҡында һөйләне. "Ауыл халҡының күп функциялы үҙәккә, дауаханаға, район хакимиәтенә килеү мөмкинлеге булһын өсөн был бик мөһим", - тине ул.

✓Башҡортостанда "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк хоҡуҡ яҡлау үҙәген асырға тәҡдим ителде. Ул республикала йәшәүселәргә юридик ярҙам күрһәтергә, ауыр хәлдән сығырға булышлыҡ итергә тейеш. Партияның "Яңыртыу 2.0" дискуссияһында ҡаралған тағы бер мөһим мәл - партия фондының ауыр тормош хәлендә ҡалған граждандарға матди ярҙам бүлеү тәҡдиме. Партияның ауыр хәлдә ҡалғандарға ярҙам күрһәтеү фондын булдырыу тәҡдиме республика Башлығы Радий Хәбировта хуплау тапты.

✓1 февралдән Рәсәйҙә социаль түләүҙәр һәм пособиелар 3 процентҡа индексациялана. Мәғлүмәттәр буйынса, һүҙ Советтар Союзы Геройҙарына, Рәсәй Федерацияһы Геройҙарына, Дан орденының тулы кавалерҙарына, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына, Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт Геройҙарына, Хеҙмәт Даны орденының тулы кавалерҙарына айлыҡ түләүҙәр хаҡында бара.

✓ *Башҡа йылдарҙағы кеүек үк, кәбисә йылында ла яҡшыһы ла, башҡаһы ла булып торор, барыһын да шөкөр итеп ҡабул ҡылырға, мәгәр төрлө мәлдәргә лә әҙер булырға, тик ниндәй хәлгә лә бирешмәҫкә кәрәк.*



БЫЛ АЙҘА...

**Әле ҡыштың ысын йөҙөн йүнләп күргән дә юҡ, ә унның яртыһы үтеп тә китте. Илдең күп төбәктәрендә, шул иҫәптән Мәскәүҙә, Питерҙа ошоға тиклем плюс температура булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең Башҡортостанда, шөкөр, ҡар ҙа етерлек яуып тора, буранлап та ала, ә инде көндәрҙең йылы булыуы, бер яҡтан, ҡаты һыуыҡтарға ҡарағанда кешеләр өсөн дә, башҡа төр тереклек өсөн дә яҡшыраҡтыр ҙа, бәлки. Ә шулай ҙа ҡыш ахыры яҡынлаша тип ҡыуанырға иртәрәктер әле: көн торошо белгестәренең ҡайһылары ысын ҡышты февралдә йә мартта күрерһегеҙ, тип тә ҡотто ала.**

# ШАҠАЙ ШЫҠЫРАЙТЫРМЫ?

Ә сиратта - шаҡай. "Уҫаллығы" менән билдәле, ҙәҡҡә үтер һыуыҡтары менән шыҡырайтыр был ай бөгөнгө климат шарттарында ҙен нисек күрһәтер - ҡарарбыҙ. Һәр хәлдә, күптәрҙе көн торошона ҡарағанда быйылғы шаҡайҙың кәбисә йылына сәбәпсе булыусы 29-сы көнө хафаға һала. Халыҡта бындай йылдарҙы именлек, сәләмәтлек, уңыш алыу йәһәтенән хәүефләнеберәк ҡаршылау ғәҙәте бар, әммә тормошҡа реаль күҙлектән, позитив ҡараусылар бындай ырымға ышанмаҫҡа саҡыра. Башҡа йылдарҙағы кеүек үк, кәбисә йылында ла яҡшыһы ла, башҡаһы ла булып торор, барыһын да шөкөр итеп ҡабул ҡылырға, мәгәр төрлө мәлдәргә лә әҙер булырға, тик ниндәй хәлгә лә бирешмәҫкә кәрәк, сөнки заманыбыҙ климат каприздары ғына түгел, сәйәси, социаль-иҡтисади йәһәттән дә сюрприздарын күрһәтеп кенә тора. Нимәһенә гәжәп ҡылып, аптырарға өлгөрәһең! Аптырамайыҡтар, күптән инде сынығырға ваҡыттыр беҙгә лә. Айыҡ аҡыл, һалҡын ҡан менән донъялар именлеге теләп, ғаиләләребеҙ бөтөнләгө һәм, иң мөһиме, һәммәбеҙҙең сәләмәт булыуы өсөн тырышып йәшәй бирәйек.

Әйткәндәй, шаҡай айында тап ана шул сәләмәтлек темаһы йыш телгә алынаҫҡ та. Бөтөн донъя яман шеш сирҙәренә ҡаршы көрәш **(4)**, Бөтөн донъя сирлеләр **(11)**, Халыҡ-ара яман шеш менән сирләүсе балалар **(15)**, Халыҡ-ара һирәк (генетик) сирҙәр **(29)** көндәре эргәбеҙҙә һанаулы ғүмер сәғәттәрен иҫәпләп, аяуһыҙ сирҙән интегеп, һәр яҡты көнгә өмөт менән сарсап йәшәгән кешеләр донъяһы барлығын иҫкә төшөрөп тора. Ысынлап та, ҡайһы ваҡыт юҡ-бар сәбәптәрҙән дә туҙынып, нервыларыбыҙҙы ҡаҡшатып алыу ғәҙәтебеҙ бар. Ә бит уйлап ҡараһаң, ошо яҡты донъяла һаусәләмәт булыуыңа ғына ла битеңде биш һыпырып, шөкөр итеп кенә йәшәрлек! Хәйер, ауырыу хәлен һау белмәҫ, тип дөрөҫ әйтелгән шул. Яңыраҡ Росстат Рәсәйҙә һаулыҡ һаҡлау торошо буйынса 2019 йыл мәғлүмәттәрен баҫтырып сығарҙы. Илдә яман шеш сире диагнозы ҡуйылған ауырыуҙар һаны күрһәткесе һаман да әле элеккесә бик юғары ҡала. Ул рәсәйҙәрҙең үлеме сәбәптәре буйынса йөрәк-ҡан тамырҙары сиренән ҡала икенсе урында килә. Бындай сирлеләр һаны 1995 йылдан алып туҡтауһыҙ арта бара. Яман шеш менән сирлеләрҙең артыуына экология ла, йәшәү рәүеше лә, дөрөҫ туҡланмау ғәҙәттәре лә, башҡа күп сәбәптәр ҙә булышлыҡ итә. Рәсәйҙә онкология учреждениеларында диспансер күҙәтеүендә торған ауырыуҙар һаны 3 762 218 кеше булһа, Башҡортостанда - 83 992. Республикала айырыуса һөт биҙҙәре, йыуан эсәк, үпкә, тире, ирҙәрҙең енес биҙҙәре, ашҡаҙан яман шеш сирҙәре йыш осрай. Табиптар, ғәҙәттә, кеше иғтибар итеп бармай торған, ләкин яман сиргә юлыҡтырыуы ихтимал булған түбәндәге билдәләрҙе атай: оҙаҡҡа һуҙылған йүткереү, ҙҙәк көйөү, миң булған урындың яндырыуы, оҙаҡҡа һуҙылған лимфа биҙҙәре шеше, оло ярауҙағы ҡан. Ошо билдәләр буйынса табипҡа барып күренергә иренмәгеҙ, тип кәңәш бирә улар. Шул уҡ ваҡытта сиргә килтереүсе ҡайһы бер сәбәптәр ҙә әйтелә: көүҙәнең артыҡ ауырлығы, ит һәм эшкәртелгән ит аҙыҡтарын күп ҡулланыу, алкоголь, тәмәке, вирустар (гепатит С, В, герпес, папиллома һ.б.), шәкәр, быҫраҡ һауа, автомобилдән бүленеп сыҡҡан ҡалдыҡ газ, пластмасса һ.б. Сәләмәт булырға теләһәң, бының күп йәһәттән үҙ ҡулыңда икәнен оноторға ярамай. Медицинаға көнөң ҡалмаһын өсөн беренсе сиратта сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыу мотлаҡ. Бының да биш шартын килтерә табиптар: тәмәке тартмаҫҡа; араҡы эсмәҫкә; көнөнә көмендә 400 г йәшелсә, емеш-еләк ашарға; физик әүҙемлеккә ынтылырға (аҙнаһына 150 минут уртаса йәки 75 минут көсөргәнешле физик көс түгергә); тоҙҙо самалап (тәүлегенә 5 грамдан артмаһын) ҡулланырға. Росстат белдереүенсә, былтыр илдә сәләмәт тормош менән йәшәгән граждандар өлөшө ни бары 12 процент тәшкил иткән... Бәләкәй генә бер миҫал. Беҙҙең редакция урынлашҡан күп ҡатлы йорттан 75 йәштәр самаһындағы бөлтерәп бөткән бер ҡартты ҡатыны ҡултыҡлап көн һайын саф һауа һуларға алып сыға ине. Бер аҙҙан был ир скандинав таяҡтарына таянып йәйләп кына йөрөй башланы. Ике-өс йыл үткәндер, хәҙер был кешене танырлыҡ та түгел: ҡатыны уның артынан ҡыуып та етә алмай. Сәләмәт булырға теләгә көслө кеше беҙҙең күҙ алдында шулай теремекләнеп, шәбәйеп китте. Был миҫал күптәребеҙгә яҡшы һабаҡ бирә.



Шаҡайҙа билдәләнәсәк башҡа ҡайһы бер иҫтәлекле көндәр: Сталинград һуғышында совет ғәскәрҙәре немец фашистарын тар-мар итә **(2 февраль 1943)**, Рәсәй фәне **(8)**, Граждандар авиацияһы хеҙмәткәрҙәре һәм Теш табиптары **(9)**, Бөтөн донъя радио **(13)**, Компьютерсы, Ғашиҡтар һәм Халыҡ-ара китап бүләк итеү **(14)**, Рәсәй студент отрядтары, Бөтөн донъя мәрхәмәтлек (сәләмлəү) **(17)**, Транспорт полицияһы **(18)**, Бөтөн донъя социаль ғәҙеллек **(20)**, Халыҡ-ара туған тел **(21)**, Ватанды һаҡлаусылар **(23)**, Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагы **(25 февраль 1992)** көндәре.

**Шаҡайҙа тыуғандар:**

**1** - композитор, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Айрат Ҡобағошовҡа - 70 йәш** (1950).

- прозаик, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш.Бабич исемендәге дәүләт премияһы, М.Кашғари исемендәге V халыҡ-ара хикәйәләр конкурсы лауреаты **Фәрзәнә Аҡбулатоваға - 60 йәш** (1960).

**2** - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1995-2005 йылдарҙа БР мәҙәниәт министры, БР Премьер-министр урынбаҫары, 1, 2, 5-се саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Хәләф Ишморатовҡа - 60 йәш** (1960).

**3** - хирург, дауалау эштәре буйынса БДМУ проректоры, медицина фәндәре докторы, профессор, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Мәжит Нартайлаковҡа - 60 йәш** (1960).

**5** - педагог, тел белгесе, дәүләт эшмәкәре, 1985-1988 йылдарҙа БАССР мәғариф министры, педагогия фәндәре кандидаты, БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы **Сәбилә Сөләймәноваға - 80 йәш** (1940).

- А.Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры актеры, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Зәкирйән Хановтың тыуыуына - 100 йыл** (1920-1990).

**12** - йырсы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының вокал артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Роза Аҡкучуковаға - 70 йәш** (1950).

**16** - яҙыусы, шағир, тәржемәсе, журналист, СССР яҙыусыларының 1 Бөтөн союз съезы делегаты **Булат Ишемғолдың** (Ғабдрахман Ғабдрахманов) тыуыуына - **120 йыл** (1900-1938).

**18** - бейеүсе, 1941-1963 йылдарҙа Халыҡ бейеүҙәре дәүләт ансамбле артисы, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, Бөтөн донъя йәштәр һәм студенттар фестивале лауреаты, "Почет билдәһе" ордены кавалеры **Мөхәмәт Иҙрисовтың** тыуыуына - **100 йыл** (1920-2012).

**20** - журналист, яҙыусы, "Атайсал" гәзите мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Хәйҙәр Тапаҡовҡа - 65 йәш** (1955).

**21** - яҙыусы, СССР яҙыусыларының 1 Бөтөн союз съезы делегаты, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Һәҙиә Дәүләтшинаның** тыуыуына - **115 йыл** (1905-1954).

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан хөкүмәте 2024 йылға гражданлыҡ һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәрен 25 процентҡа ҡыҫҡартырға йыйына. Министрҙар кабинетының республика үҫеше программаһының маҡсатлы йүнәлештәрен аныҡлауға арналған ултырышында ошо хаҡта һүҙ барҙы. Биш йыл һайын хеҙмәткәрҙәр һаны, план буйынса, 5 процентҡа кәмергә тейеш.

✓Берҙәм дәүләт имтиханын йөҙ балға яҙған уҡыусылар әҙерләгән өсөн уҡытыусылар 50 мең алыуҙары мөмкин. Республика Башлығының "Башҡортостан Республикаһы белем биреү ойошмаларының Берҙәм дәүләт имтиханында максималь балл йыйған уҡыусылар әҙерләгән уҡытыусыларына бер тапҡыр бирелә торған аҡса түраһында"ғы указы проектында ошо хаҡта әйтелә.

✓Башҡортостанда яңы йыл каникулдарында тау саңғыһы курорттарына килеүселәр һаны ике тапҡырға артҡан. Республика ҡунаҡханаларында һәм шифаханаларында 29 меңдән ашыу турист теркәлгән. Өфөлә бер нисә көн дауам иткән TERRA ZIMA фестивалендә 50 меңдән күберәк ҡунаҡ ҡатнашҡан. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһының Туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Салауат Нафиҡов хөкүмәттәге оперативкәңәшмәлә хәбәр итте.

✓"Төркиә һауа юлдары" авиакомпанияһы март айынан Истанбул - Өфө рейстары йышлығын өстән дүрткә тиклем арттырырға йыйына. Әле ул был йүнәлештә аҙнаһына өс рейс (дүшәмбе, шаршамбы һәм йома) башҡара. Марттан авиакомпания йәкшәмбелә рейс асырға ниәтләй.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путиндың йөкләмәһендә 31 июлгә тиклем Рәсәй ҡануниәтенә балалы ғаиләләргә льготалы ипотека биргән банктар һәм Пенсия фондының территориаль органдары араһында "шул иҫәптән электрон үҙ-ара эш итеүҙе ойоштороу иҫәбенә" ғаризаларҙы ҡарау ваҡытын ҡыҫҡартыу өсөн үҙгәрештәр индерергә кәрәклеге турһында әйтелә. Йөкләмәне үтәү өсөн илдең премьер-министры Михаил Мишустин яуап бирә.

✓Архитекторҙарҙы Өфөлә "Ватан" этнопаркын һәм яҡындағы биләмәләрҙе төҙөкләндереүҙең комплекслы проектын әҙерләү өсөн Бөтә Рәсәй архитектура-ҡала төҙөлөшө конкурсында ҡатнашырға саҡыралар. Сараны ойоштороусылар - Өфө мэрияһының архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идаралығы менән берлектә Рәсәй Архитекторҙар союзы. Конкурсҡа йомғаҡ 27 мартта яһала.

✓ *Факультет составында Көнсығыш телдәрен өйрәнеү үҙәген ойоштороу, шулай уҡ факультетҡа Рухи үҫештең ресурс үҙәген индереү тураһында мәсьәлә профессорҙар һәм уҡытыусылар менән тикшерелде.*



ҠЫҪҠАСА

# МАҠСАТ ШУНДАЙ

✓ Башҡортостанда Торлаҡ пункттар эстетикаһы йылының төүге маҡсаттарының береһе - 9 майға идеаль тәртип булдырыу, тип белдерҙеләр Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында. Бынан тыш, быйыл Бөтә донъя фольклориадаһын уҙғарыу өсөн ынғай мөхит булдырыу мөһим. Дүрт төп йүнәлеш һайланған: газондар эшләү, тротуарҙарҙы тәртипкә килтереү, урамдарҙы яҡтыртыу, ҡоймалар ҡуйыу, дөйөм алғанда, ҡасабаларҙың тышҡы күренештәрен берҙәм стандартҡа килтереү. Муниципаль һәм шәхси предприятиелар биләмәләрҙе йыйыштырыу һәм тәҙҡләндереү буйынса мәсьәләләрҙә берлектә хәл итергә тейеш. Урындағы төҙөлөш материалдарын файҙаланырға кәңәш ителә. Февралдә уларҙың күргәҙмәһе ойоштороласаҡ. Ҡоймаларҙы биҙәүгә килгәндә, властар төбәктең һәм урындағы биләмәләрҙең милли традицияларға таянырға тейешлеген дә билдәләй.

✓ Башҡортостандың ун продукты "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" программаһына индерелә. Улар - икмәк-күмәс һәм кондитер изделиелары, башҡорт сәк-сәге һәм бауырһаҡ, әҙер беренсе һәм икенсе ризыҡ, шулай уҡ профессиональ һауыт-һаба һәм фарфор изделиелар етештереүселәр. "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" проекты республикала 2013 йылдан алып үҫешә. Әле ул 403 аҙыҡ-түлек етештереүсене һәм 41 аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған әйберҙәр етештереүсене берләштерә. "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" проектына инеү һәм сараларҙа ҡатнашыу бушлай, йәғни республика етештереүселәренән аҡса һалыу талап ителмәй. Аҙыҡ-түлеккә "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" билдәһен ҡуйыуға рөхсәт алыу өсөн ғаризаны проекттың рәсми сайтында productrb.ru йәки 8 (347) 282-97-30 телефоны буйынса ҡалдырырға мөмкин.

✓ Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы баҫма һәм электрон киң мәғлүмәт саралары араһында "Башҡортостандыҡы - модала" конкурсын уҙғара, унда социаль селтәрҙәге яҙмалар ҡатнаша ала. Конкурс өс номинация буйынса ойоштороla: башҡорт аш-һыуы, ауыл хужалығы продукцияһының сифатын, әҙерләү барышын сағылдырған иң яҡшы фото; башҡорт аш-һыуы, ауыл хужалығы продукцияһының сифаты, әҙерләү барышы тураһында иң яҡшы видеосюжет; башҡорт аш-һыуы, ауыл хужалығы продукцияһының сифаты, файҙаһы, әҙерләү барышы темаһына социаль селтәрҙә, мәғлүмәт сайттарында иң шәп яҙма йәки мәғлүмәт. Еңеүселәргә һәм призерҙарға дипломдар һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырыла. Ғаризалар 30 сентябргә тиклем йыйыла, уларҙы makarova.om@bashkortostan.ru адресына ебәрергә кәрәк.

✓ Башҡортостан юлдарында 2020 йылға планлаштырылған 609 юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы автоматик фотовидеотеркәү комплексының 150-һе ҡуйылды. "Төүге 150 комплекс Әбйәлил, Ауырғазы, Бөрө, Благовещен, Борай, Дәүләкән, Дүртөйлө, Илеш, Туймазы, Учалы, Шишмә, Яңауыл райондарында, шулай уҡ Нефтекамала һәм Ағиҙелдә эшләй. Уларҙың бөтәһе лә тиҙлек режимын боҙоуҙарҙы теркәй", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтенән. Ҡалған 459 комплексты бөтә ерҙә лә 2020 йылдың 1 майына тиклем файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана. 2017 йыл менән сағыштырғанда, ошо проект ярҙамында республикала юл фажиғәләрендә үлем осраҡтарын 3,5 тапҡырға кәметеү планлаштырыла. Бынан тыш, проект юлдарҙа юл-транспорт ваҡиғалары йыш теркәлгән урындарҙы ике тапҡырға кәметеүҙә күҙ уңында тота.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӨРКИӘ МЕНӘН...



**Башҡортостанда Төрөк Республикаһының Почетлы консулы институтын асыу ҡарала. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров менән осрашыуҙа Төрөк Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Мәхмәт Самсар белдерҙе.**

Республика йортондағы осрашыуҙа ҡатнашыусылар берлектәге проекттарҙы, атап әйткәндә, башҡорт-төрөк проекттары тарихында иң күләмлеләренең береһен - Өфөнән Көнсығыш сығыу юлын тикшерҙе. "Беҙ төрөк бизнесының Башҡортостан Республикаһына ҡыҙыҡһыныуын тоябыҙ. Тағы бер мөһим проект - бала табыу йортонoң яңы корпусын төҙөү", - тип хәбәр итте Радий Хәбиров. Төрөк бизнесмендары менән "Өфө" аэропортында ҙур транспорт терминалы, шулай уҡ ҙур спорт объекттары - Көрәш һарайы, Волейбол һарайы төҙөү тураһында һөйләшеүҙәр алып барылыуы хаҡында ла хәбәр итеп, Радий Фәрит улы: "Шуныһы мөһим: традицион мәҙәни бәйләнештәрҙән тыш, берлектәге инвестиция проекттары тормошҡа ашырыла, - тип билдәләне. - Тиҙҙән Төрөк Республикаһында, Истанбул ҡалаһында, Башҡортостан Республикаһы вәкиллегенең асылыуы беҙҙең тышҡы иҡтисади эшмәкәрлекте йәнләндереүгә булышлыҡ итер тип ышанам". Мәхмәт Самсар иһә киләсәктә төрөк министрҙарының Башҡортостанға сәфәре планлаштырылыуы хаҡында һөйләне.

# ЕВРОПА БАҘАРЫНА ЮЛ

**Башҡортостан ауыл хужалығы етештереүселәренең үҙкиммәте буйынса түбәнерәк продукцияһы Европа фермерҙарының продукцияһы менән уңышлы конкурентлыҡ итергә мөмкин, тип иҫәпләй республика хөкүмәте вице-премьеры һәм ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.**

Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә ул 40 кешенән торған Башҡортостан делегацияһының Берлинға "Йәшел аҙна" күргәҙмәһенә барыуы хаҡында һөйләне. Башҡортостан стенды Рәсәйҙең 18 төбәге менән бер рәттән күргәҙмәлә ҡатнашты. Вице-премьер Австрияның ауыл хужалығы министры Элизабет Кёстингер менән осрашты һәм хеҙмәттәшлек тураһында һөйләшеп килеште: республика технологиялар һәм тоҡом малы һатып алырға, Европаға ошо ил аша үҙ продукцияһын оҙатырға ниәтләй, тине чиновник. Европала етештереү кризисына һәм бер үк ваҡытта продукцияның үҙкиммәте артыуына бәйле күп кенә фермерҙар бөлгөнлөк хәлендә, улар Рәсәйҙән конкурентлар килеүенә шат түгел, тип иҫкә төшөрҙө Илшат Фәзрахманов. Ул илебеҙ продукцияһы был баҙарҙы яулап алыр тиғән ышаныста.

# ФАКУЛЬТЕТ ЯБЫЛМАЙ

**"Башҡорт филологияһы факультетын ябыу тураһында һүҙ бармай", тип белдерҙе М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Салауат Сәғитов.**

Уның юғары уҡыу йорто сайтында баҫылған мөрәжәғәте киң мәғлүмәт сараларындағы факультетты бөтөрөү хаҡында мәғлүмәткә яуабы булды. Педагогия университеты етәксеһе һыҙҙәренсә, факультет составында Көнсығыш телдәрен өйрәнеү үҙәген ойоштороу, шулай уҡ факультетҡа Рухи үҫештең ресурс үҙәген индереү тураһында мәсьәлә профессорҙар һәм уҡытыусылар менән тикшерелде. "Фекер алышыу барышында факультетты Башҡорт телен үҫтереү буйынса ғилми-белем биреү үҙәге тип үҙгәртеү мәсьәләһе күтәрелде. Быны факультет студенттары һәм уҡытыусылары менән дә тикшерҙек һәм ҡәҙимгесә "факультет" тип ҡалдырырға тигән фекергә килдек", - тип хәбәр итте Салауат Сәғитов. "Бөгөн башҡорт филологияһы факультеты алдына ҡуйылған төп бурыс - динамик үҫешкә сығыу, башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү, был процесҡа иң яҡшы ғалимдарҙы йәлеп итеү", тип билдәләне ректор.

# БҮЛЕП ТҮЛӘРГӘ..

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай "Торлаҡ мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында" республика законына үҙгәрештәр ҡабул итте.**

2017 йылдың авгусында республикала 2025 йылға тиклем яңы ярҙам сараһын - йәшәргә яраҡлы торлаҡты ҡуртымға биреүҙе һәм уны 15 йыл дауамында бүлеп түләү шарты менән һатып алыуҙы күҙ уңында тотҡан Граждандарҙың ҡайһы бер категорияларын торлаҡ менән тәьмин итеү концепцияһы раҫланды. Яңы механизмды табиптарҙы торлаҡ менән тәьмин итеү өсөн файҙаланыу планлаштырыла. Йәш ғалимдарға - 35 йәшкәсә фән кандидатарына һәм 40 йәшкә тиклемге фән докторҙарына ла шундай хоҡуҡ бирелә. Схеманы индереүҙә Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү фонды ҡатнаша. Фонд ҙур предприятиелар менән хеҙмәттәшлек итер һәм уларҙың хеҙмәткәрҙәренә торлаҡ һатыр тип планлаштырыла. Шулай уҡ Торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү фондының торлаҡты муниципаль йәки дәүләт милкенә тапшырырға мөмкин, был республикала махсуслаштырылған торлаҡ фондын булдырырға мөмкинлек бирергә тейеш.

# КАРАНТИН!

**Башҡортостанда киҙеү һәм киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләүселәрҙең күп булыуы сәбәпле ҡайһы бер мәктәптәр һәм балалар баҡсалары белем биреү процесын туктата. Мәктәптәрҙә кластар һәм балалар баҡсаларында төркөмдәр өлөшләтә ябыла.**

Башҡортостан Республикаһы Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау өлкәһендә күҙәтеү һәм кеше именлеге буйынса федераль хеҙмәт мәғлүмәттәренә ҡарағанда, уҙған аҙнала Башҡортостанда 20 916 кеше киҫкен респиратор вирус инфекцияһы һәм киҙеү менән ауырып киткән, Өфөлә 6 700 кешегә диагноз ҡуйылған. Шулай ҙа республикала әлегә киҫкен респиратор вирус инфекцияһы һәм киҙеү буйынса эпидемия юҡ, тип белдерә ведомство. Сағыштырыу өсөн: былтыр ошо осорҙа ауырыуҙың эпидемик сиге юғарыраҡ булған. Эксперттар Рәсәй биләмәһендә коронавирустың яңы штаммы таралыуын фаразлай, тип хәбәр итә ТАСС. Сәбәптәре бер нисә. Улар араһында - вирустың һауа аша йоғоуы, сирҙең тиҙ таралыуы, Ҡытайҙың Приморье һәм Хабаровск крайы, Йәһүд автономиялы округы һәм Амур өлкәһе менән сиктәш төньяҡ провинцияларында яңы осраҡтарҙың асыҡланыуы, шулай уҡ ҡытай календары буйынса Яңы йылды байрам итеү.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Йылайырҙа һәм Илеш районының Ябалаҡ ауылында быйыл ике яңы мәҙәниәт объекты төҙөлә. Төҙөлөшкә аҡса "Мәҙәниәт" милли проекты сиктәрендә бүленде. Был программа буйынса 2019 йылда Салауат районының Мөрсәлим ауылында яңы клуб һалынды, Түбәнге Ҡыйғы ауылында заманса кинозал асылды, Дыуан һәм Бөрйән райондарында - реновация, Миәкә районында капиталь ремонт үткәрелде.

✓27 ғинуарҙа - Ленинград ҡамауын өҙгән көндә - Башҡортостандың барлыҡ ҡалаларында һәм райондарында "Блокада икмәге" республика акцияһы уҙҙы. Акцияны ойоштороусылар - "Рәсәй әҙәрмәндәр хәрәкәте"нең төбәк бүлексәһе, Башҡортостандың йәштәргә илһөйәрлек тәрбиәһе биреү һәм хәрби хеҙмәткә тиклемге әҙерлек үҙәге, "Юнармия"ның төбәк штабы.

✓Рәсәй география йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе 2020 йылда "Торатау" геопарк биләмәһенә этнографик (урындағы халыҡтан материалдар йыйыу), ҡаргиҙәр (тәбиғәт ҡомартҡыларын тикшереү), археологик (объекттарҙы инвентаризациялау) экспедициялар үткәрергә ниәтләй. Был материалдар геопаркты ЮНЕСКО-ның глобаль селтәренә индереүгә гариза әҙерләү өсөн кәрәк.

✓Республика райондарында һәм ҡалаларында "Беҙ - Бөйөк Еңеү йыйъязмасылары" темаһына ғилми-тикшеренеү эштәре республика конкурсының төбәк этабы бара. Ғаризалар ҡабул итеү ваҡыты 10 февралгә тиклем оҙайтылған, ә ғилми-тикшеренеү эштәрен 10 мартҡа хәтлем тапшырырға кәрәк.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы - бер бүлмәле фатирҙар арзанайған берҙән-бер миллионлы ҡала. Domofond.ru сервисы тикшереүселәре мәғлүмәттәре буйынса, Өфөлә бер бүлмәле фатирҙар 0,5 процентҡа осһоҙланған. Бынан алда ошондай фатирҙарҙың уртаса хаҡы 2 235 968 һум булһа, хәҙер - 2 225 674.

✓Ресурс менән тәьмин иткән ойошмаларға торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре хаҡын арттырған өсөн штраф һалыуҙары ихтимал. Хөкүмәт Дәүләт Думаһына ошондай закон проектын индерергә ниәтләй, тип хәбәр итә "Известия". Торлаҡ кодексының 157-се статьяһына төҙәтмәне күҙ уңында тотҡан документты Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы әҙерләргә тейеш.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Йыйылған шыршы махсус ҡорамалда ваҡланып, юнысҡылар артабан тупраҡтың структураһын яҡшыртыуҙа ҡулланыла, уны теплицаларҙа, питомниктарҙа, роза сәскәләрен ҡаплау материалы итеп файҙаланырға мөмкин.*

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# СИР ТОРОП ТОРҺОН...

## Еңеү юбилейына әҙерләнәйек!

**Һуңғы көндәрҙә йәмғиәт бөтөнләй албырғап ҡалды: Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһе, тиҙ арала яңы Хөкүмәт булдырылыуы һәм Конституцияға үҙгәрештәр индереү буйынса закон проектының Дәүләт Думаһына беренсе уҡыуға индерелеүе ваҡиғаларына етди иғтибар биреп, был аҙымдарҙы анализларғамы, әллә Ҡытай тарафынан янаған яңы коронавирус инфекцияһына иғтибар йүнәлтеп, һаҡланыу саралары күрергәме? Нисек кенә булмаһын, һәр хәлдә лә кеше үҙенең ғүмерен һаҡлауҙы беренсе урынға ҡуя. Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә лә иғтибар үҙәгенә тап ошо мәсьәлә сығарылды.**

Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина белдереүенсә, республикала Ҡытай Халыҡ Республикаһының Ухань ҡалаһында билдәһеҙ ауырыу осраҡтары тураһында беренсе мәғлүмәттәр билдәле булыу менән киң күләмле эпидемияға ҡаршы саралар комплексы үткәрелә башлай. Әлеге ваҡытта республикалағы эпидемиологик хәл-торош даими күҙәтеү аҫтында, санитар-карантин контролен көсәйтеү буйынса өҫтәмә саралар күрелә, коронавирус инфекцияһына шик тыуғанда, медицина персоналының эшмәкәрлеге алгоритмы эшләнгән. Шулай уҡ БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән берлектә, сир асыҡланған осраҡта, ауырыуҙарҙы ҡабул итеү, уларҙы башҡаларҙан айырыу һәм тәрбиәләгән кешеләрҙе медицина күҙәтеүенә алыуға әҙерлек эштәре башҡарылған. Бынан тыш, шикле осраҡ күҙәтелгәндә, лаборатор диагностика үткәреү алгоритмы эшләнгән. "Өфө" аэропортында сир асыҡланған илдәрҙән килгән пассажирҙарҙы ентекле тикшереү ойошторолған", - ти Галина Пермина. Әйткәндәй, тап оператив кәңәшмә барған ваҡытта "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы сайтында Ҡытайҙан килгән ике кешене коронавирус инфекцияһы шиге менән аэропорттан 4-се республика инфекция дауаханаһына алып китеүҙәре хәбәр ителгәйне. Бәхеткә күрә, был факт раҫланманы. Әлеге ваҡытта халыҡ араһында профилактика-аңлатыу эштәре киң йәйелдерелгән - сит илдәрҙән ҡайтҡан йәки килгән кешеләр өсөн анкеталар һәм иҫкәрмәләр таратыла, экипаж һәм пассажирҙар яңы инфекция хаҡында иҫкәртелә. Шулай уҡ граждандарға Ҡытайға сәйәхәткә юлланыуҙан тыйылып торорға кәңәш ителә. Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, үҙеңә лә ауыҙ асып йөрөргә ярамай. Ни тиһәң дә, 29 ғинуар кисенә ҡарата Ҡытайҙа яңы сирҙән 132 кеше вафат булған, илдең 30 төбәгендә барлығы 4515 кеше зарарланыуы теркәлгән. 6973 кешелә вирус булыуы ихтимал. Табиптар сирлеләр менән бәйләнештә булған 44 меңдән ашыу кешене тикшереүгә алған.

Көн тәртибендә ҡаралған икенсе мәсьәлә - ҡала бюджетының уҙған йылдағы үтәлеше булды. Хакимиәт башлығы урынбаҫары - Финанс идаралығы начальнигы Гөлнара Вәлиева белдереүенсә, төп документтың төп параметрҙары үтәлгән. Былтыр ҡала бюджетына 33 миллиард 44 миллион һум килем ингән (2018 йыл менән сағыштырғанда 5 миллиард 415 миллион һумға, йәғни 19,6 процентҡа күберәк). Һалым һәм һалым булмаған килем 13 миллиард 410 миллион һум, йәғни былтырғы менән сағыштырғанда 1 миллиард 251 миллион һумға артығыраҡ тәшкил иткән (10,3 процентҡа күберәк). Бюджет килеме артыуға ябайлаштырылған һалым һалыу системаһы буйынса берҙәм түләүҙәр нормативын 10 проценттан 50 процентҡа тиклем күтәреү сәбәп булып торған. Мәғлүм булыуынса, ҡала бюджетының ҙур өлөшөн күсемһеҙ милекте ҡуртымға биреүҙән ингән түләүҙәр алып тора. Шуға ла быйыл күсемһеҙ милек объекттарын инвентаризациялау, ер участкалары һәм башҡа күсемһеҙ милек хужаларын асыҡлау, уларҙы һалым түләүгә йәлеп итеү, ҡуртымға һәм наемға бирелгән муниципаль торлаҡ фондынан йыйымдар системаһын камиллаштырыу, административ комиссиялар һалған административ штрафтарҙы йыйыу буйынса эшмәкәрлек алып барыласаҡ.

Был юлы иһә кәңәшмәгә йыйылыусылар алдында Совет районы хакимиәте башлығы Рөстәм Рәхмәтуллин отчет биреп, коммуналь хеҙмәттәрҙең ҡышҡы миҙгелдә нисек эшләүе, авария хәлендәге йорттарҙан ғаиләләрҙе, рөхсәтһеҙ урынлаштырылған гараждарҙы күсереү, төрлө программаларҙы тормошҡа ашырыу тураһында һөйләне. Билдәләнеүенсә, Совет районы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына ла етди әҙерләнә. Ойоштороласаҡ саралар планы раҫланған, эшсе төркөм билдәләнгән. Былтыр декабрҙә элек госпиталь булып хеҙмәт иткән 44-се мәктәп бинаһына иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылған. Тимер юл вокзалы территорияһында 9 Майҙа фронтҡа киткән яҡташтар хөрмәтенә мемориал асыу планлаштырыла.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# ШЫРШЫ ӨСӨН - МАНДАРИН



**Өфөлә "Шыршыларҙы - юнысҡыға" тигән акция башланғас, беҙ ҙә Яңы йыл беҙҙәге булған шыршыбыҙҙы алып барып тапшырҙыҡ. Бында ла Ҡыш Бабай буш итмәне, тапшырылған шыршыға алмашҡа мандарин биреп ҡыуандырҙы.**

Мөмкинлектән файҙаланып, бер ыңғай шундағы хеҙмәткәрҙәрҙән был акция тураһында ентекләберәк белешергә булдым. Баҡтиһәң, баш ҡалалағы "Горзеленхоз" предприятиеһы йыл һайын Яңы йыл байрамдарынан һуң шыршыларҙы йыя икән, быйыл иһә ул ошо акция менән тап килгән. Йыйылған шыршы, ҡарағай һәм пихта ағастары махсус ҡорамалда ваҡланып, юнысҡылар артабан тупраҡтың структураһын яҡшыртыуҙа ҡулланыла, уны теплицаларҙа, питомниктарҙа, роза сәскәләрен ҡаплау материалы итеп файҙаланырға мөмкин, тиҙәр. Акцияның икенсе маҡсаты - хәҙер сүп-сарҙы айырым йыйыу һәм уларҙы икенсел сеймал итеп ҡулланыу көн үҙәгенә сығарылғас, Яңы йыл байрамының төп хужаһын да артабан файҙаланып, халыҡҡа ҡулланылған нәмәләрҙән нисек итеп икенсе тапҡыр файҙа алырға мөмкин икәнен күрһәтәләр.

Ысынлап та, бөтөн сүп-сарҙы бергә болғап, барыһын бергә алып барып ауҙарып, уларҙы айырыусыларға күпме мәшәҡәт тыуҙырабыҙ, күпме кешенең ваҡытын алабыҙ икән дәбаһа! Шулай, яйлап, Яңы йыл шыршыларын айырым алып барып тапшырған кеүек, башҡа ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын да өйҙә үк айырып, балаларға ла бәләкәйҙән үк ошо ҡағиҙәне өйрәтеп үҫтерһәк, бәлки, донъябыҙ ҙа, тәбиғәтебеҙ ҙә бер аҙ таҙарып ҡалыр ине.

**Самат АЙСИН.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# РӨХСӘТ КӘРӘК

**Рәсәйҙең Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексына электр һәм йылылыҡ селтәрҙәренә ҡабаттан рөхсәтһеҙ тоташтырған өсөн ҙур штрафты күҙ уңында тотҡан төҙәтмәләр индерелде.**

Президент Владимир Путин ҡул ҡуйған закон Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекстың 7.19-сы статьяһына яңы бүлек индерә. Төҙәтмәләргә ярашлы, электр һәм йылылыҡ селтәрҙәренә ҡабаттан рөхсәтһеҙ тоташтырған өсөн "граждандарға - 15-30 мең һумға, вазифалы кешеләргә 80-200 мең һумға тиклем штраф йәки икенән алып өс йылғаса квалификацияһын алыу ҡаралған; юридик берәмектәргә - 200-300 мең һум". Әммә яңы бүлек нефть, газ һәм нефть продукттары үткәргестәренә рөхсәтһеҙ тоташтырыу осраҡтарына ҡағылмай, тиелә документта. Селтәрҙәргә рөхсәтһеҙ тоташтырған өсөн беренсе тапҡыр физик берәмектәргә - 10-15 мең, вазифалы кешеләргә - 30-80 мең, юридик берәмектәргә 100-200 мең һум штраф һалына.

# ШТРАФ ТОС ҠЫНА

**Башҡортостанда контейнер майҙансыҡтарында, ҙур габаритлы ҡалдыҡтарҙы һаҡлау майҙансыҡтарында, сүп-сар ҡабул итеү камералары биналарына ингән ерҙә парковка өсөн штраф һалыуҙы күҙ уңында тотҡан закон үҙ көсөнә инде.**

Автомобилселәр - 1-2 мең һум, вазифалы кешеләр - 5-10 мең һум, юридик берәмектәр 20-30 мең һум түләргә тейеш. Ҡабаттан тәртип боҙған граждандарға - 3-4 мең һум, вазифалы кешеләргә - 15-20 мең һум, юридик берәмектәргә - 35-50 мең һум штраф. Закон идара итеүсе компанияларҙың, коммуналь ҡалдыҡтарҙы йыйыу һәм сығарыу менән шөғөлләнгән ойошмаларҙың республика парламентына күп һанлы мөрәжәғәттәре йомғаҡтары буйынса әҙерләнде һәм ҡабул ителде, тип билдәләне Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. Штрафтар контейнер майҙансыҡтарын эксплуатациялау менән шөғөлләнгән, халыҡтың йәшәүен тәьмин итеү объекттарында аварияле һәм башҡа ашығыс эштәр башҡарған хеҙмәттәрҙең автомобилдәренә ҡағылмай.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Шәкәр ауырыуы

❖ 4 мандаринды таҙартып, ҡабығын ваҡларға һәм ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Бөтә әҙерләмәне 3 өлөшкә бүлергә. Тәүҙә бешкән ҡабыҡтарҙы ашарға, һыуын эсергә һәм 2 мандарин бүлкәһе ашарға. Ике аҙна ошо тәмле дауаны ҡулланып шәкәр кимәлен күтәрергә була.

### Һалҡын тейгәндә

❖ Тигеҙ миҡдарҙа арыҫлан ҡойроғо үләнен (пустырник) һәм цикорий тамыры онтағын ҡатыштырырға. 1 балғалаҡ ҡатышмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп бешерергә һәм 1 сәғәт төнәтергә. Дауаланыу өсөн көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ киптерелгән дегәнәк япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡасы ябылған һауытта 15 минут пар өҫтөндә тоторға. Шунан бүлмә температураһында һыуытып, һөҙөргә. Был рәүешле әҙерләнгән дауа температураны төшөрөргә яҡшы ярҙам итә, һыуыҡ тейгәндә уны ашағандан һуң көнөнә 4-6 тапҡыр йылымыс көйө 1 ҡалаҡ эсергә кәрәк. Тамаҡ ауыртҡанда көнөнә бер нисә тапҡыр ошо төнәтмә менән сайҡатыу ярҙам итер.

### Үҙәк көйгәндә

❖ Бер тотам киптерелгән йәки йәш меңъяпраҡ үләнен эмалле кәстрүлгә һалып 3 л ҡайнар һыу ҡойоп, яҡшылап төрөп ябып, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк 3 литрлыҡ банкаға һөҙөп алырға, 1 ҡалаҡ шәкәр һәм фундук сәтләүеге дәүмәлендәй генә сүпрә киҫәге ҡушырға. Бер тәүлек торорға, шунан шешәләргә ҡойоп һыуытҡысҡа ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡлап эсә башларға, ҡапыл күп ҡабул итеүҙән ашҡаҙан ауыртыуы бар. Ошо 3 литр төнәтмәне эсеп бөтөргә.

### Бауырҙы таҙартыу

1 килограмм күк һуғанды таҙартып ит үткәргестә ваҡларға һәм 900 г шәкәр ҡушырға. Яҡшылап бутарға һәм 10 көн төнәтергә. Әҙерләнгән дауа бөткәнсе көнөнә 3 тапҡыр берәр ҡалаҡ ашарға. Бауырҙы таҙартыу курсын бер йылдан һуң ғына ҡабатларға ярай.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Азия һәм Европа халыҡтарының һуңғы осорҙарға ҡараған биҙәү-ғәмәли сәнғәтендә был элементтың киң таралғанлығын бик күп этнография һәм сәнғәт фәне буйынса яҙылған мәҡәләләр раҫлай. Традицион орнаментҡа бағышланған бер нисә хеҙмәттә биҙәктәрҙең типологик һәм генетик оҡшашлығы мәсьәләһе хәл итеүлә, шул иҫәптән кәкерсәктәрҙән торған биҙәктәрҙең дә. С.В. Иванов Себер халыҡтарының орнаментын тикшергәндә составында ҡусҡар мөгөҙгә оҡшаш фигураларҙан тыш йөрәк рәүешендәге, лираға оҡшаш, осары "мөгөҙлө" тәреләр, һынар, парлы ишелмәләр (спираль), ике ослоо ырғаҡтар (интеграл) булған көньяҡ Себер төрөн бүлеп күрһәтә; ҡайһы берҙә был биҙәктәр ҡыя шаҡмаҡтар (башҡорттарҙа кеүек - авт.) менән берләштерелгән йәки үлән үренделәренә, япраҡтарға әүерелеп киткән. Оҡшаш орнамент хакас, тува халҡының бер өлөшөн, алтай (кижи, теленгит), яҡут, бүрәт халыҡтарын берләштергән. Уның айырым мотивтары Себерҙең тайга халыҡтары сәнғәтенә лә килеп ингән (эвенк, шор, долган); улар үҙгәртелгән рәүештә булһа ла Амур буйы халҡында ла осрай. С.В. Иванов Себер материалында айырып күрһәтелгән материалдағы орнамент төрө шулай уҡ "Урта Азия халыҡтарында, бигерәк тә ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ һәм тау тажиктарында таралған" тип билдәләй. Бөтәһендә лә тиерлек ул ҡайыу сәнғәтендә ныҡлы урын биләгән. Композициялар йыш ҡына ҡатмарлығы буйынса айырылып торған. Ҡара ерлеккә төшкән биҙәк сағыу төҫтәре менән күҙҙең яуын алып торған. Өҫ кейемен, аяҡ кейемен, бейәләй, сергетыш, түшәктәрҙе ҡайып биҙәгәндәр. Орнаментҡа, башҡорттарҙа кеүек үк, металл айылдар, мәрйен, төҫлө буҫтау киҫәксәләре ҡушып эшләнгән.





Сергетыштарҙағы нағыш үрнәктәре (БР, Белорет районы). Т.К. Сурина фотоһы. 1976

Светлана ШИТОВА.

"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.

КӨНАУАЗ

**Башҡорт халҡында бер кинәйәле хикәйәт бар: бер ҡарт урам буйында үҙенең улын сыбыҡ менән ҡайыҙлай икән. Үтеп барған һылыу: "Бабай, ниңә үҫеп бөткән улыңды сыбыҡлайһың?" - тип һорағас: "Бына, ҡушмайынса бер нәмә лә эшләмәй бит", - тигән ти. Ҡыҙ көлөп: "Сыбыҡла, әйҙә, үҙе белеп эшләгәнгә тиклем", - тип көлөп, китеп барған. Һуңғы ваҡытта Башҡортостанда барған ваҡиғалар ағышы ошо хикәйәтте иҫкә төшөрә, сөнки бөтөн ерҙә республика Башлығының ауыҙынан берәй һүҙ сыҡһа, шунда уҡ эләктереп алып, тормошҡа ашыра йәки үтәй башлайҙар. Әйтерһең дә, быға тиклем ул проблема булмаған да. Радий Хәбиров республиканан ситкә сығып эшләүсе вахтовиктар тураһында бер нисә тапҡыр һүҙ ҡуҙғатҡайны, йәмәғәтселек уны шунда уҡ элеп алды. Һәр кем ниндәйҙер мөғжизәгә өмөтләнде. Әйтерһең дә, республика етәксеһе тылсымлы таяғын һелтәп ебәрә лә, вахта ысулы менән эшләүселәр шунда уҡ тыуған ерҙәренә ҡайтып төшә. Әммә мәсьәлә улай ғына хәл ителерлек түгел шул.**

**"Электронная газета" базаһында үткәрелгән матбуғат конференцияһына йыйылыусылар был проблемаға төрлө яҡтан ҡараш һалырға тырышты. Республиканың профилле министрлыҡтары белгестәре лә, вахтала эшләүселәр ҙә, уларҙың тормош иптәштәре лә ҡатнашты унда.**

# СЕБЕР КИТӘ ИРҘӘР...



## Себер китә ҡыҙҙар...

Башҡортостан Республикаһының ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Фәнүр Шәйхисламов белдереүенсә, статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, бөгөн республиканан ситтә 150 мең кеше ваҡытлыса, йәғни 2-3 ай ҡайтмай эшләй. Күпселегенең эш урыны Төмән өлкәһендә, Ханты-Манси, Ямал-Ненец автономиялы округтарында.

Стратегик тикшеренеүҙәр институты социологтары вахтовиктарҙың социологик портретын бына нисек һүрәтләй: "Ғаиләле 35-45 йәштәрҙәге ир-ат. Ауыл ерендә йәшәй. Белеме - урта һөнәри. Бик йыш техник һөнәргә лә эйә. Нефть йәки газ компанияһында тир түгә. Ҡатын-ҡыҙҙар, киреһенсә, 18-35 йәшлек. Бик йыш айырылған була. Вахта осоронда балаларын ата-әсәһенә ҡалдыра. Дөйөм туҡланыу, хеҙмәтләндереү (мәҫәлән, поездар проводницаһы) өлкәһендә эшләй".

Фәнүр Рәфис улы республикала 42 мең вакансия булыуын билдәләп, вахта буйынса эшкә китеүселәрҙе "оҙон аҡса артынан баралар" тип билдәләүе, әлбиттә, был категорияға ҡараған граждандарҙың ҡатындарына оҡшамай. Ире ЯНАО-ла вахтала эшләгән Анна Чезова ир-аттарҙың вахта тормошоноң да еңелдән булмауына бик күп миҫалдар килтерҙе: "Улар оҙон аҡса артынан китмәй, ә ғаиләһен аҫрау, балаларына лайыҡлы тормош тәьмин итеү ниәтенән ситкә китә", - тип, ул декретта ултырғанында иренең бер айҙа 12 мең һум эш хаҡы алып ҡайтып, шунан һуң вахта менән эшләргә сығып китеүен һөйләне. Шулай уҡ ул белгестәргә төрлө тармаҡтарҙа тариф сеткаларының һуңғы тапҡыр ҡасан үҙгәртелеүе менән ҡыҙыҡһынғандары бармы икәнен дә белеште.

Башҡортостан Республикаһының сәнәғәт һәм энергетика министры урынбаҫары Урал Насибуллин белдереүенсә, бөгөн иҡтисад секторында эш хаҡы айына уртаса 42 мең һум тәшкил итә. Иң юғары күрһәткес нефть сәнәғәтендә - 74 мең һум. Тире-күн сәнәғәтендә - 32, еңел сәнәғәттә - 18 мең һум. Ягыулыҡ-энергетика комплексында эш хаҡтары ҙур, әммә был тармаҡтар ни бары 9 проценты ғына алып тора. Төмән, ХМАО, ЯНАО-ла уртаса эш хаҡтары айына 71-100 мең һум тәшкил итә.

Өфө ҡалаһы Халыҡтың мәшғүллек үҙәге дәүләт ҡаҙна учреждениеһы директоры Рәзинә Насырова бөгөн баш ҡалала 23 меңдән ашыу вакансия булыуын, уларҙың 80 проценты самаһы эшсе һөнәрҙәренә тура килеүен билдәләне. Мөрәжәғәт иткән 1400 кешенең 400-ө эшкә урынлаштырыла, шул иҫәптән 200-ө - Мәскәү, Санкт-Петербург, Төмән, Сорғот, Краснодар ҡалаларына вахта ысулы менән эшләргә ебәрелә. Унда эш хаҡтары беҙҙәгегә ҡарағанда 1,5-2 тапҡырға юғарыраҡ. Мәҫәлән, ХМАО-ла водитель-машинист 50 мең һумдан ашыу эш хаҡы алһа, Өфөлә ул 29 мең самаһы ала. Электромонтажсы вахтала 100 мең һум алһа, Өфөлә был күләм - 42 мең һум.

Эйе, бер ай эшләп, бер ай өйҙә ятыу ысулы был осраҡта үҙен аҡламай, шуға күрә вахтовиктар тотош 3-4 ай эшләп ҡайтырға тырыша. Хатта 8 айға 10 көн генә ял итеүселәр ҙә бар. Әлбиттә, бындай режим уларҙың сәләмәтлегенә лә йөғонто яһамай ҡалмай. "Вахтала эшләүселәр өсөн ниндәйҙер социаль гарантиялар булдырылһын ине. Улар аҙ ғына ваҡытҡа ҡайтып киткән арала дауаханаға табипҡа яҙылып өлгөрөп булмай. Яҙылған хәлдә лә, башҡа табипҡа күренеп өлгөрә алмайҙар", - ти Анна Чезова. "Улар бит икенсе төбәктә эшләй, һалымды ла унда түләйҙәр, ә ни өсөн башҡалар кеүек республикала социаль гарантияларға эйә булырға тейештәр һуң?" - тип һорау биреүселәр ҙә булыр. Әммә вахтовиктарҙың эшләп алып ҡайтҡан аҡсаларын республикала тотоноуҙарын да оноторға ярамай. Шулай уҡ уларҙың Башҡортостан дауаханаларында хеҙмәтләндерелеүе лә аҡсаны урында ҡалдырыуҙың бер ысулы.

Матбуғат конференцияһында күтәрелгән проблемаларҙың тағы береһе - ул граждандарҙың ниндәй килешеү нигеҙендә эшләүе. Шул уҡ Анна Чезова белдереүенсә, Пенсия фонды хеҙмәткәре менән һөйләшкәндә ул шуны асыҡлаған: баҡтиһән, ваҡытлы килешеү нигеҙендә эшләүселәр үҙҙәре лә һиҙмәҫтән "тоҙаҡҡа" эләгә икән. Аныҡлап әйткәндә, ваҡытһыҙ килешеүҙе кеше бер тапҡыр төҙөй ҙә, шул нигеҙҙә эшләп тик йөрөй, әммә уның буйынса эш хаҡы түбәнерәк. Ынғай яғы - эшләгән ваҡытың да, ялға ҡайтҡан ваҡытың да стажға инә. Ваҡытлы килешеү билдәле бер ваҡытҡа ғына төҙөлә (мәҫәлән, ярты йылға, бер йылға), һуңынан ҡабатҡабат оҙайтыла. Был килешеүгә ярашлы эш хаҡы ҙурыраҡ, ләкин өйҙә ял итеп ятҡан ваҡыт стажға инмәй. Күптәр был хаҡта, әлбиттә, белмәй һәм күберәк аҡсаға алданып эшләй бирә, ә пенсияға сығырға ваҡыт еткәс, ошо мәлдәр асыҡлана һәм тағы ла нисәләр йыл эшләргә тура килә. Тимәк, вахта ысулы менән эшләргә теләүселәргә хоҡуҡи белем дә, алдан махсус ойошмалар һәм ведомстволарҙа консультация алыу ҙа кәрәк. Бындай вариант булыу ихтималлығы хаҡында хатта сарала ҡатнашыусы министрлыҡ вәкилдәре лә хәбәрҙар булмай сыҡты.

"Беҙҙә гастарбайтерҙар эшләй. Түбән эш хаҡына ла ризалар. Уларҙы ҡабул итмәйенсә, үҙебеҙҙең кешеләргә ҙурыраҡ эш хаҡы түләп, республикала ҡалдырып булмаймы?" тип тә һорау бирҙе журналистар. Баҡтиһән, сит ил эшселәрен йәлеп итеүгә махсус квота бар һәм был исемлек федераль миграция хеҙмәте тарафынан раҫлана икән. Уға ярашлы, төҙөлөшкә - 20, ауыл хужалығына - 50, сауҙаға 30 процент гастарбайтер ҡабул ителә ала. Ә инде транспорт тармағында уларҙың күләме 28 проценттан артмаҫҡа тейеш. Шундай бартер килеп сыға: Башҡортостан күрше өлкәләр, Рәсәйҙең башҡа төбәктәре өсөн кадрҙар әҙерләй, ә беҙҙе сит ил граждандары хеҙмәтләндерә. Федераль кимәлдә хәл ителгән мәсьәлә булғас, уларҙан да баш тартып булмайҙыр, күрәһең. Шулай уҡ үҙебеҙҙән ир-егеттәрҙе, ҡатын-ҡыҙҙарҙы вахта менән эшләүҙән дә баш тартырға мәжбүр итеп булмай, сөнки был уларҙың конституцион хоҡуғы. Уларҙы тыуған яҡтарға ҡайтарыу ҙа мөмкин түгел - дәүләт лайыҡлы эш хаҡы менән дә тәьмин итә алмай. Бының өсөн яңы эш урындары, булғандарын үҙгәртеп ҡороу, заманға яраҡлаштырыу талап ителә. Тағы шуныһы бар: Башҡортостан элек-электән ауыл хужалығы төбәге булараҡ билдәле һәм халыҡтың 40 проценты самаһы ауыл ерендә йәшәй. Бөгөн иһә ауыл ерендә производство юҡ, тимәк, эш тә, аш та юҡ кимәлендә. Эш урындары булғандарҙың да эш хаҡы ҡала менән сағыштырғанда күпкә түбән. Шуға ла ауыл ир-егеттәренең күпләп Себергә китеүе лә осраҡлы түгел. Был йәһәттән Республика Башлығы Радий Хәбировтың Башҡортостандың һәр районында, дөйөм алғанда, барлығы 50 индустриаль, сәнәғәт һәм агросәнәғәт паркы төҙөү тураһындағы стратегик бурыс ҡуйыуы юҡҡа түгел. Уларҙа яңы эш урындары һәм юғары эш хаҡтары булыр, тип ҡыуаллана. Әммә бының өсөн ҙур аҡсалар, инвестициялар кәрәк. Һәм был тиҙ арала ғына башҡарыла торған эш түгел, ул йылдарға һуҙыласаҡ. Ә балалар, ғаиләләр бөгөн ашарға, кейенергә, лайыҡлы йәшәргә теләй... Шуға ла вахтовиктар һәм уларҙың ғаиләләре әлегә Республика Башлығы Радий Хәбиров вәғәҙә иткән сәй янындағы осрашыуҙы көтә...

Шәрифә САЛАУАТОВА.

✓ *Бәхеткә күрә, полковник бер ҡараштан уҡ барыбыҙға ла бик оҡшаны. Уның бик әҙерлекле, юғары культуралы кадровый офицер икәнлеге күренә. Ихласлығы, кешелеклеге, баҫалҡылығы күҙгә ташлана.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ШАНЛЫ ТАРИХЛЫ ҠАҢЛЫЛАР БЕҘ!

**Ҡаңлы ырыуы төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының Ыҡ-Ағиҙел төркөмөнә ҡарай. Этнографтар ҡаңлы ырыуының төп өс бүлеме булыуын билдәләй: ҡыр-ҡаңлы, иҙел-ҡаңлы һәм шәмшәҙе-ҡаңлы. Башҡа башҡорт ырыуҙарындағы кеүек үк, ҡаңлыларҙың да үҙҙәренә генә хас эске ырыу бүленеше бар, ул ара/нәҫел бәйләнештәренән хасил булып, билдәле бер атамаларҙан тора: аҡтау, күкәй, туҫары, ишәй, яҡшый, йөрәктау, көйөк, балғазы һ.б.**



Әлеге ваҡытта Башҡортостанда ҡаңлылар нигеҙләгән 110 ауыл бар. Бүҙдәк районындағы 43 ауылда, Туймазылағы - 21, Благоварҙағы - 16, Дүртөйлөләге - 12, Бөрөләге - 4, Бәләбәйҙәге - 6, Мишкәләге 3 ауылда ҡаңлы ырыуы вариҫтары йәшәй. Улар йылан, мең, дыуан, ҡобау, елдәк, ҡаршын, унлар ырыуҙары башҡорттары менән йәнәш һәм ҡайһы бер ауылдарҙа ҡатнашып-аралашып көн итә.

Тарихсы-ғалимдар ҡаңлы ырыуының тарихи тамырҙарын боронғо Үҙәк, Алғы һәм Урта Азия территорияһында хакимлыҡ иткән Иран һәм Туран илдәре ҡәүемдәре менән бәйле яҙма мәғлүмәттәр аша күҙаллай. Ысынлап та, ҡаңлы этнонимы әлегә тиклем ҡаҙаҡ, нуғай, ҡараҡалпаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк һәм башҡа төрки халыҡтарының ырыу-ҡәбилә атамалары составында һаҡланып ҡалған. Тап иран (фарсы) телле легендар Туран дәүләте хаҡындағы боронғо яҙмаларҙа Кангха, Канг, Кенгу атамалары тәүләп теркәлеп ҡалған икән. X быуатта йәшәгән күренекле фарсы шағиры Хәким Әбүл Ҡасим Фирҙәүси тарафынан яҙылған "Шаһнамә" эпик поэмаһында легендар арий батшаһы Фәридундың үҙенең өс улына үҙе биләгән ерҙәрҙе бүлеп биреүе хаҡында бәйән ителә. Унда "Ҡыйыу Турға сал сәсле хаким Туран һәм Чинды бирҙе биләр өсөн", тип әйтелә. Турҙың Сельм (Сарм) һәм Иредже (Арья) исемле туғандары ла була. Легенда буйынса, Сарм һәм Тур, туғандары Арьяның аталарының иң яратҡан улы булыуынан көнләшеп, уны үлтерә. Шунан һуң Туран һәм Иран араһында йөҙәр йылдарға һуҙылған һуғыш башлана. Ошо ваҡиғалар боронғо арийҙарҙың изге китабы Авестала, артабан сасанидтар империяһының "Хвадай-намаг" ("Хоҙайнамә") исемле рәсми эпосында сағылыш таба. Фирҙәүсиҙең "Шаһнамә"-һе лә ошо легендар эпостың поэтик варианты булараҡ ижад ителә.

Авеста китабында бәйғәмбәр Заратуштраның һыуҙар алиһәһе Ардви-Сура Анахитаға ошондай доға менән мөрәжәғәт итеүе хаҡында эпизод бар:

*"Шундай далан бирсе,*
*изге Ардви-Сура,*
*Йөҙләп Туран яугирын*
*юк итерлек,*
*Илле таҡкыр һуҡканымда*
*изге Канхала."*

Тимәк, Туран яугирҙары менән һуғыш булған ер Авестала изге Канха ере тип атала. Тикшереүсе С.П. Толстов ошо ерҙең Урта Азиялағы Хорезмда һәм уға яҡын территорияла булыуын фаразлай. Баҡтиһән, "Шаһнамә"лә Канг (Ҡаң) йә иһә Кангдиз (Ҡаң замогы) Туран батшаһы Афрасиабтың резиденцияһы сифатында күрһәтелгән икән. Ҡанг ҡәлғәһен Афрасиаб батшаның кейәүе Сиявуш төҙөткән була:

*"Йырлайым сал тарих*
*ғәмәлдәрен,*
*Данлы ҡала Канг*
*хаҡында, боронораҡ*
*Һалған уны шан-*
*шәһрәтле*
*Сиявуш батша."*

X-XI быуаттарҙа йәшәгән күренекле мосолман ғалимы Әл Бируни мәғлүмәттәренә ярашлы, тап Сиявуш батша хорезмшаһтарҙың артабан афригидсиявушидтар тип аталған династияһын нигеҙләй. Шулай ҙа С.П. Толстов: "Кангха - Хорезмға ҡарағанда киңерәк төшөнсә", тип тә иҫкәрмә яһап ҡуя.

Иран менән Туран араһындағы килешеү, арий принцы Сиявуш һәм Афрасиаб батшаның ҡыҙы Ференгис (Фарангиз) араһындағы никах менән нығытылған хәлдә лә, оҙаҡҡа бармай. Фирҙәүси поэмаһында, турандар сик буйы йылғаһы Амударъя аша сығып, килешеү улар ғяы-нан боҙолоуы хаҡында бәйән ителә. Иран батшаһы Кей-Кавустың улы Сиявуш ғәскәре менән үҙенең ҡайныһын ил эсенәрәк сигенергә мәжбүр итә:

*"Чач, Согд, Сәмәрҡәнд,*
*Бохара, Сепиджабты,*
*Ерен дә, тәхетен дә -*
*барыһын ташлап китте*
*Афрасьяб;*
*Әҙләмәне тәҡдим һәм*
*хәйләләр ҙә,*
*Ғәскәре менән Кангҡа*
*ашығыс сапты ул."*

"Шаһнамә" поэмаһында сағылдырылған мәғлүмәттәрҙән Турандың баш ҡалаһы Канг Һырдарья йылғаһы буйында урынлашҡаны беленә. Ул ошо замандағы Сепиджаб (Исфиджаб) ҡалаһынан (хәҙерге Чимкенттан йыраҡ түгел) төньяҡтараҡ, Ҡаҙағстандың Төркөстан ҡалаһына яҡын урында тәҙәлә. Тап ошо ерҙән "арийҙар иленә" походтар ойоштороло, ер эшкәртеүсе фарсылар 2 мең йыл дауамында тиерлек төньяҡ далалары күскенселәренең өҙләкһеҙ ябырылыуынан оло зыян күрә. Шуның өсөн Авеста китабы, артабанғы пәхләүи һәм яңы фарсы сәйәси-мәҙәни традицияһы туранлыҡҡа ҡарата нәфрәт менән һуғарылған.

Турандың Иранға ҡаршы алып барған һуғыштарында берзула һәм алан яугирҙары ла ҡатнаша, һуңғылары Кавказ тарафтарында көн иткән ҡәүемдәрҙән. Боронғо грек яҙмаларына ярашлы, аландар массагеттар тип аталған этник берләшмәгә ҡараған халыҡ була. Тикшереүсе И.В. Пьянков та массагеттарҙы Туран вариҫтарына индерә.

Беҙҙән эраға тиклем 530 йылда фарсы батшаһы Бөйөк Кир II, ошоға тиклем Мидия, Вавилон, Лидия дәүләттәрен буйһондороп, массагеттарға ҡаршы походҡа сыға. Күскенселәрҙең Томирис исемле батшабикәһе Кирға бына ошолай янаған: "...массагеттарҙың хужаһы ҡояш аллаһы менән ант итәм, мин ысынлап туйғансы ҡан эсеремен һинә". Әммә Кир ошо кисәтеүгә иғтибар итмәй, һәм ул бәләгә тарый. Амударъя йылғаһының көнсығыш ярында фарсы ғәскәре һәләкәткә дусар ителә, ә массагеттар батшабикәһе Кирҙың киҫеп алынған башын ҡан менән тулы турһыҡҡа һалдыртып ҡуя. Шул мәлдә Томирис былай тигән: "Бына мин хәҙер һинә, әйткәнемсә, туйғансы ҡан эсертәм".

Беҙҙән эраға тиклем 519 йылда фарсы батшаһы Дарий I массагеттарҙан (уларҙы фарсылар сак-тиграхаудтар, тип атаған) үс ала. Тарихи Бехистун яҙмаһында ошо хаҡта бына ниҙәр теркәлгән: "Дарий батша һөйләй: һуңынан мин ғәскәрем менән Сактар иленә ҡаршы барҙым. Шунан һуң осло башлыҡ кейеүсе сактар алышҡа сығыр өсөн ҡуҙғалды. Йылғаға килеп еткәс, мин ғәскәрем менән уның икенсе яғына сыҡтым. Шунан мин сактарҙың бер өлөшөн тулыһынса тармар иттем, икенсеһен әсиргә алдым... Уларҙың Скунх исемле юлбашсыһын әсиргә алдылар һәм миңә килтерҙеләр... Һуңынан ил минеке булды".

Тикшеренеүселәр раҫлауынса, фарсылар үҙҙәренең дошмандары булған күскенселәрҙе "сак" ҡушаматы менән атаған. Башлыса, был ҡушамат Туран ҡәүемдәренә ҡарай. Иран телле ҡәбиләләр араһында арья, тура, саирима (сармат), даһа этнонимдары ҡулланыла. Сак - башҡалар ҡушҡан исем, ул экзоним була. Иран телле ҡәбиләләрҙә эт культы таралған була, сөнки күсмә малсылыҡ менән көн иткән дала кешеләренә эт мал көтөү өсөн алыштырғыһыҙ ярҙамсы була. Хатта Кир батшаның бәпес сағынан уҡ эт имеп, тере ҡалыуы хаҡында ла легенда сығарылған була. Ә боронғо иран телендә эт һүҙе "spaka" рәүешендә булып, хәҙерге фарси, дари, таджик телдәрендә "саг", тип йөрөтөлә. Әйткәндәй, боронғо эт культының урта быуат башҡорттары телендәге сағылышы сифатында Эткөсәк, Этимгән, Эткол, Эткусты кеүек кеше исемдәрен килтерергә була.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Дивизияның тыуыуы

Тағы ла шул бик ныҡ күҙгә ташлана: кешеләр үҙ-ара бик тиҙ танышып, дуҫлашып ала, эс серҙәрен уртаҡлашалар, бер туғандар кеүек булып китәләр. Тимәк, улар бөтәһе лә бер үк тойғолар менән яналар.

Дивизияны бөтә республика төҙөй. Райондарҙан делегациялар килә. Йөкләп-йөкләп бүләктәр, кейем-һалым һәм башҡа күстәнәстәр килтерәләр.

Частарҙа хәрби тәртип үҙ урынында, һалдаттар ҙа, офицерҙар ҙа үҙҙәрен йыйнаҡ тоталар, күңелдәр ҙә көр. Ләкин "төп хужа" булмау нисектер һиҙелеп һәм күҙгә бәрелеп тора ине. Күрәһең, хәрби коллективтың уны башҡа коллективтарҙан айырып торған үҙенсәлеге, әйтер инем - үҙенең психологияһы бар: уның мотлаҡ үҙ башлығы - командиры булырға тейеш. Шуһыҙ, оломо йәки кесеме, берекмәне күҙ алдына килтереү мөмкин түгел...

Полковник Шайморатов килеү менән дивизияға бер юлы яңы ҡот, йәм инде, дәрт, рух артты.

Бәхеткә күрә, полковник бер ҡараштан уҡ барыбыҙға ла бик оҡшаны. Уның бик әҙерлекле, юғары культуралы кадровый офицер икәнлеге күренә. Ихласлығы, кешелеклеге, баҫалҡылығы күҙгә ташлана; бөтә торошонда аҡыллылыҡ, ниндәйҙер яғымлы йылылыҡ, тәбиғи ҡыйыулыҡ, рух көсө кешеләрҙе үҙенә ылыҡтырып тора.

Ул килгәс, дивизияла ысын мәғәнәһендә тулы ҡанлы тормош тоҡанып китте. Тәртип, ойошҡанлыҡ, ыҡсымлыҡ урынлашты.

Полковник, килеү менән үк, беҙгә, офицерҙарға, шулай тине:

- Шуны белегеҙ, иптәштәр: беҙ, һалдаттарҙы һуғышҡа өйрәтеү менән бер үк ваҡытта, үҙебеҙ ҙә өйрәнергә - уҡырға бурыслы. Хәҙерге һуғыш бик ҡатмарлы. Дошман мәкерле, тәжрибәле. Уны "бүрек менән бәреп" кенә еңеп булмаясаҡ.

Быуаса командирҙар өсөн махсус учение ойошторолмағайны әле. Килеүенең беренсе көндәренән үк М.М. Шайморатов ошо эште лә ойоштороп ебәрҙе һәм уның менән үҙе етәкселек итә башланы.

1942 йылдың 26 ғинуарында беҙҙең полктың даими командиры Таһир Кусимов та килде.

Оҙон буйлы, яурынтаҡ, бәһлеүән ҡәүҙәле егет, 1909 йылда тыуған. 1932 йылдан партия ағзаһы. Шул йылда Ҡазанда татар-башҡорт хәрби мәктәбен тамамлаған, кавалерист; үҙе уҡыған мәктәптә үк бер нисә йыл курс командиры була, ике йыл полк менән командалыҡ итә.

2-се, 3-сө полктың командирҙары Г.А. Нафиков менән Ғ.Д. Макаев бер ни тиклем элегерәк килгәйне, шуға күрә уларҙа әҙерлек эштәре тамам юлға һалынғайны инде. "Беҙҙең бурыс, - тине Кусимов, - уларҙы ҡыуып етеү һәм үтеп китеү!"

Инде полктың командиры ла булды, личный составы ла нигеҙҙә тупланып бөттө тиерлек. Хәҙер бурыс - полкты берҙәм, һуғышсан, командованиеның, Ватандың теләһә ниндәй заданиеларын да үтәүгә һәләтле хәрби часть итеп әҙерләү. Комиссар булараҡ, был бик ҡатмарлы эште башҡарып сығыуҙа мин үҙемдән дә яуаплылығымды аңлайым.

Мин көндәлегемдә яҙа башланым.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Әммә ул ғаиләне тарҡатыуға түгел, ә уның именлеген яҡлауға нигеҙләнгән. Йәғни, йәберләнеүселәрҙе ғаилә агрессорынан яҡлауға, йәберләнеүселәрҙең артабанғы тормошон хәстәрләүгә нигеҙләнгән.*



# ҒАИЛӘ ИМЕНЛЕГЕ -

## йәғни Яҡындарына ҡарата көс ҡулланғандарҙы

**Дәүләт Думаһында ғаиләләге йәберләүҙәргә ҡаршы көрәшеүҙе маҡсат итеп ҡуйған закон проекты әҙерләнә. Был закон нимәне күҙаллай? Ғаиләләрҙәге аралауға, ярҙамға, хәстәргә мохтаж булған ағзаларға ярҙам итеүҙе. Яҡындары тарафынан ҡыйырһытылғандарҙың хоҡуғын яҡлауҙы. Ҡурҡыныс һәм хәүеф аҫтында көн итеүселәрҙе баҫым зонаһынан тартып алыуҙы. Һәм, ахыр сиктә, яҡындарына физик һәм мораль зыян килтереүселәрҙе иҫкәртеүҙе, яман ҡылыҡтан туктатыуҙы. Яңы закон һәм уны тормошҡа ашырыу буйынса алып барыласаҡ эштәр, шулай уҡ был яңылыҡҡа ҡарата булған ҡараштар, фекерҙәр хаҡында һөйләшеү тәҡдим итәбеҙ. Әңгәмәселәребеҙ: БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Ринат ҡыҙы АЙЫТҠОЛОВА һәм БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Төҙөлөш, хоҡуҡ һаҡлау һәм суд эштәре мәсьәләләре буйынса комиссия рәйесе урынбаҫары Гөлнара Фәрит ҡыҙы БИКБУЛАТОВА.**

**Эльвира Ринат ҡыҙы, Гөлнара Фәрит ҡыҙы, әле телгә алынған закон проекты 2016 йылда уҡ тәҡдим ителгән, буғай. Ниндәй сәбәптәр менән ул ошо көнгәсә көсөнә инә алмаған? Бөгөн иһә, шул уҡ мәсьәләнең ҡалҡып сығыуы ниндәй сәбәптән? Ғаиләләге ҡыйырһытыуҙарға ҡарата закон тарафынан ниндәйҙер сикләүҙәр һәм яҙалар бар, буғай, тимәк, улар ғына аҙ булып сығамы?**

ендә генә ҡуҙғатыла. Шул уҡ ваҡытта зыян күреүсенең үҙенә уҡ шәхси гәйепләүсе бурысы йөкмәтелә, ул гәйепләүҙе хупларға, раҫлаусы документтар тупларға һәм күрһәтергә, тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашырға, үтенес ҡағыҙҙары алырға һ.б. эшләргә тейеш. Быны һәр йәберләнеүсе башҡара аламы? Юҡ, әлбиттә. Күрәһегеҙ, тәгәйен генә ғаилә хәлен ҡараған һәм тик ғаилә эсендәге йәберләү осраҡтарын ғына тикшеренеш күптән өлгөргән проблема булған. Статистика мәғлүмәттәренән күренеүенсә, ҡылынған һәр дүртенсе енәйәт көнкүреш низағтары менән бәйле. Был беҙҙең республикала ғына ла түгел, демократия шарттарында йәшәүгә ҡарамаҫтан, һәр дәүләттә ғаиләлә йәберләү проблемаһы киҫкен ҡала килә. Донъяның байтаҡ илдәрендә ғаиләлә агрессияны киҫәтеү буйынса ҡанундар ҡабул ителгән, тик Рә-

именлек тәьмин итмәй һәм уны үҙ эсендәге хәүефтән яҡлай алмай булып сыға. Бөтөн был күрһәткестәр ҙә яңы закон проектын тормошҡа ашырыуҙы талап итә.

**Закон проекты тураһында мәғлүмәт интернет селтәрҙәренә ҡуйылды һәм уға комментарий яҙыусылар араһында, йомшаҡ итеп әйткәндә, ябай халыҡ араһынан ҡаршы сығыусылар ҙа күп...**

**Г. Бикбулатова:** Тик улар ғаиләләрендә йәберләүгә дусар булыусыларҙан түгелдер тип уйлайым. Ундай бәләгә тарыусылар һәм шундайҙарға ярҙам ҡулы һуҙырға теләүселәр икенсерәк ҡараштә. Шелтәләүселәр, ҡаршы сығыусылар нимәләрҙе күҙ уңында тота? Улар хәҙер яңы закон ғаиләләрҙән балаларҙы еңел генә тартып ала аласаҡ, ир-егеттең хоҡуғын сикләйәсәк, барлыҡҡа килгән "ышаныс телефон-

бер мәсьәләләргә бөтөнләй тығыла алмай. Шулай уҡ сит кеше лә йәберләнеүсегә ярҙам итә алмай. Асылда, күп осраҡта йәберләнеүселәр үҙҙәрен яҡларлыҡ, ярҙам һорарлыҡ, нимәгәлер өмөт итерлек сиктән сыҡҡан була. Яңы проектта былар барыһы ла ҡарала һәм эҙмә-эҙлекле, реаль ярҙам булдырыу күҙаллана.

**Ғаиләләге йәберләү йәки йәберләүгә юл ҡуйыу, бик булмаһа, ҡорбан ролен ҡабул итеп, уға күнеп йәшәү тороштон үҙ күҙлегебеҙҙән ҡарап китәйек әле. Беҙҙең менталитетҡа, йәшәү тәртиптәренә хасмы был? Хас, шулай бит? Борон-борондан ҡатын-ҡыҙы күндәмлеккә, баҫалҡылыҡҡа, иргә ярап йәшәргә тырышырға өндәйбеҙ. "Ир һуҡҡан ер тамуҡта янмай", "Ир ҡамсыһы татымаған ҡатын ҡатын түгел" тигән әйтемдәр генә лә үҙ эсенә күпме уй-фекерҙе ала. Ҡатын-ҡыҙ-**



**Г. Бикбулатова:** Нисек кенә яҡшы һәм өлгөлө күрһәткестәр менән маҡтанғы килгәндә лә, ил буйынса ғаиләлә йәберләү һәм был йәберләүҙәрҙең йән өшөткөс һөҙөмтәләргә килтергән осраҡтары аҙ түгел. Быларҙы интернет һәм зәңгәр экрандарҙан көнө-төнө ишетеп, уҡып торабыҙ. Бындай енәйәттәрҙе сикләргә тейешле закон һәм тәртиптәр бар, тип кенә күҙ йомоу мөмкин түгел бөгөн. 2016 йылда ошо проект ҡаралһа ла, закон булып үҙ көсөнә инә алмай ҡалды, сөнки ниндәйҙер эшләнеп етмәгән, асыҡланмаған мәлдәр табылды. Хатта ҡаршы сығыусылар ҙа булды, тип әйтәйек. Әлеге көндә иһә йәмғиәт йәшәйеше талабы булып килеп тыуҙы был закон. Әлбиттә, был тәңгәлдәге закондар быға саҡлы ла булды, әммә улар профилактикаға ғына ҡоролған һәм улар дөйөм күҙлектән сығып ҡарай. РФ Енәйәт кодексында ғүмергә, сәләмәтлеккә зыян килтергән, көсләгән өсөн яуаплылыҡ ҡаралған. Был хоҡуҡи актта шулай уҡ ғаиләлә көс ҡулланылған енәйәти ғәмәлдәрҙе сағылдырған "Ғазаплау" тигән статья ла бар. Әммә ул ғаиләлә йәберләүҙәр эшендә тулыһынса ҡулланылмай. Күһәткестәр буйынса, был ғәмәл күпселек осраҡта туҡмау йәки сәләмәтлеккә еңелсә зыян килтереү тип ҡарала. Бындай енәйәт өсөн яуаплылыҡ - 40 мең һум йәки 480 сәғәтлек йөкләмәле эшкә йәлеп итеү, йәиһә бер йылға хәлоҡ тәҙәтеү эштәре, дүрт айға тиклем иректән мәхрүм итеү кеүек саралар менән баһалана. Был яҙаны бирҙертеү ҙә еңел түгел, сөнки бындай төр енәйәт буйынса шәхси гәйепләү процедураһы ҡаралған. Йәғни енәйәт эше бары тик зыян күреүсенең ғаризаһы нигеҙ-

сәйҙә ул һаман да аныҡ түгел. Төрлө сәбәптәр арҡаһында үрҙә телгә алынған проект мәлендә тикшереүгә һәм ҡабул итеүгә ҡуйылманы...

РФ-ның Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексында ғаилә именлеген боҙоусыларҙы административ яуаплылыҡҡа тарттырыу нормалары ла аныҡ ҡына билдәләнмәгән. Мәҫәлән, полиция хеҙмәткәрҙәре ғаиләһендә даими рәүештә тауыш ҡуптары-

дары" дөрөҫ булған-булмаған мәғлүмәт буйынса эш итәсәк, тип иҫәпләй. Йәнәһе, балаларҙың уйһыҙ-ниһеҙ шылтыратыуынан килеп инергә мөмкиндәр, феминистарҙы яҡларҙар һәм башҡалар. Әммә был уларҙың фаразы ғына. Әйе, проект ниндәйҙер тулылыҡҡа, пункттарының эшләнеп бөтөләүенә мохтаж һәм шулай ителәсәк тә, әммә ул ғаиләне тарҡатыуға түгел, ә уның именлеген яҡлауға нигеҙләнгән. Йәғни, йәберләнеүселәрҙе ғаилә агрессорынан яҡлауға, арта-

**ҙарыбыҙҙың артыҡ сабыр булыуы ла алып килмәйме икән ғаиләләге йәберләүҙәргә?**

**Э. Айытҡолова:** Әлбиттә, былар ҙа күрһәткестәр булып тора. Милли тәрбиәбеҙ, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың асылы шул сабырлыҡҡа ҡоролған бит инде. Беҙҙә кейәүгә киткәндә ҡыҙға нимә тип әйтәләр: барған урыныңа таш булып бат, тиҙәр. Һәм бата ла инде ҡыҙҙар күп осраҡта. Ғаилә тормошона психологик яҡтан әҙерлек үтмәгән, тәжрибәһе булмаған, ғаилә мөнәсәбәтен ҡороуҙа бер ниндәй мораль ярҙам ала алмаған йәш ҡатындар ир-егеттең тупаҫлығы, баҫымы аҫтында бөтөнләй хоҡуҡһыҙ булып ҡала ла ҡуя. Айырылыу оло гонаһтарҙың береһе итеп ҡабул ителә. Хатта айырылырға теләгән хәлдә лә барыһының да быға рухи көсө етмәй. Ҡайҙа барып баш төртәргә, балаларҙы нисек аҫрарға тигән хәсрәт тә ҡулын бәйләй. Асылда бит, бөгөнгө көндә лә физик көс аҫтында иҙелеп йәшәгән ҡатындар һанһыҙ. Уларҙың ғүмере өҙөлһә генә иғтибар ителә, фажиғә тыуғанда ғына ҡатындың йәшәгән хәле асыҡлана башлай. Ҡот осҡос бит был!

Закон сыҡҡандан ғына ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың хәле ҡапыл ҙан яҡшырыр, тип әйтеп булмай. Уларҙа ышаныс тыуҙырырға, уларҙың үҙҙәренең уй-фиғелен, донъяға ҡарашын яйлап үҙгәртергә кәрәк. Мәҫәлән, эскән һәм туҡмаған ир менән һау-сәләмәт балалар үҫтереп булмаҫты, бизмәнгә иң беренсе именлекте ҡуйырға кәрәк икәнде, шәхес булараҡ үҙбаһаңды юғалтмаҫҡа

> ***РФ-ның Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексында ғаилә именлеген боҙоусыларҙы административ яуаплылыҡҡа тарттырыу нормалары ла аныҡ ҡына билдәләнмәгән. Мәҫәлән, полиция хеҙмәткәрҙәре ғаиләһендә даими рәүештә тауыш ҡуптарыусыларға, ул көс ҡулланғанға тиклем, бер нәмә лә эшләй алмай. Уны ҡулға алыу, полиция участкаһына алып килеү, ваҡ хулиганлыҡ өсөн яуаплылыҡҡа тарттырыу ярамай, сөнки ул был эште йәмғәт урынында ҡылмаған. Ә өй, фатир, шул иҫәптән ғаилә лә - йәмғәт урыны түгел, шәхси территория, былары уның ғаилә ағзалары. Йәғни, закондың каратель функциялары ғаиләлә именлек тәьмин итмәй һәм уны үҙ эсендәге хәүефтән яҡлай алмай булып сыға. Бөтөн был күрһәткестәр ҙә яңы закон проектын тормошҡа ашырыуҙы талап итә.***

гән ҡанун, үкенескә ҡаршы, булманы.

**Э. Айытҡолова:** Хәтерегеҙҙә булһа, әле 2015 йылда уҡ Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты, ил парламентының Һаулыҡ һаҡлау комитеты ағзаһы Сәлиә Мырҙабаева бер төркөм депутаттар һәм белгестәр менән "Ғаиләлә йәберләүҙе иҫкәртеү буйынса" ҡанун проекты өҫтөндә эшләй башлағайны. Тимәк, был күсыларға, ул көс ҡулланғанға тиклем, бер нәмә лә эшләй алмай. Уны ҡулға алыу, полиция участкаһына алып килеү, ваҡ хулиганлыҡ өсөн яуаплылыҡҡа тарттырыу ярамай, сөнки ул был эште йәмғәт урынында ҡылмаған. Ә өй, фатир, шул иҫәптән ғаилә лә - йәмғәт урыны түгел, шәхси территория, былары уның ғаилә ағзалары. Йәғни, закондың каратель функциялары ғаиләлә

бан агрессорҙың үҙенә психологик ярҙам күрһәтеүгә, йәберләнеүселәрҙең артабанғы тормошон хәстәрләүгә нигеҙләнгән. Былда полиция килеп, агрессорҙы алып китте лә, иртәгәһе көн кире сығарып ебәрҙе һәм ул ҡайтып, тағы ла дәшһәтләрәк хәүефтәр тыуҙырҙы түгел. Йәки әлеге булған закондар аша хоҡуҡ һаҡлау органдары ғаиләләге ҡайһы

***✓ Ҡорбанды йәберләүсенән яҡлау һәм уның менән аралашыуҙан сикләүгә лә тәртиптәр ҡаты ҡуйылған: сигнал булғандан һәм был хәл теркәлгәндән һуң бер ай ваҡыт йәберләүсе йәберләнеүсеһенә яҡын да килергә тейеш түгел.***

# ИЛ ИМЕНЛЕГЕ,

## тыйыусы закон бармы?



**_Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, үҙҙәренең партнерҙарынан йәберләнгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың 55 проценттан 95 процентҡа тиклеме бер ваҡытта ла ярҙам һорап мөрәжәғәт итмәй. Бөгөн төрмәләрҙә ултырған ҡатын-ҡыҙҙың 55 проценты ғаиләләге йәберләүҙәргә ҡаршы тороу йәки аффект хәлендә ҡылынған енәйәт арҡаһында эләккән. Түҙеп-түҙеп ҡапыл нимәлер хәл итеүҙәреме, түҙемлектәре бөтөп ошо эште ҡылыуҙарымы - ирекһеҙҙән улар ирҙәрен үлтереп, рәшәткә артына эләгә. Әлеге ваҡытта донъяның 89 илендә ғаиләлә көс ҡулланыу тураһында махсус закондар бар һәм был беҙҙә лә мотлаҡ булырға тейеш._**

икәнде һәм башҡаларҙы һеңдереү, аңлатыу. Ҡорбан хәләнә ингән ҡатындар, ғәҙәттә, был халәтенән ҡапыл да ғына сыға ла алмай. Әлеге фажиғәле яҙмышлы ҡатын-ҡыҙҙарҙы ғына алып ҡарағанда ла, улар әллә нисә ҡат ирҙәренән китеп ҡараған, айырым йәшәп тә маташҡан, тик һаман да кире әйләнеп ҡайтҡандар. Тәрбиәнән килә инде был: ул ирҙең һүҙен йыҡмай, ғаиләне һаҡлап ҡалыу - иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙ бурысы, тип иҫәпләй, балалар атайлы булһын, ти, яңғыҙ ҡатын булыуҙан ҡурҡа, ояла, кеше һүҙенә ҡалыуҙан шикләнә, ата-әсәһенең айырылышыуҙы хупламауын да самалай. Быуаттар буйына һеңдерелгәндән хатта замана закондары ла аралай алмай ҡуя, үкенескә ҡаршы. Шунлыҡтан, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы һәм шул иҫәптән башҡа ғаилә ағзаларын да, үҙҙәрен йәберләүгә юл ҡуймауҙы бала саҡтан өйрәтеп үҫтерергә һәм был сикте закон яҡшы һаҡлай икәнде күрһәтә белергә ине.

**Әйҙәгеҙ, аныҡыраҡ миҫалдарҙа ҡарап китәйек әле быны. Мәҫәлән, йәберләнгән ҡатын йәки башҡа ғаилә ағзаһын, власть вәкилдәренән ярҙам һорағандан һуң, кем яҡлай? Агрессор бит бер нисә көндән шул уҡ йортҡа, шул ғаиләгә ҡайта? Мәҫәлән, әлеге ҡатын тағы ла балалары менән ҡайҙалыр ҡасып торорға, йәшеренергә мәжбүр була. Ә бит уға эшләргә лә, балаларына уҡырға, баҡсаға йөрөргә кәрәк. Һәм торлаҡ мәсьәләһен дә хәл итергә кәрәк. Ошондай хәлдә ниндәй системала хәл итә аласаҡ закон?**

**Г. Бикбулатова:** Прокурор практикам күрһәтеүенсә, ғаиләлә яһалған енәйәт эштәре иң йәшерен һәм ауыр сиселә торғандарҙан улар. Бында ҡорбан физик һәм мораль баҫымды үтә лә яҡын булған кешеләренән күрә. Әйтәйек, иң йыш күҙәтелгәне ир менән ҡатын осрағы. Улар бер өйҙә ғүмер итә, балалар үҫтерә, хатта араларында ниндәйҙер изге һәм йылы тойғолар ҙа бар. Көн һайын һуғышмай бит инде улар, әммә булып тора. Ғәҙәти рәүештә ир ҡатынын туҡмай. Сөнки ул көслөрәк, уның хәленән килә, ул ғаилә башлығы һәм башҡалар. Һәм шул уҡ ғәҙәте буйынса ул иртәгәһен айныға ла ғәфү үтенә, вәғәҙәләр бирә - ҡатын кисерә. Битенән күге киткәнсе больничный ала, ҡоланым, төкөлдөм тип алдай. Кисергәс, әлбиттә, полицияға ла бармай. Был хәл торараҡ тағы ла ҡабатлана, тағы ла... Шулай итеп, ҡорбан йәберләүсенең уйынсығына әүерелә. Ул ошо хәлендә кемдәндер ярҙам һорарға кәрәклекте лә аңлай алмай. Бына ошондай осраҡтарҙағы ярҙамды ла индерә ала әлеге закон. Йәғни, ғаиләлә йәберләнеүсе барлығы хаҡында башҡа кешеләр ҙә хәбәр итә, ярҙам итеүҙәрен һорай ала.

Икенсе миҫалда эсеп йәки башҡа аңды томалағыс ҡулланып, агрессорға әүерелгән ғаилә ағзаһын ғаиләһенән айырып, ваҡытлыса изоляторҙа тотоу. Уны махсус психологик программа аша үткәреп тикшереү. Бәлки, уның ниндәйҙер психик тайпылыштары барҙыр? Йәки эскелектән, наркоманиянан дауалау талап ителәлер? Ҡорбанды йәберләүсенән яҡлау һәм уның менән аралашыуҙан сикләүгә лә тәртиптәр ҡаты ҡуйылған: сигнал булғандан һәм был хәл теркәлгәндән һуң бер ай ваҡыт йәберләүсе йәберләнеүсеһенә яҡын да килергә, телефон йәки башҡа бәйләнеш саралары аша хәбәрләшеп маташырға тейеш түгел. Был шарттар боҙолғанда ул бер йылға тиклем ҡулға алына. Ә әлеге ваҡыт эсендә йәберләнеүсе айырылышыу, торлаҡ һорауҙарын яйлау йәки күсеп китеү мәсьәләләрен сисә ала. Бында шулай уҡ йәберләүсене торлаҡтан сығарыу ҙа (уны икенсе урынға урынлаштырып, әлбиттә) үҙенең ҡаралған пункттары аша эшләнә ала. Асылда бит, ҡатын-ҡыҙ балаларын ала ла өйҙән китә йәки ололар тиран булған балаларынан китеп йәшәргә мәжбүр. Ошо хәлдәр ҙә иғтибарға лайыҡ.

**Ғаиләләге йәберләү һәм йәберләнеү күберәк социаль яҡлауға мохтаж ғаиләләрҙә күҙәтелеүсән. Был төркөмгә беҙ ата-әсәләре эскән, наркотик ҡулланған, эшләмәгән ғаиләләрҙе алабыҙ. Был тәңгәлдә ғаилә эсендә йәберләнеүгә дусар булғандарҙы ҡурсалау өсөн ғаиләнең социаль торошон яҡшыртыу ҙа кәрәк буласаҡ бит. Әгәр беҙ йәберләүселәрҙе лә, йәберләнеүселәрҙе лә ҡарарға теләһәк, бик ҙур һәм системалы эштәр барлыҡҡа килә. Һәм быға кәм тигәндә лә өсәр-бишәр һәм унан да күберәк йылдар китәсәк.**

**Э. Айытҡолова:** Эйе, китәсәк. Тап ошондай системалы һәм эҙмә-эҙлекле үҫеш булырға тейеш тә. Бында бит ғаиләнең йәберләнгән бер йәки бер нисә ағзаһын ғына яҡлау түгел, ә йәмғиәт эсендәге ғаиләнең дөйөм именлеген, хәүефһеҙлеген һәм социаль хәлен күтәреү маҡсат итеп ҡуйыла. Шул уҡ ваҡытта ғаиләһендә ҡыйырһытылған шәхескә реаль һәм ваҡытлы ярҙам ойоштороу беренсе урында тора.

Йәберләүҙәр социаль яҡтан түбән йәшәйештәге ғаиләләрҙә генә тип тә хаталанырға ярамай, тәжрибәләр күрһәтеүенсә һәм үҙебеҙҙең донъяуи күҙәтеүҙәрҙән дә сығып әйтергә була: яҡшы, етеш йәшәгән, урындарҙа хеҙмәт иткән һәм хатта билдәле булғандар ғаиләһендә лә йәберләүҙәр йәшеренеп ятырға мөмкин. Әйткәнемсә, беҙҙең халыҡ бындайҙы сығарып бармаҫҡа, мөмкин тиклем бикле тоторға тырыша. Әгәр был йәберләнеүсе ҡатын-ҡыҙ булған осраҡта, ул иренең карьераһын уйлап та, "яҡшы ғаилә" статусын юғалтмаҫҡа тырышып та, бала кеше ҡурҡып та, ололар закондарҙы белеп-аңлап етмәй ҙә ғазапланып йәшәргә мәжбүр. Миҫалға былтырғы Учалы фажиғәһен генә алайыҡ. Беренсе ҡарашҡа бик тә күркәм ғаилә, шулай бит, йәшәйештәре яҡшы, эштәре бар, үҙҙәре күренекле кешеләр. Ә ниндәй тетрәткес хәл тыуҙы... Шунлыҡтан, ғаиләләрҙәге тыштан күренгән ялтырауыҡ эстән дә шул ҡәҙәр булыуын гарантияламай әле. Әйткәнемсә, ғаилә эсендәге йәшәйеш - ҡараңғы урман, унда нимәләр ҡылыныуын һәм кисерелеүен бары ундағылар ғына белә. Ә инде ғаиләләге йәберләүгә ҡаршы көрәшеүҙе маҡсат итеп ҡуйған закон беҙгә ғаилә эсен, уның сәләмәтме-түгелме, унда хәүеф юҡмы-бармы икәнлекте аңларға булышлыҡ итәсәк.

**"Ғаилә" терминына кемдәр инә? Ғаилә ағзалары, йәғни, никахтары ЗАГС-та теркәлгән ир-ҡатын, уларҙың балалары, өләсәй-олатай, шулай бит? Ә никахтарын теркәмәй йәшәүселәр ғаилә булып иҫәпләнәме закон буйынса? Бындай союздарҙа, уйлап ҡараһаң, әлеге йәберләүҙәр күберәк тә күҙәтелә.**

**Г. Бикбулатова:** Никахтары теркәлмәгән, йәғни "гражданский брак" менән йәшәүселәр ҙә ғаилә ағзалары булып иҫәпләнә. Бигерәк тә унда балалар үҫһә. Никахлы ғаиләме ул, бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәүселәр союзымы - бер кемгә лә икенсе кешегә ҡарата көс ҡулланыу, ҡыйырһытыу, мыҫҡыллау, көсләү хоҡуғы бирелмәгән. Әгәр йәмғиәт граждандлыҡ никахы тигән күренеште ҡабул иткән икән, уларҙа кеше хоҡуҡтары боҙолоуға ла юл ҡуйылырға тейеш түгел. Күрһәткестәр буйынса мәғлүмәттәр хәүефле. Мәҫәлән, йыл һайын донъяла 1,8 миллион ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә йәберләү ҡорбаны була. Барлыҡ ауыр енәйәттәрҙең 40 проценты ғаиләлә башҡарыла. Йылына ике мең бала һәм үҫмер, ата-әсәһенең насар мөнәсәбәтенән ҡотолоу юлын тапмайынса, үҙ-үҙенә ҡул һала. Репродуктив сәләмәтлек буйынса дөйөм милли тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе асыҡлауынса, ғүмер дауамында Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙарының 38 проценты - психик (вербаль), 20 проценты - физик, 4 проценты сексуаль көсләүгә дусар ителә. Гүзәл заттарҙың ни бары 12 проценты ғына полиция органдарына йәки юридик хеҙмәттәргә мөрәжәғәт итә, 26 проценты булған хәл тураһында бер кемгә лә, хатта иң яҡын туғандарына ла һөйләмәй, сөнки быны файҙаһыҙ тип һанай, ояла, айырылышыуҙан йәиһә тағы ла көслөрәк баҫымға дусар булыуынан ҡурҡа.

Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, үҙҙәренең партнерҙарынан йәберләнгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың 55 проценттан 95 процентҡа тиклеме бер ваҡытта ла ярҙам һорап мөрәжәғәт итмәй. Бөгөн төрмәләрҙә ултырған ҡатын-ҡыҙҙың 55 проценты ғаиләләге йәберләүҙәргә ҡаршы тороу йәки аффект хәлендә ҡылынған енәйәт арҡаһында эләккән. Түҙеп-түҙеп ҡапыл нимәлер хәл итеүҙәреме, түҙемлектәре бөтөп ошо эште ҡылыуҙарымы - ирекһеҙҙән улар ирҙәрен үлтереп, рәшәткә артына эләгә. Әлеге ваҡытта донъяның 89 илендә ғаиләлә көс ҡулланыу тураһында махсус закондар бар һәм был беҙҙә лә мотлаҡ булырға тейеш.

**Беҙ ғаиләлә йәберләнеүселәр мотлаҡ ҡатын-ҡыҙ йәки балалар тип кенә ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ. Ә ир-егеттәр ҡорбан хәлендә ҡалырға мөмкинме?**

**Г. Бикбулатова:** Мөмкин. Тик бында физик көс өҫтөнлөк ала барыбер, ҡатын кеше тотоп ирҙе туҡмай алмай бит инде, ә мораль баҫым яһап уны ниндәйҙер сиктәргә алып барып еткереп ҡуя. Ундай хәлдәр ҙә аҙ түгел. "Яман ҡатындан ен-пәрей ҡасҡан" ти бит халыҡ, шуның кеүек яман ҡатын үҙ эштәре, ҡылығы, теле менән ир-егетте элмәккә лә тығып ҡуйған, енәйәткә алып барып еткергән һәм ҡорбан итеп йәшәткән дә хәлдәр бар тормошта.

**Э. Айытҡолова:** Ололар хаҡында ла онотмайыҡ. Уларҙың да хәле йыш ҡына аянысллы була. Үҙ торлаҡтарында улар ҙа хоҡуҡһыҙ һәм ярҙамһыҙ булып ултырып ҡуя. Эскән балалары ҡулында пенсияларын ала алмай, ас, ҡарауһыҙ булыуҙарын әйтергә, ярҙам һорарға ла ҡыймай ҡайһылары. Хатта ярҙам һораған хәлдә лә оло кешене тота килеп кенә ҡайҙалыр күсереү мәсьәләһе ҡаралмаған. Был һорауҙар ҙа беҙҙең ошо закон сиктәрендә хәл итәһе һәм, иң мөһиме, хәл итерлек проблемалар. Тимәк, беҙгә был хәйерле маҡсатты тормошҡа ашырыуҙа дәррәүерәк һәм әүҙемерәк булырға ғына ҡала.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Түңәрәк битле ҡараҡайы ҡарашын да күтәреп ҡарай алмай ҙа ул, тик яулыҡҡа уранһа ла бер яҡ сикә-маңлайында янған эҙҙәре күренеп торған олораҒындағы ҡырағай бүре күҙҙәре екһендерә уны.***



* * *

Ул көнө, унан тағы бер төн һәм бер көн урамында, янған өйө янында ятты Шәмсиҡәмәр, ер тырнап иланы ла, ҡапыл тынып онотолғандай булып ҡалды, унан тағы күккә ҡарап өҙөреп ялбарҙы, үкһене, унан тағы хәле бөтөп йығылды. Утҡа ҡолаған яғы, бер яҡ буйҙан баштан аяғынаса бешкәйне, бөтөн тәне һөйәгенә үтеп әрнене. Тик тән ғазабынан күпкә көслөрәк һәм тәрәнерәк булған йән ғазабы быларҙы тойорға бирмәне.

Карателдәр һөжүменән ҡасып өлгөргәндәр ауылға кире ҡайтып, бында тере ҡалғандарҙы эҙләп тапты. Еҙбикә лә кисә йылғала кер сайҡаған ерҙән ҡайһы бер ҡыҙҙарға эйәреп урманға ҡарай йүгергән булған икән.

- Йәүһәриә еңгәм малайҙарын яҡлашам тигәндер инде, уны Моратын ҡосаҡлаған килеш ҡуша сәнсеп киткәндәр. Иҙелбайы менән Ейәнгире лә шунда ята, - тип шыбырлап һөйләй еңгәһенә йәнәш ятып йондоҙло һауаға текәлгән бикәсе. - Малайҙар ҡылыс тотоп сыҡҡан булғандар, ҡаршы һуғышабыҙ тигәндәрҙер инде, бахырҡайҙарым...

Үҫмер туғандарының нисегерәк алышып үлгәндәрен дә күҙ алдына килтерә Еҙбикә. Иҙелбайға ун дүрт, Ейәнгире ун өс менән бара ине, Балапан ағайҙары кеүек яндырай ҡыйыу малайҙар ине. Әсәләре инәлһә лә йәшенергә йә ҡасырға теләмәгәндәрҙер, аталарынан ҡалған ҡоралдарҙы тотоп ҡаршы сыҡҡандарҙыр...

- Маһый апһыным ҡайҙа икән, уның балалары? - тип һорай ысынбарлыҡҡа ҡайта башлаған Шәмсиҡәмәр.

- Маһый еңгәмде... - Еҙбикә тотлоҡтомо, һүҙ һайланымы, бер аҙ шымып ятты ла, дауам итте, - Күршеһе Зөлхәбирә инәй баҙҙарында тапҡан. Балалары менән баҙға төшөп йәшеренгән булғандар, күрәһең, мәлғүндәр бикләп ут төрткәндәр. Тонсоҡҡандар аҫта... Һыйынышып ҡына ултыралар, йоҡлап ҡына киткән кеүектәр, ти инәй.

- Балаларының бөтәһе лә янында тейме?

- Эйе, дүртеһе лә үҙе менән тей.

- Бәхетлеләр... Ә мин бына балаларымдан тороп ҡалдым... Эй, Хоҙайыым! - тип ҡабаттан ярһып, ярты сәсе янып бөткән башына йәбешә ҡатын.

Тағы ла ике көндән, яндырылған ауылда аң-тоң ала алмай йөрөгән тере ҡалғандарҙы, етем-еһер бала-сағаны кире ҡайтыуға үткән каратель отряды йыйып алып китте. Мал кеүек итеп сыбыртҡылап, ҡамсылап ҡыуҙы. Шәмсиҡәмәр менән Еҙбикә лә һыйынышып шул көтөү эсендә атланы.

...Тотҡондарҙы Өфөгә индермәнеләр, ҡаланы үтеп китеп, ситтәге бер ауылда туҡтатып, ергә ултырырға ҡуштылар. Оҙон юлда арыуҙан йә аслыҡтан, йә яраларҙан үлгәндәрҙән ҡалғандар ҙа аяҡтарында саҡ тора - шундуҡ ҡолаштылар. Күпмелер ваҡыттан казарманан сыҡҡан хәрбиҙәр, уларҙың араһынан йөрөп, ҡол һайлағандай бармаҡ төртөп һайлап ала башланы. Китте сыр-сыу, илаш-тартыш. Балаларҙы әсәләренән, әсәләрҙе балаларынан, ҡыҙҙарҙы туғандарынан айырып алдылар. Ҡатындар ҡарғышы, балалар илауы, ҡыҙҙар сарылдауына эргәләге тирәклектәге ҡарғалар ҡурҡышып осоп ҡупты ла, быларҙан яман тауышланып, тотош бер дау сығарҙы.

Еҙбикәне терһәгенән алған бер ир уның ҡулдарын Шәмсиҡәмәрҙән ысҡындыра алманы. Толомон ҡулына урап та һөйрәп ҡараны, ҡулын да шаҡарҙы, тик ҡыҙ еңгәһенә теше-тырнағы менән йәбешкәйне. Ахырҙа, уларҙың икеһен бер юлы елтерәтеп алып барып, хеҙмәтсеһененең аяҡ аҫтына ҡолата төрттө:

- Алып ҡайт!

Карателдәр отрядының поручигы Златослав Казимирович Светозаровтың Өфө ҡәлғәһендәге ике ҡатлы ағас йортона алып килделәр ҡатындарҙы. Ялсының русса ни әйткәнен дә аңламай арбала һаман тотоношоп ултырған Шәмсиҡәмәр менән Еҙбикәне ҡап-ҡара бөркәнсек ябынған ҡарға танаулы ҡарсыҡ сығып алды. Ул быларҙың берәүһен етәкләгәйне, икенсеһе етәктәге бәрәс ише булып эйәрҙе. Ҡарсыҡ уларҙы әйләндереп-әйләндереп ҡараны ла, Шәмсиҡәмәрҙең янған башы, бите, беләктәре һәм аяҡ балтырҙарының күпсеп-ҡанһырап торғанынан сирҡана биреп йөҙөн сыйырып, нимәләрҙер тип өндәште. Тик уны аңлаған кеше булманы. Ахырҙа, ул быларҙы ашатырға булды шикелле, икеһенә бер туҫтаҡ бутҡа һондо. Тик ҡатындар тәгәсте ике яҡтан тотҡан килеш тора бирҙеләр. Ҡарсыҡ уларға ашаған ишаралар яһап




күрһәтте, былар һаман торҙо. Унан был ҡул һелтәне лә боролоп киткәйне, бисаралар иҙәнгә сүгәләп, бармаҡтары менән тырнап алып һоғона башланылар.

Күпмелер ваҡыт шул ишек төбөндә тоттолар ҙа, торараҡ ҡарсыҡ уларҙы тағы ла ҡайҙалыр ҡыуалай башланы. Эткеләп алып бара торғас, ҡара мунсаға индереп ебәрҙе. Эҫелә тәне тағы ла нығыраҡ һыҙланы Шәмсиҡәмәрҙең, тиреһен тереләй һыҙыраларҙыр кеүек булды. Сығайым тип ынтылһа, әбей һуҡранып кире төртөп индерҙе. Былай ғына ҡотола алмаҫтарын аңлаған ҡатындарға сисенеп йыуынырға тура килде ахырҙа. Еҙбикә еңгәһен иплэп кенә сайындырҙы, ҡоромдарынан ышҡып таҙартты, янғандан ҡалған сәсен йыйып ишеп төшөрҙө. Унан баяғы ҡарсыҡ кейем индереп бирҙе. Ят тегелешле күлдәктәрҙе кейеп, яулыҡтарҙы бәйләп сыҡты мунсанан тотҡондар. Хәлдәре бөтөп әлһерәгән бисараларҙы хәҙер инде төпкө яҡҡа үткәреп, йорттоң төкөтмә яғына - ялсылар бүлегенә урынлаштырҙылар. Аҙыраҡ хәл алғас, уларҙы йорттоң хужалар торған яғына алып киттеләр. Иркен залда уларҙы йонсоу ғына ҡатын ҡаршы алды. Был Светозаровтың Петербургтан алып килгән кәләше Анна Дмитриевна ине.

Ҡарсыҡ ураған һайын баш эйеп, "сударыня" тип өндәшкән хужабикә, Шәмсиҡәмәрҙең һау беләгенә сат йәбешеп ҡалтыранып килгән Еҙбикәләй генә бер ҡыҙ бала булып сыҡты. Зәңгәр күлдәй түңәрәк күҙҙәре шаҡ ҡатыуҙанмы, ҡурҡыуҙанмы ҙур асылған. Ҡобараһы осоп, килтерелеүселәргә төбәлде лә ҡалды. Ҡарсыҡ уға нимәлер тип һүҙ башлағайны, йәш ҡатын тауышын күтәрә төшөп, ниндәйҙер бойороҡ бирҙе, хатта ишеккә бармағын төртөп үк күрһәтте. Ашығып сығып тайған ҡарсыҡ шулай уҡ ҡабаланып ышылдап килеп инде лә, ҡатындың алдындағы өҫтәлгә бер ҡосаҡ бәләкәс кенә һауыттар ҡуйҙы. Хужабикә шуларҙың бер нисәһен асып еҫкәп ҡарағас, икәүһен Шәмсиҡәмәргә һуҙҙы, уның янған сикәһенә, ҡул һыртына төртөп күрһәтте. Яраларына һөртөргә шифа тәҡдим иткәнен аңлаһа ла, ҡаш аҫтынан һөҙә ҡарап тик торҙо башҡорт ҡатыны. Был дошмандарҙан ул ярҙам алмаясаҡ. Юлда уҡ, ауылда уҡ үҙ-үҙен үлтерер ине лә, әллә нисә ҡат шул уйына өлгәшергә ынтылды ла инде, тик һаманға тиклем саған япрағындай булып дерелдәгән Еҙбикә бикәсен генә уйланы. Ҡыҙ баланы, иренең туғанын, бер өйҙә йәшәп эҫенешеп бөткән һылыуын бөтөнләй яңғыҙ ҡалдырыуҙан йәлләне. Әле лә бары шул ғына тота - Еҙбикә.

* * *

Златослав Светозаровтың ата-бабаһы борон-борондан хәрбиҙәр династияһын дауам иткән, улар батша хөкүмәтенең тоғро ялсыһы булып, ҡайҙа ебәрһәләр, шунда хеҙмәт итеп ғүмер һөргән кешеләр. Үҙҙәренең ерһыуы, бауыр баҫып ҡайтыр урыны булмаған. Златославтың атаһы ла олоғайғас ҡына урта хәлле бер байҙың ултырып ҡалған ҡыҙына өйләнеп, уға ғүмер биреп өлгөргән. Малай сағында уҡ атайһыҙ ҡалған Златославты ҡартайып ҡына бала күргән әсәһе үтә иркәләтеп, алдына алып боҙамы, ул йәштән аҡса туҙҙырыуға, эскелеккә, хоҡуҡһыҙ крепостнойҙарҙың ҡыҙ-ҡырҡынына ҡул һуҙыуға, ир-егетен яҙалауға әүәҫләнә. Уның был насар ғәҙәтен аңғарып ҡалған бабаһы, әсәһененең ағаһы, үҫмерҙе кадет мәктәбенә тапшырта. Шунда офицер чины алып сығып, батша гвардияһында төрлө урындарҙа хеҙмәт үтә егет. Һуңғы йылдар Өфө провинцияһында төпләнеп, һуңғы башҡорт ихтилалын баҫтырыуҙа ҡатнаша. Был экспедицияларҙа айырыуса ҡатылығы һәм аяуһыҙлығы менән дан алып, түшендәге һәм яурындарындағы йондоҙҙарын арттыра.

Кәләше Анна Дмиртриевна ла уға осраҡлы ғына килеп эләккән аҫыл ҡош була. Петербург кисәләрененең береһендә ул был нескә гөл кеүек кенә ҡыҙҙы күреп йөрәге арбала ла, ҡулына төшөрөү өсөн бөтөн тырышлығын һала. Тәүге балына сыҡҡан тәжрибәһеҙ Аннушка был тоҙаҡҡа ҡаба ла. Ҡыҙҙың атаһы Дмитрий Ярославович үҙе лә хәрби булып, хәләл көсө менән күтәрелгән һәм йәмғиәттәге дәрәжәһен дә, малын да ҡулдары, башы менән эшләп тапҡан кеше булараҡ, кейәүенең артыҡ хәлле булмауына күҙ йома. Уға был йәш офицерҙың янып тороуы, амбициялығы, саялығы оҡшай. Ярты йыл шул тирәлә уралғандан һуң, Петербургтың иң бай кәләшенә өйләнеп, хеҙмәт итәсәк еренә күсереп алып та китә Златослав. Бәхеттең етенсе ҡатында булған Аннушка, Өфө ҡәлғәһенә килеп, аламараҡ ике ҡатлы йортҡа урынлашҡас, кейәүенең үҙенә билдәле булмаған күп яҡтарын асып хайран ҡала. Әммә эш уҙған, ул инде был кешенең ҡатыны. Атаһына ярҙам һорап хат яҙғанда, әлбиттә, барин берҙән-бер ҡыҙынан баш тартмаҫ ине лә, тик йәшлеге һәм баҙнатһыҙ холҡо арҡаһында ул быларҙы башҡара алмай. Икенсенән, Златослав кәләшенән был аҙымды яһатмаҫ өсөн бөтөн сараларын да күрә: уның яҙған хаттарын уҡый, кешеләр менән аралаштырмай, атаһына ҡайтармай.

Өс йыл эсендә һурыға, төҫө ҡаса, йыл да бер балаһы төшөп торғанлыҡтан, ауырыу сырайлы, күндәм ҡарашлы ҡатынға әүерелә Анна Дмитриевна. Әсәһенән ҡалған, күптән йүнәтеү көткән йортта йәшәп, кәләшенең бирнә аҡсаларын тотоноп, ялдарын кәрт уйнап, аулаҡ йорттарҙа эсеп-теттереп ятып ҡайта ла, ялсыларын, унан ҡалһа ҡатынын туҙҙыра ир тигәне.

- Атаңдың аҡсаһы булмаһа бер тинлек хаҡың юҡ! Бала табырға ла эшкинмәгән бисә! Ней түшәктә рәтең юҡ, ней ҡарарлыҡ төҫөң! - тип ике ҡатты яңғыратып ҡысҡырынып-аҡырынып, юлындағы кәрәк-яраҡты осора тибеп барыһының ҡотон ала. Саҡ ҡына хатаһы булған крепостнойҙарын арманһыҙ иткәнсе сыбыртҡылай, ҡатын-ҡыҙын, бала-сағаһын ҡарап тормай ҡанһыратҡансы туҡмай. Алдына сығыр, ҡулын тыйыр әҙәм юҡ уның был өйҙә лә, был ҡалала ла.

* * *

Өй хужаһы каратель походтарынан әйләнеп ҡайтҡанда, Шәмсиҡәмәр менән Еҙбикә бындағыларға ярайһы өйрәнеп, тәртиптәргә күнегеп барғандай ине инде. Телде төшөнмәһәләр ҙә, ым-ишаранан аңлай, ҡушҡанды үтәй башлағайнылар. Иртәнән кискәсә иҙән, кер йыуыу, утын индереп йылытыу, урам тирәһен таҙалау, ашнаҡсыға ярҙам итеү кеүек эштәрҙе талымһыҙ ғына башҡаралар. Улар менән идара иткән ҡарсыҡҡа ҡатындарҙың көслө, йылдам булыуҙары оҡшай. Түңәрәк битле ҡараҡайы ҡарашын да күтәреп ҡарай алмай ҙа ул, тик яулыҡҡа уранһа ла бер яҡ сикә-маңлайында янған эҙҙәре күренеп торған олорағындағы ҡырағай бүре күҙҙәре екһендерә уны. Хужабикәгә "бынынһын ауылдағы имениеға ебәрәйек" тип тә ҡарағайны, барыняһы тыңламай, әллә йәлләй, әллә башҡа сәбәп менән ҡалдырып килә һаман.

Ҡалаға кисә үк ҡайтһа ла, аҙып-туҙып ҡайҙалыр йоҡлап ҡалған Светозаров, башы сатнауҙан кәйефһеҙ ине. Залда ҡаршы алып торған ҡатынының сәләмен баш ҡағып ҡына ҡабул итте лә, тиҙерәк өҫтәл ябырға ҡушты. Ашарға ултырғас та иң беренсе тултыра һалып эсеп ебәрҙе. Унан икенсеһен, өсөнсөһөн... Алдына ултыртылған тәрилкәләгеп инде арыуыҡ иҫергән булып, түгә-сәсә ҡапҡыланы. Анна Дмитриевна быларҙы күрмәмешкә һалышып, йорт-донъя яңылыҡтарын һөйләп маташты. Шунда ла, ире сираттағы рүмкәгә үрелгәс, ябыҡ аҡ ҡулын уның йөнтәҫ тәпәйенә һалды:

- Златослав Казимирович... Ҡәҙерлем, етәрҙер, бәлки...

- Ә-ә? - иҫерек ир уға аҡайып ҡараны.

- Ҡаҙҙан ауыҙ итмәнең бит бөтөнләй...

Шул ваҡыт ир өҫтәл уртаһында хуш еҫтәрен аңҡытып ултырған алмалы ҡаҙҙы батмусы менән ҡуша тартып алды ла, күтәрә биреп янып ятҡан камин эсенә елгәрҙе. Үҙе бер ни булмаған кеүек сираттағы араҡыһын түңкәреп ҡуйып, ултырған урынында таш һын булып ҡатып ҡалған Анна Дмитриевнаның йөҙөнә һаҫыҡ ауыҙын терәп тигәндәй бышылданы:

- Миңә аҡыл өйрәтеп маташма... Аңланыңмы? Юғиһә... мин һине дворянин Готовтың ҡыҙы тип ҡарап тормам.

**(Дауамы. Башы 52, 1-4-се һандарҙа).**

✓ Ә өсөнсө фильм бар ошо ҡаҙаныштарҙы һаҡлаусылар тураһында булырға тейеш. Рәми Ғариповты ла республикабыҙға нигеҙ һалған идеяларҙы һаҡлап йәшәгән кеше тип иҫәпләйем.



ХӘТЕРЛӘП...

**Заман башҡа - заң башҡа, тиергә яратабыҙ. Тик был ҡанундар ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, уларҙы халҡының зиһене һәм күҙе менән күргәндәр, теле һәм иле өсөн гәзиз ғүмерҙәрен фиҙа ҡылырға әҙер булғандар ғына тарих биттәрендә мәңгелек эҙен ҡалдыра алыр. Ошо көндәрҙә баш ҡалала үткән "Ҡайтам! Ҡайтам! Йырҙарыма ҡайтам!" тип исемләнгән әҙәби-музыкаль кисә башҡорт халҡының тап шундай бөйөк шәхестәренең береһе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа һәм уның аҫыл ижадына арналды.**

# ТАНЫШ ЙЫР БУЛЫП...

## Рәми ҡайтты!




Ғәзеллекте һәм намыҫын юлдашы итеп, кешелеккә инаныуын бер ваҡытта ла юймаған шағирҙың һәр ижад емеше халҡының, туған теленең яҙмышын ҡайғыртыуға арналған. "Йөрәгендә халҡы булмағандың, Кеше булырға ла хаҡы юҡ!" - тигән юлдарҙа ла Шағирҙың бар булмышы сағылыш тапҡан. Уның ошо асылын хәтер кисәһен ойоштороусылар ҙа асыҡ аңлауын күңеле менән тойҙо тамашасы: сәхнәлә яңғыраған һәр шиғри һүҙ, башҡарылған һәр моңло йыр быға инандырҙы. Әҙәби-музыкаль кисәне "Беренсе республика" трилогияһының ижади төркөмө "Шағир көндәлеге" нәфис фильмын төшөрөүгә әҙерлек барышында ойоштороҙо. Рәми Йәғәфәр улының шиғриәтен үҙ итеүселәрҙең йәш айырмаһы төрлө булыуға ҡарамаҫтан, һәр кем ошо минуттарҙа рухи берҙәйлек тойҙо. Хатта ойоштороусыларҙың һәр тамашасыға билет хаҡы өсөн исем-шәрифен титрҙарға яҙҙырыу мөмкинлеген биреүе лә күптәргә мөһим булманы. Сараның сценарий авторы Таңсулпан Бабичева әйтмешләй, шағирға ихтирам күрһәтеү, мәҙәниәтте үҫтерергә һәм уҙған быуындың аманатын киләсәккә еткерергә ярҙам итеү форсатын низер өмөт итеп файҙаланалармы ни! Улар күңеленә ауаздаш ижадлы Рәми ҙа бит дан-шөһрәт, исем-дәрәжә артынан ҡыуыусыларҙан булмаған!

Кисәлә М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры һәм М. Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры артистары Рәми Ғариповтың илһөйәрлек, тормош мәғәнәһен эҙләүгә арналған фәлсәфәүи, ватансыл шиғырҙарын да, мөхәббәт лирикаһын да, тәржемә әҫәрҙәрен дә һөйләп ишеттерҙе. Ә бына уның исемен йөрөткән 1-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусылары (етәкселәре Рима Нәбиева) шағирҙың көндәлегенән был белем усағы һәм Өфө ҡалаһы тураһындағы тәүге хәтирәләре менән бүлеште. Башҡорт эстрадаһының киң билдәле йырсылары әҙип һүҙҙәренә ижад ителгән моңло йырҙарҙы яңғыратты. Тамашасылар бигерәк тә шағирҙың һөйөклө ҡыҙы Гөлнара Ғарипова һәм ейәнсәре Рәмилә Тимергәзинаның сығышын йылы ҡабул итте. Улар Нариман Сабитовтың "Көй" музыкаль әҫәрен роялдә һәм скрипкала башҡарҙы.

- Фильмды төшөрөүселәр төркөмө исеменән һеҙгә проекты күтәрмәләп килеүегеҙ өсөн оло рәхмәтемде белдерәм, - тине тамашасыларға мөрәжәғәт итеп "Шағир көндәлеге" фильмы режиссеры Булат Йосопов. - Беҙ ниндәйҙер кимәлдә энтузиастар, сөнки тәү сиратта халҡыбыҙ өсөн ҡиммәтле проекттар өҫтөндә эшләйбеҙ һәм һәр ваҡыт һеҙҙән ярҙам һорап мөрәжәғәт итәбеҙ. Әлбиттә, һеҙҙең ҡатнашлыҡ, баһалауҙарығыҙ булмаһа, трилогияның өсөнсө өлөшөн төшөрөү тураһында уйларға ла ҡыймаҫ инек. Беренсе фильм - "Бабич", ул нигеҙ һалыусылар, яңы республика тураһында идея тыуҙырған шәхестәр тураһында. Икенсеһе - "Беренсе республика", институттар һәм ғилми үҙәктәр булдырған, республиканы тәҙөгән кешеләр хаҡында. Ә өсөнсө фильм бар ошо ҡаҙаныштарҙы һаҡлаусылар тураһында булырға тейеш, сөнки беҙ барыбыҙ ҙа атай-олатайҙарыбыҙ барлыҡҡа килтергәнде һаҡлаусылар, уларҙың эшен дауам итеүселәр. Рәми Ғариповты ла республикабыҙға нигеҙ һалған идеяларҙы һаҡлап йәшәгән кеше тип иҫәпләйем. Мин тамаша залында ултырыусыларға һәм республика етәкселегенә рәхмәтемде белдерәм, сөнки бөгөн беҙгә ярҙам ҡулы һуҙыусылар бар. Был проекттың быйыл, Башҡорт теле йылында тормошҡа ашырылыуы беҙҙең өсөн айырыуса ҡиммәтле...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кисә һуңында тамашасылар төшөрөләсәк "Шағир көндәлеге" фильмының тәүге әҙерлек кадрҙарын - 2 минутлыҡ видеотаҫманы ҡараны. Шунан һуң сәхнәгә күтәрелгән "Каруанһарай" төркөмөнөң Рәми һүҙҙәренә яҙылған "Салауат" йыры бөтә залды аяғүрә баҫтырҙы. Был башҡорт теленең, халыҡ рухының, һүҙ һәм фекер азатлығының тантана иткән мәле ине. Шағир үҙе был байрамға килеп етмәһә лә, ул дуҫтарының, халҡының йөрәгенә таныш бер йыр булып ҡайтты!**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

КӨЛКӨФӨ

# АТ ҠАЙҒЫҺЫ БУЛАМЫ НИ!

**"Уҡыу ғына эләкмәгән, уҡыу эләкһә, әллә кем булыр ине" - ошондай һүҙҙәр тап Исхаҡ ағай кеүек кешеләргә ҡарата әйтеләлер инде. Бигерәк йор һүҙле, бигерәк шаян, һүҙгә үтә бай кеше булды ул. Хәҙер мәрхүм инде, ауыр тупрағы еңел булһын. Бөрйән районының Ғәҙелгәрәй ауылында йәшәгән Исхаҡ ағайҙы белгәндәр бөгөн дә уның шаянлыҡтарын көлөп иҫкә ала. Әйҙә, уның бер аңлатмаһын уҡып, беҙ ҙә көлөп алайыҡ әле.**

Мәлендә уны Исхаҡ ағай миңә үҙе күрһәткәйне. Йәнәһе, күҙ һал әле, дөрөҫ яҙғанмымы икән? Эштең әтнәкәһе шунда: уға совхоз директоры өйөрҙән айырылып ҡалған ат төркөмөн эҙләргә ҡушҡан. Ә Исхаҡ ағай ни сәбәптәндер директорҙың әйткән көнөндә ат эҙләргә сыға алмаған. Бына хәҙер директор унан аңлатма һорай икән. Исхаҡ ағай шул аңлатманы яҙған да, тәүҙә миңә уҡытырға булған. Мин аңлатманы көлә-көлә уҡып сыҡтым. Ә Исхаҡ ағай көлмәй, хатта бер аҙ ҡайғылы-өмөтлө тауыш менән: "Йә, нисек, ышанырлыҡмы?" - тип һорай. Ә үҙенең күҙҙәре мут йылмайған һымаҡ. Шәп яҙғанһың, мәйтәм, бәйләнерлек урын юҡ, буғай. Исхаҡ ағай был аңлатманы Шәкир ағайға (совхоз директорына) бирҙе микән, юҡ микән, уныһын белмәйем. Ә бына уның күсермәһен алып ҡалмағанымға бер аҙ үкенеп ҡуям. Шуға күрә ул аңлатма нисек иҫтә ҡалған, шулай яҙырға тырыштым. Ә шулай ҙа Исхаҡ ағай һымаҡ килештереп, шартына еткереп яҙып булманы, буғай. Юғалған-аҙашҡан ат төркөмө, әлбиттә, табылды. Тормош ығы-зығыһында был хәл күптән онотолдо ла. Ә бына аңлатманы һаман һағынып, һаман көлөп иҫкә алалар. Уҡыу эләкмәгән Исхаҡ ағай тарафынан ул бына ошолайыраҡ яҙылғайны.

*Шүлгән-Таш совхозы директоры Салауатов Шәкир Зәкир улына ат көтөүсеһе Хәлиуллин Исхаҡтан*

## АҢЛАТМА

Күҙгә төртһәң күрмәҫлек ҡараңғы төн. Ауыл тын ғына йоҡлай. Бындай илаһи тынлыҡты ҡайһы бер эттәрҙең өрөүе генә бер аҙ боҙоп ҡуя. Өйҙәгеләр тыныс ҡына мышнай. Мин уларҙы уятмаҫҡа тырышып, өйҙән сығам һәм һаҡ ҡына ишекте ябам. Нәмәләрҙе кистән үк әҙерләп соланға сығарып ҡуйғанмын. Урамдағы һалҡын һауа мине бер аҙ айнытып ебәргәндәй була. Нисек кенә һаҡ булырға тырышһам да солан ишеге барыбер минең арттан ризаһыҙ ғына шығырлап ябылып ҡала. Нәмәләремде алып, кистән үк әйәрләнгән ат янына киләм. Ул ризаһыҙ ғына, ниңә былай төн уртаһында юлланабыҙ әле, тип бышҡырып ҡаршы ала. Эх, туғанҡай, төн уртаһы булһа ла юлға сыҡмай хәл юҡ шул, иптәш директор шулай иртә сығырға ҡуша, тип мин ирекһеҙҙән көрһөнөп ҡуям. Нәмәләремде әйәргә бәйләйем дә атты етәкләп урамға сығам. Бер килке тын ҡалған ауылды тыңлап торам. Ауыл йоҡлай, ауыл ял итә. Ҡуй инде, мин генә ошондай бәхеткә эйә түгел. Ниҙәр генә күрмәй ирегеткәй менән ат башы, тип бушҡа йығламайҙарҙыр инде, күрәһең. Әммә көрһөнөп-үкенеп тороуҙан фәтеүә юҡ. Мин бер һикереүҙә атҡа атланам да яй ғына урманға ҡарай юл алам. Ауыл урамын тын ғына үтеп, урман ҡараңғылығына инеп юғалам.

Урман мине сәйер тынлыҡ менән ҡаршы ала. Сылт иткән, шырт иткән тауыш та юҡ. Ә шулай ҙа йәш ҡоштар ғына әллә яңылыштан, әллә төш күреүҙән ара-тирә һайрап ҡуя, алыҫтараҡ ниммәлер һынған һымаҡ тауыш ишетелгәндәй була. Ҡайһы бер йыуан ботаҡтар, ҡуйы ҡыуаҡтарға теҡләп ҡараһаң, айыуфәләнгә оҡшап ҡуя. Был мәлдә урман йәнлектәренең мине аңдып торманғанын беләм. Ә шулай ҙа бер аҙ шөрләтә биреп ҡуя. Ярай әле атым шәп. Ниндәй ҡараңғы төн, ә ул абынмай-һөрөнмәй яйлап ҡына алға табан атлауын белә. Әммә ҡараңғылыҡта тыуған бындай ҡурҡыу-өркөүҙәр ваҡытлыса ғына. Бындай ҡараңғылыҡ мәңге хөкөм һөрмәйәсәк. Килер бер мәл, ҡояш үҙ нурҙарын ергә һибер һәм яҡты көн тыуыр! Алланың ҡөҙрәте киң, тап мин уйлағанса килеп сыҡты ла. Мин Аҡҡашҡа тауына менеп барған мәлдә ҡараңғы төндө яҡты көн яйлап еңә башлағайны инде.

Тау башына менеп еткәс, тыуған яғымдың тәбиғәтенә күҙ һалып, өнһөҙ ҡалдым. Шундай матурлыҡ, шундай хозурлыҡ! Бындай матур күренеште һүҙ менән аңлатыуы, бәлки, мөмкин дә түгелдер. Ирекһеҙҙән ауыҙ йырыла, күңелде шатлыҡ баҫып ала, күңел күтәрелә төшә. Иҫ киткес матур тәбәктә йәшәйем икән мин! Ошондай илаһи хозурлыҡта йәшәүемә ҡыуанам, йылмаям, хатта үҙем дә белмәйенсә ҡысҡыра биреп ҡуям. Ошо ҡыуаныстан хатта (биллаһи, кешегә һөйләһәң, кеше шыанмаҫ, әй) күҙҙәргә йәштәр төйөлә, танау мыршылдай төшә, күңел ептәре өҙөлә биреп, өҙөлә биреп ҡуя. Илап ебәреүҙән ҡурҡып, тиҙ генә тирә-яҡҡа ҡарай һалам. Урманда шар баҡырып Исхаҡ илап тора ине, тип һөйләһәләр, ояты ней тора. Тиҙ генә емешей башлаған күҙҙәремде, мыршылдарға әҙер торған танауымды еңем менән һөртә һалам. Күңелкәйем бигерәк нескә шул минең.

Үҙемде тынысландырырға теләп ҡарашымды ергә төбәйем. Ә унда ... бәләкәй генә күләүек. Бер килке иҫем китеп уға ҡарап торам. Күләүек бәләкәй генә, ә унда әйтерһең бар донъя, бар йыһан һыйған! Һыу өҫтөнә төшкән күләгәлә аҡрын ғына болоттар йөҙә, унда әле генә ҡалҡҡан ҡояш миңә ҡарап йылмая, бейек ағастар япраҡтарын болғап, миңә сәләм бирә! Иҫ китмәле, ошо бәләкәй генә йыйылған һыуҙа күпме йән эйәһе көн күрә. Ана, күрәһегеҙме, бер бәләкәй генә ҡуңыҙ яйлап ҡына йөҙөп китте лә ләм төбөнә ятып тын ҡалды. Арыҡандыр, әйҙә ял итһен. Бына икенсеһе аяҡтарын мөмкин тиклем артҡа һуҙып, күләүектең бер ярынан икенсе ягына хәтлем йөҙөп барып сыҡты. Унан инде һыу төбөнән үҫеп сыҡҡан үлән олонона йәбешеп тын ҡалды. Ә һыу өҫтөндә тегеләй-былай йөҙөп йөрөгән "һыу таҙартҡыстарҙы" күрһәгеҙ ине! Тегеләй зыр-р-р, былай пыр-р-р, шунан инде бер аҙға тын ҡалыу, шунан тағы зыр-р-р, тағы пыр-р-р! Нисек батмайҙарҙыр инде. Шул мәл һыуҙан баҡа килеп сыҡты! Ниндәй матурлыҡ унда! Ул баш, ул яуырынбаш, тигәндәй. Ул йөшел күҙҙәрен миңә бер килке төбәп торҙо ла: "һау ғына йөрөйһөңмө, Исхаҡ!" - тип әйткән кеүек булды. Һәм һыуға кире сумды. Суп итеп ҡалды. Мин аптырағас: "Совхоз аттарын эҙләп китеп бара инем", - тип мығырлап ҡуйҙым. Баҡа сумыуҙан барлыҡҡа килгән түңәрәктәр үләндәрҙе, ундағы бөжәктәрҙе бәүелтте. Аҙаҡ улар яр ситенә һуғылып, яйлап юҡҡа сыҡтылар.

Шәкир Зәкирович! Тәбиғәттең ошондай илаһи матурлығын күргәндән һуң минең күңел нескәргән дә ҡуйған бит әй. Ә ат эҙләү ҡайғыһы бөтөнләйе менән күңелдән сығып киткән. Бер бәләкәй генә суп һымаҡ, бер буш нәмә һымаҡ күренгән ул миңә. Бигерәк ығы-зығы тормошта йәшәйбеҙ икән, тип уйлағанмын мин. Тәбиғәт-тормош матурлығын күрмәйбеҙ, ваҡ-төйәк менән булышабыҙ. Нимәләр эҙләйбеҙ, нимәләр таптырабыҙ. Шул арала талашып-үпкәләшеп өлгөрәбеҙ. Был донъяның фани ғына икәнен онотабыҙ. Ошондай кисерештәр шул хәтлем көслө булған, бер мәл иғтибар итһәм, мин бит ауылға кире ҡайтып барам! Совхоз аттарын эҙләргә сығып та эҙләй алмауымды ошондай тәрән күңел кисерештәрем менән аңлата алам. Бөгөн саҡ тынысланып алдым. Ә иртәгә таң менән кире сығам ат эҙләргә. Бөгөнгә хәл ҡабатланмаясаҡ, үҙемде ныҡ тотасаҡмын.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# СӘТЛӘҮЕК АША

■ Диабет менән яфаланыусылар әстерхан сәтләүеге ярҙамында ҡан тамырҙары һығылмалығын яҡшырта ала. АҠШ-тың Нью-Хейвен университеты ғалимдары белдереүенсә, был иң уңайлы һәм ябай ысул булып тора. Тикшеренеүселәр уртаса 58 йәштәрҙәге диабет сирлеләр төркөмөн күҙәткән. Сирлеләр көнөнә мотлаҡ 56 грамм әстерхан сәтләүеге ашаған һәм эксперимент аҙағына уларҙың ҡан тамырҙары һығылмалығы артҡан, дөйөм һәм "зарарлы" холестерин күләме кәмегән. Сәтләүектәрҙең юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып, дауаланған саҡта ғалимдар тән ауырлығын даими күҙәтеп торорға кәңәш итә.

■ Суинберн университеты ҡарамағындағы кеше психофармокологияһы үҙәге ғалимдары әйтеүенсә, көн һайын бер сынаяҡ какао эсеү баш мейеһе эшмәкәрлеген яҡшырта. Белгестәр быны эсемлек составындағы файҙалы флавоноидтар менән аңлата. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был матдә эшсе хәтерҙе яҡшырта. 30 көн дауамында какао эскән оло кешеләрҙең дә баш мейеһе эшмәкәрлеге күпкә әүҙем булыуы асыҡланған. Ғалимдар фаразлауынса, какао составындағы флавоноид берләшмәләре мейегә арырға форсат бирмәй.

■ Ғалимдар химик элемент калийҙың ҡан тамырҙарын һаҡлау сифатына торған һайын йышыраҡ иғтибар итә. ГФР университеты клиникаһы физиологтары аңлатыуынса, калий ҡан тамырҙарын уны "эзбизләнеүҙән" һаҡлай торған эндотелий күҙәнәктәрен эшләп сығарыуҙа төп роль уйнай. Ябайлаштырып әйткәндә, эндотелий - ул йөрәк, ҡан һәм лимфа тамырҙарының эске ҡыуышлығын һаҡлап, ҡаплап тороусы күҙәнәктәр ҡатламы. Ғалимдар эндотелий ҡалынлығының ҡанда тупланған калийға туранан-тура бәйле булыуын асыҡлаған.

■ Нигеҙҙә емеш-еләк, йәшелсә менән туҡланыу, тәмәке тартмау, спиртлы эсемлектәр менән мауыҡмау һәм даими физик әүҙемлек - кешене сәләмәтлеккә илтеүсе дүрт юл, дүрт ҡанун. Ошо тормош ҡанунын тотоп йәшәүселәр араһында мейегә ҡан һауыу осраҡтары 50 проценттан ашыуға кәмерәк, тип раҫлай Бөйөк Британияның Норфолк графлығы университеты ғалимдары. Улар 11 йыл буйына 40 йәштән өлкәнерәк 20 мең кешенең сәләмәтлек торошон күҙәтеү аҫтында тотҡандан һуң, ошондай фекергә килгән.

■ Йөрәк сирлеләр өсөн ҡәһүә файҙалы, тип раҫлай Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары. Улар инфаркт кисергән 1300 кешенең һаулыҡ торошона 10 йыл буйы тикшеренеүҙәр алып барған һәм шундай һығымтаға килгән: көнөнә 1-3 сынаяҡ ҡәһүә эскән кеше өсөн инфарктган үлеү хәүефе - өстән бер өлөшкә, ә 5-7 сынаяҡ эскәндәргә яртылашҡа кәмей.

■ Инглиз телендә "Көнөнә бер алма аша һәм сәләмәт бул, доктор!" тигән әйтем бар. Гейдельбергтағы Немец онкологик үҙәге докторы Кларисса Герхойзер әйтеүенсә, алма, ысынлап та, күп ауырыуҙарҙан дауа икән, уның составындағы ҡайһы бер матдәләр хатта яман шеш күҙәнәктәре барлыҡҡа килеүҙе иҫкәртә. Кверцетин пигментһәм пектин полисахаридтары организм күҙәнәктәренең яңырыуына булышлыҡ итә. Кверцетин алманың ҡабығында ла күп. Шулай уҡ алма һуты ла яман шеш күҙәнәктәрен юҡҡа сығара ала, тик ул тәҫһәҙләндерелмәгән булырға тейеш.

"БӘЙЛӘНЕШТӘ"

# АУЫЛ ҠАТЫНДАРЫ...

## донъя көтә, ижад итә

**Был ҡыҙ-ҡатындар "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башҡорт-ҡатын ҡыҙы" төркөмөндә яҙыша. Яҙғандары башҡаларҙыҡы һымаҡ түгел, ә фекерле, йөкмәткеле булыуы менән айырыла. Уларҙың үҙ тормошондағы ваҡиғаларҙы ихлас итеп һүрәтләүе, һәр кем күңеленә йәшәйеш аҡылы, ҡағиҙәһе булып килеп инер һығымталары, бай, һутлы башҡорт теле барыһының да иғтибарын йәлеп итә. Шуға ла төркөмдәштәре ул яҙмаларҙы көтөп алыуы тураһында белдерә, фекергә фекер өҫтәп дауам итә, хуплап лайк ҡуйыусылар бихисап. Танылған йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы Гүзәл Рамазан ҡыҙы Ситдыҡова тарафынан 2012 йылдың 7 февралендә ойошторолған "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмө бына шундай авторҙары һәм тик позитивҡа ҡоролған яҙмалары менән дә күптәр күңеленә хуш килә торғандыр. Хәҙер ундағы төркөмдәштәр иҫәбе 32 мең ярымға етеп бара. Ҡыҫҡаһы, һүҙ "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмөнөң иң әүҙем өс авторына. Улар һәм бында исемдәре сыҡмаған тағы бер нисә ҡатын-ҡыҙ (ҡыҙғаныс, матур яҙмалар авторҙары араһында иргеттәр бик күренмәй) артабан "Киске Өфө" гәзитенең дә дуҫтарына һәм әүҙем авторҙарына әйләнер тигән ышаныстабыҙ.**



### БАЛА САҠ ХӘТИРӘҺЕ

"Се-е-е-е-з-з, сы-ы-з-з-з, сыж, сарт-сорт, шарт, серт..." Бына ошондай тауышҡа уянып киттем. Тәүҙә аңламайыраҡ яттым. Был ниндәй тауыш, мин ҡайҙа? Ятҡан еремдә әҙерәк ҡыбырлап алдым. Аҫтымда ҡатылыҡ һиҙҙем. Был бит урындыҡ. Өҫтөмдә йомшаҡ ҡына йылы юрған. Ә-ә, иҫемә төштө. Мине бит кисә өләсәйемдәргә ҡалдырып киттеләр. Теге тауыш тигәнем мейестәге утын тауышы. Сызылдап ҡына сыҡҡаны суйында ҡайнап ҡына килгән һыу, имеш.

Тулыһынса уянып етһәм дә, ҡапыл ғына торғом килмәне. Күңелем әҙерәк болоҡһоп китте. Үҙебеҙҙең өй, әсәйемдәр иҫкә төштө. Улар әле ни эшләй икән? Йоҡонан уяндыларма, торҙоларма, мейескә утын яҡтыларма икән?

Иплəп кенә ҡулымды һуҙып, ҡорманың ситенән асып ҡараным. Тышта ҡараңғы әле, тинем дә тағы ла иҫкә төштө. Өләсәйем тәҙрә ҡапҡастарын төнгөлөккә япты бит әле. Ул гел шулайта. Ҡыш көндәре ҡаты һыуыҡтарҙа өй һыуынмаһын тиҙер инде.

Ваҡытты белә алмаһам да, иртә икәнен беләм. Сөнки өләсәйем мин йоҡлаған арала малын ҡарап инә һала. Уянһам бит уның менән ҡуша сығам. Өйҙә бер үҙем ҡалырға ҡурҡам шул. Мейестә сыртлап ҡына янған утындың ялҡын яҡтыһы ҡаршы стенаға төшә. Стенала төрлө шөүләләр барлыҡҡа килгән һымаҡ. Мин уны төрлө нәмәгә оҡшатам. Анау береһе бейеп йөрөгән ҡыҙға оҡшаған, икенсеһе буран һымаҡ ялпылдай, өсөнсөһө туҡтауһыҙ эшләп йөрөгән өләсәйемә оҡшаған...

Өләсәйем минең уянғанды белмәй. Иплəп кенә йөрөргә тырыша. Теге суйында һыу ҡайнап сыҡҡайны, һыуын алып, ҡомғандағы һыуына өҫтәне. Әҙерәген ҡулйыуғысҡа һалды. Соланға сығып ит индерҙе. Сайып ебәреп, суйынға һалды, өҫтөн таба менән ҡапланы ла тағы ла ут ҡаршыһына ултыртты. Теге суйын тағы ла " се-е-е-е-з-з" тигән тауыш сығарып көйләй башланы. Мин юрған аҫтынан башымды ла сығарырға йыбанып, өләсәйемдең һәр бер хәрәкәтен күҙәтәм. Шундай рәхәт, иҙерәп кенә ятам.

Өләсәйем йылтыр ғына самауырын мейес эргәһенә килтереп ултыртты. Ҡапҡасын асып һыу тултырҙы. Аҙаҡ инде йөмкә алып, эсенә мейестән ҡуҙ алып һалмаҡсы итте. Туҡтап ҡалды. Низер уйланы шикелле. Эйе, самауырҙы ситкә таргты. Әҙерәк көтөргә булды шикелле. Тағы ла бер күнәк һыуын ҡаҙанға һалды. Һыуы әҙерәк сайпылып көлдөксәгә түгелде. Танауыма мейес аҡбалсығының еҫе бәрелде. Аҡбалсыҡ ашағым килеп, тамшанып киттем хатта.

Өләсәйем урындыҡтың бер ситенә генә ултырҙы ла, бәйләмен алып, бәйләй башланы. Иҙәндәге йомғаҡ йәнле һымаҡ ҡыбырлап йөрөй башланы. Ул шәп бәйләгән һайын йомғаҡ ҡыянрыраҡ килә. Өләсәйем бауҙы тартып, оҙонайтып алһа, йомғаҡ тәгәрләп ҡасҡан һымаҡ була. Тик өләсәйем уға иғтибар бирмәй. Мейестә янған утынға ҡарай. Ирендәре ҡыбырлап-ҡыбырлап китә. Эстән генә низер әйтәме, әллә һөйләйме...

Бәйләгән һайын бәйләме ҙурая. Ә мейестәге утын кәмей. Ҡуҙға ғына ҡала башланы. Шул саҡ өләсәйем торҙо ла ут ҡаршыһындағы ҡайнап сыҡҡан суйынды ситкә алды. Усаҡ яғының йүшкәһен асты ла, былғауысын алып, ҡуҙҙарҙы усаҡ яғына тарта башланы. Өй эсендә әҙерәк ҡуҙ еҫе лә сыҡҡандай булды. Бушап ҡалған мейес эсенә теге суйынды ултыртты. Мейестең йүшкәһен еткергәнсе япты. Һәм ауыҙын да ҡапланы. Әһә, өләсәйем бөгөн мине мейес ашы менән һыйлай икән. Дөгө һалырмы, әллә тары ярмаһымы... Теге самауырҙы ла эшһеҙ ҡалдырманы. Усаҡ эсенән йөмкә менән ҡуҙ алып, самауырға һала башланы. Торбаһын кейҙереп, усаҡ эсенә ҡаратып ултыртты.

Ынтылып миңә ҡараны. Мин һаман йоҡлағанға һалышып ятам. Өләсәйем башындағы яулығын ҡыҫыңҡырап бәйләне һәм шәленә ынтылды. Ә, мал ҡарарға сығырға уйлай бит. Мин йәһәт кенә һикереп торҙом. Өйҙә бер үҙем ҡалыу юҡ инде. Өләсәйем минең торғанды күреп, аһ итте. Тағы ла үҙе менән алып сығырға тура киләсәгенә көйөндө инде. Миңә һыуыҡ теймәһен тип кенә тора. Ә һарайҙа һалҡын. Ярар инде, тине лә мине кейендерә башланы. Ҡат-ҡат кейем, дебет шәл, бәлтә, уның өҫтөнә шаҡмаҡ ҡалын шәлде арҡыры бәйләне. Аяғыма яңы баҫылған ҡаты бейма кейҙерҙе. Бына шундай әҙерлек менән мине ҡуша алып сығып китте. Туптай булып, саҡ атлап сығып киттем. Иң мөһиме, өйҙә яңғыҙ ҡалмайым тип күндем инде ҡатлап кейендереүенә....

...Ошо ваҡиғаға хәҙер инде 35 йыллап ваҡыт үткән. Мейес ашы ла һирәк эләгә, хан һыйындай ул, тик өләсәйемдекенә етмәй. Ә мин һаман талғын

ғына ҡайнаған һыу тауышын яратам:
"Се-е-е-е-з-з, сы-ы-зз..."
Ваҡыт ауыһыҙ-ҙ-ҙ,
Үтә бик тиҙ-ҙ-ҙ.

**Фирүзә ХӨСӘЙЕНОВА-ӘБДРӘХИМОВА.**
**Күгәрсен районы.**



### ҮҘЕНДЕ ЯРАТА БЕЛӘҺЕҢМЕ?

**Хәҙерге йәштәрҙең Инстаграмда, "Бәйләнеш" селтәрендә алып барған "марафондарын" уҡып, ҡыҙыҡһынып барам. Бик матур, аҡыллы һүҙҙәр яҙылған, үҙеңде нисек ярат ырға, нисек йәшәү дәрте алырға, нисек үҙ- үҙеңде төрлө яҡлап асырға, үстерергә һәм башҡа төрлө мауыҡтырғыс ысулдар, хатта йога күнекмәләре өйрәтелгән постар бихисап.**

Беҙҙең йәшлек үткән инде, яйлап ҡына ҡартлыҡ яғына шыуышабыҙ. Һорау тыуа: беҙ үҙебеҙҙе ярата, яраттыра белдекме? Хәйер, ул кешенең үҙенән торалыр. Хәҙерге за-

***✓ Үҙемде ярата белһәм, мин бөтөнләй икенсерәк йәшәр инемме икән? Үҙ мәнфәғәтемде генә ҡайыртһам, кемдәргәлер ярарға тырышһам, үҙемә тейешлене шатырлатып тартып алһам, мине лә ихтирам итә башларҙар инеме икән?***

ман, үткән заман, тип бүлеү дөрөç түгелдер, минеңсә. Яратҡаны унын элек тә үҙ ҡәҙерен белгән, гел кеше күңелен ҡайғыртҡаны хәҙер ҙә етерлек...

Кисә генә шул юçыҡта һөйләшеү булып алды Динә ҡыҙым менән.

Нишләптер, хәҙерге балалар әсәй-атайҙың бер әйтеүенән генә ҡыбырлап, әйткән йомошҡа йәһәт кенә тороп китмәй. Ҡыҙыма бер әйтәм дә, тызымай ғына сабыр көтәм. Оҙаҡ ҡына ултырырға мөмкин әле. Шунан ипләп кенә: "Элек өләсәйең, ҡартайың әйтһә, ҡайҙа ул һинең һымаҡ иркәләнеп ултырыу, шул секундта тороп сабабыҙ - әсәйҙе борсомаçҡа тырышыумы, ихтираммы, ҡурҡыу булдымы икән, бәлки, бөтәһе бер юлы булғандыр инде",- тим.Шул һүҙҙәр тәьçир итә, ҡыҙым шунда уҡ ҡушҡан эште башҡарып ҡуя...

Бала саҡтан хәтерләүемсә, гел кеше күңеле өсөн йәшәнем. Тәүҙә атай-әсәйгә, аҙаҡ иремә, унын туғандарына ярарға тырышып, аҙаҡ балалар тип... Бер ниндәй уңайлыҡтары булмаған донъямда тырышып, кемдер әйтмешләй, сәсем менән ер һепереп, итәгем менән сүп йыйып йәшәнем дә йәшәнем... Бәлки, үҙемде ихтирам итһәм, яратһам, үҙемде генә ҡайғыртһам, башҡасараҡ йәшәр инем. Газым да булыр ине, бар уңайлығы булған йортом да...

Совхоздар бөтөү менән, әйтерһең, донъя түңкәрелде. Эш булмағас, күптәр ҡырға сығып китте. Кемдер мал аçрап, кемдер ҡош-ҡорт тотоп йәшәргә тырышты... Ирем ҡырға эшкә китергә ашыҡманы. Малды ла өс-дүрт баштан арттырманы, етмәһә, транспортһыҙ, мал аҙығы әҙерләү, ташыу үҙе бер проблема булыр ине... Күмәк ғаиләне итһеҙ, майһыҙ ултыртманыҡ, әлбиттә, артып ҡалған бер баш үгеҙҙе бер көҙ һуйып тотонһаң, дүрт уҡыусыны бер ҡат кейендерергә саҡ етер ине....

Балалар мәктәп уҡыусылары, аҙаҡ студенттар булды. Бер ваҡытта ла уларға, атайығыҙ эшләмәй, тип зарланманым, баçым яһаманым. Башҡа ҡатындар һымаҡ "Бына мин эшләйем, ирем эшләмәй, мин май, һөт, күкәй, нәски, шәл бәйләп һатам, мин... мин..." тип күкрәк һуҡманым. Аңлаған кешегә һинең ҡупырыныуың кәрәк тә түгелдер...

Үҙемде ярата белһәм, бәлки, мин бөтөнләй икенсерәк йәшәр инемме икән? Кемдәргәлер ҡаршы һүҙ әйтһәм, үҙ мәнфәғәтемде генә ҡайыртһам, кемдәргәлер ярарға тырышһам, үҙемә тейешлене шатырлатып тартып алһам, бәлки, мине лә ихтирам итә башларҙар инеме икән? Бик икеле, бик сетерекле һорау... Ысынлап та, үҙеңде ҡарап, матур кейенеп, үҙеңде ышаныслы тотоп йөрө әле, әлбиттә, һине яратасаҡтар. Ә һәпрәң ҡойолоп, һуғыш заманындағы күлдәгеңде кейеп, сәсең туҙып, тишек, шапайған гамаш, төçө уңып бөткән яулыҡ ябынғаныңды күргән берәйһе танау өçтөнән, сирҡанып ҡараясаҡ... Әммә һинең берәүҙә лә эшең юҡ! Һиңә өлгөрөргә кәрәк: ашарға бешерергә, ҡырҙағы балаларға кеменә фарш, кеменә балан, кеменә бәлеш, икмәк, ит кәрәк. Әһә, нәскиҙәре туҙған. Эй, Төпсәнгә барыр кәрәк. Бөгөн көн йылы, тиҙ генә кер йыуырға кәрәк. Көл түгергә, ашлыһыу, бысраҡ һыу түгергә, көнөнә нисә күнәк һыу индерергә, һауыт-һаба йыуырға... Ә мин ҡасан үҙемде яратып өлгөрәйем?

Минең был үҙемде ҡәҙерләмәү бала саҡтан килә. Аҙаҡ үçмер саҡта ла, артабан да шулай уҡ дауам итте: тормош йөгөн алдан һөйрәнем, ҡуй, түҙәйем, сабыр итәйем, иртәгә һәйбәт буласаҡ, Алла бирһә, ярай булыр әле, тип йәшәлде лә йәшәлде. Иң ҡурҡынысы, һәр саҡ үҙ-үҙемде ғәйепле тойоуҙан ҡотола алманым. Берәй ергә ҡунаҡҡа саҡырҙылар, ти. Аҡса юҡ, нисек бараһың. Кешенән алып торор инең, ҡайтарып бирәһе бар. Ә саҡырыусы үпкәләй, ул үҙе лә эшләй, ире лә, аҡсаһыҙ йәшәмәйҙәр. Нишләп һеҙҙең аҡсағыҙ юҡ ул, тип аптырарға мөмкиндәр. Эйе, мин бит бик күп һөнәрҙәргә эйәмен: ашнаҡсы, йыйыштырыусы, пекарь, кәрәгендә мал ҡараусы һәм башҡалар. Тик нишләп аҡсам етмәй икән, ҡайҙа ҡуям икән? "Мин эшләмәйем шул", тип ирем бер ваҡыт та әйткәне юҡ. Ә "Беҙ эшләмәйбеҙ", тип әйтергә мөмкин. Ул үҙен ныҡ ярата. Кәрәк икән, бар етешһеҙлектәрҙе минең өçкә өйөргә мөмкин...

Ә мин, бәлки, шулай кәрәктер ул, тип күнәм, түҙәм...

Шул уҡ ваҡытта башҡаларға кәрәк булыуҙан туҡтаған юҡ. Хәҙер Ейәнсуралағы һылыуым "Апай, кәзә тарарға кил", тип, шылтыратһын, китәм, билләһи! Ашы ла бешеп өлгөрмәç! Атайым: "Ҡыҙым, мейес һыларға кил", - тиһә, йөҙ эшем ҡыйралып ятһын, йәйәү сығып китергә әҙер торам. "Апааай, берәй көн йоҡларға кил әле, ҡул эшеңде тотоп, рәхәтләнеп һөйләшеп ултырырбыҙ, берәй тәмлекәс бешерербеҙ", - тип, ауылдың ике осонда йәшәгән ике киленемдең саҡырыуы үҙе ни тора! "Беҙҙең "Тиҙ ярҙам" бит ул", тип яратып әйтеүҙәре ни тора! МЧС тип тә ҡуялар әле ишшеү. Ғүмер үтеп бара, үҙемде яратам, тип, күнегелгән ғәҙәттәрҙе аша атлай алмайым бит инде...

Кисәге бер матур осрашыуҙы яҙып китәйем. Исемен яҙмайым, йә үпкәләр. Үҙ эшен асҡан, ауыл халҡы, йәштәре тормошона, йәшәйешенә битараф булмаған бер егет кисә миңә кәңәшкә, йәғни бешеренеү тәжрибәм менән уртаҡлашырға килде. Үҙемә уңайһыҙ ҙа кеүек, ул тиклем оçта кеше түгелмен бит инде! Яңы эш башлағанда бәләкәй генә кәңәштең дә ярҙам итәсәгенә лә ышанам. Белгәнемде кешегә аңлата алам икән, минең ярҙамға мохтаж икән, тимәк, һиңә ышаналар, ихтирам яулағанһың, тигәнде аңлата. Нисек кенә булмаһын, мин шуны беләм: үҙеңде үҙең яратып ултырыу ғына етмәй, һине башҡалар яратһын, һинең кәңәшең кешеләргә кәрәк булһын! Матур кейенеп, ҡулдарыма ҡиммәтле балдаҡ тағып, тундар кейеп, беләгемә бер һарыҡ хаҡына бәрәбәр сумочка аçып, тыҡылдап магазин буйлап йөрөү, туғандарың, таныштарың өсөн ҡырыç, уçал булыу минеңсә түгел! Сирек быуат шулай йәшәлде, ҡалған ғүмерҙә нисек үҙгәреп китәйем ти инде...

Уф, бына хәҙер әҙерәк өй эштәрен генә бөтөрәм дә, Төпсәнгә китәм!

МЧС саҡырттылар, бармай булмай...

**Айгөл МИҢЛЕБАЕВА.**
**Күгәрсен районы.**



# АТАЙЫМ ТУРАҺЫНДА

**"Киске Өфө" гәзитендә Миләүшә Ҡаһарманованың "Атай" тигән хикәйәһен уҡып тетрәндем. Ғөмүмән, атайҙар тураһында яҙылғандарҙы урап үтә алмайым. Йотлоғоп, яратып уҡыйым. Сөнки әсәй берәү генә булған кеүек, атай ҙа берәү генә була. Сөнки атайымдың миңә, бер бөртөк кенә ҡыҙына булған һөйөүе мине әле лә, атайһыҙ ҡалһам да, йылыта, һаҡлай, хәстәрләй.**

Алтын ҡуллы, оло йөрәкле булды атайым. Инде тиçтә йылдар үтһә лә унын тураһында бер насар һүҙ ишеткәнем юҡ. Моңло, хисле йөрәкле булған. Йыр яратҡан, хикәйәләр, шиғырҙар ижад итеп булашҡан. Йомшаҡ күңелле ине ҡәҙерле кешем. Ана шул йомшаҡлығы ла "йәшел йылан"дың дуçы булып китеүенә сәбәпсе булғандыр инде, күрәһең. Тора-бара бөтөнләй хәмерҙең ҡолона әйләнде лә ҡуйҙы шул ул. Алтын ҡулдарының хеҙмәтен бер яртыға баһалаусылар ҙа унын был һаҙлыҡҡа батыуының бер сәбәпселәре булғандыр. Әммә һәр кемдең үҙ ҡулында яҙмышы. Бары ҡайһылыр бер мәлдә теҙгенен бушатҡандыр ҙа атайым, кире үҙ ҡулына ала алмағандыр инде...

Киттек әсәй менән атайҙан. Замана афәтенә ҡаршы бер үҙен ҡалдырып киттек. Көрәшергә, яңынан аяҡҡа баçырға ла тырышты ул, ләкин яңғыҙлығы үҙәгенә үткәндә яраларын тап шул әсе һыу менән йыуғандыр инде, ҡотолоу сараһын төпһөҙ һаҙлыҡта эҙләгәнен аңламағандыр. Минең килеүемде байрамдай итеп ҡабул итер ине ул. Нимә алып биреп, нимә ҡуйырға белмәй ине. Бер һүҙ өндәшмәйенсә оҙаҡ текләп ултырыр ине күҙҙәремә. Шундай яратыу менән ҡараған ҡараштарҙы тик һөйгәнемдән генә тойҙом. Ҡайны менән кейәү ҙә бербереһен ихлас оҡшатҡайнылар, ирем уны әҙ генә белеп-күреп ҡалыуына ҡарамаçтан, ҡайным, тип, ихтирам менән иçкә ала атай мәрхүмде. Бер йығылып, бер аяҡҡа баçып ауа-түнә тигәндәй яңғыҙы ғүмер иткән атайымдың йөрәге бер көн килеп түҙмәгән. "Минең ейәнем булды, мин олатай, тип ҡыуанып, инде барып күрәм, балалар риза булһа, эргәләрендә торам да ҡалам, бер мөйөш табылыр әле йәшәрлек", тип йөрөгән һуңғы һүҙҙәре генә килеп етте шул. Минең балалыҡ, йәшлек менән, әсәйемдең ғорурлығы, яҡындарының моңһоҙлоғо менән упҡындан йолоп ҡала алманыҡ беҙ уны, тип уйлайым хәҙер. Хәйер, барыһы ла Аллаһ ҡулында шул...

Балаларымды ла атай абруйын, атай һүҙен тоторлоҡ, атайҙарын хөрмәт менән, тәрән ихтирам менән иçкә алырлыҡ булһын тип тәрбиәләргә тырышам. Атай менән бала араһындағы мөнәсәбәт әсәйҙән торалыр тип уйлайым. Беҙҙең өс ул үçтергән ғаиләбеҙҙә атайҙың роле айырыуса ҙур, мөһим. Аллаға шөкөр, уландарым атайлы-арҡалы булып үçеп киләләр. Ир-егеттәрҙең бар эшен үҙе белгәнсә өйрәтеп, һеңдереп үçтерә аталары. Ҡамасаулап йөрөмә әле, тигән һүҙ менән түгел, ярҙамлаш, булыш, өйрән тип тәрбиәләй ул. Ҡаты, уçал, талапсан да булырға тырыша. Ә мин иһә, үҙ сиратымда балаларға "Атай" һүҙенең бәçен, баһаһын һеңдерергә булышам. Беҙҙең ғаиләлә һуңғы, хәл иткес һүҙ - атай һүҙе. Сөнки, улдарым да, ир, атай һүҙенең, роленең, тормоштағы үҙ урындарының мөһимлеген, кәрәклеген аңлап, ысын ир, ысын атай булып үçергә тейештәр тип һанайым.

**Гүзәл МЫРҘАЕВА.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 6-сы идея: Эшлекле эшһеҙлек

Һин эшлекле кешеме? Был һинең "эшлеклелек" һүҙе аçтында нимә аңлауыңа бәйлелер, тип уйлайым. Бәлки, һин һис тә тик тормайһыңдыр һәм шуға күрә үҙеңде эшлекле кеше тип иçәпләйһеңдер. Шулаймы? Эшлеклелек һәр ваҡыт хәрәкәт талап итә тип уйламайым. Хәрәкәт ҡайһы саҡта беҙҙең ысынлап та нимә теләгәнебеҙҙе белмәүебеҙҙе аҡлау булып та хеҙмәт итә ул. Йыш ҡына ваҡыт һәм энергиябыҙ бушҡа әрәм ителә. Ләкин беҙ көсөбөҙҙөң бушҡа сарыф ителеүенә юл ҡуя алмайбыҙ.

Иртәме, һуңмы, беҙгә нимә мөһим, нимә мөһим түгеллеген хәл итергә тура киләсәк, сөнки беҙ барыһын да бер юлы эшләргә маташһаҡ, етди бер нәмәгә лә өлгәшә алмаясаҡбыҙ. Кешенең аңы - бик нескә һәм ҡатмарлы ҡорал. Ул эстән дә, тыштан да стрестарға бирелә, һәм артыҡ ҙур баçым йыш ҡына өҙөклөккә килтереүе ихтимал.

Аҡыл арыуы, физик арыу кеүек үк, йонсотҡос булыуы мөмкин. Бындай осраҡтарҙа үҙеңде яҡлауҙың бер генә ысулы бар - даими рәүештә эске "Мин"ең менән өнһөҙ генә аралашыу. Һин тыныс ҡына йәшәү һәм сыҙамлылыҡ сығанағы эргәһендә ял итәһең. Нисек кенә сәйер булмаһын, әммә был - эшмәкәрлек, етмәһә, аҡыл йәки физик эшмәкәрлеккә ҡарағанда юғарыраҡ кимәлдәге эшмәкәрлек. Әйләнеп тороусы ваҡыт тәгәрмәсе көпсәге эргәһендә тын, хәрәкәтһеҙ торған нөктә бар. Беҙ, арасалар беҙҙе онтамаһын йәки ситкә сығарып ырғытмаһын тиһәк, ошо нөктәгә әйләнеп ҡайтырға өйрәнергә тейешбеҙ. Был тыныс мөйөш - үҙебеҙҙең эске "Мин"ебеҙ менән аралаша алырлыҡ берҙән-бер урын. Әгәр ошо тыныслыҡ менән аралашырға теләһәк, беҙ аңлы рәүештә үҙебеҙҙе уға өлгәшә алырлыҡ хәлгә килтерергә тейешбеҙ. Был аҡыл, физик һәм рухи көстәрҙе яңыртыу сере. Ошо хәҡиҡәтте асыҡлаһаң, һинең үҙ асылын таныусы аҡылың асыласаҡ.

Эшлеклелек һәр ваҡыт хәрәкәтте белдермәй. Эске "Мин"дең эшлеклелеге йыш ҡына абсолют тынлыҡҡа ҡайтып ҡала. Әйтәйек, автомобилдең аккумуляторын ҡабаттан зарядлағанда, ул бит үҙенән сыҡҡан ике сым менән тып-тын ғына эшләп ултыра. Тыштан ҡарағанда шулай, әммә был аккумуляторҙың эсендә бер ҡасан да булмағанса ярһыу эшмәкәрлек бара. Ысынлап та, беҙ һәр ваҡыт хәрәкәт ағымында өйөрөлөргә тейеш түгелбеҙ. Ҡайһы берҙә беҙ бөтөнләй хәрәкәтһеҙ торғанда һәм эсебеҙҙәге "Мин"гә эшләргә мөмкинлек биргәндә ныҒыраҡ эшләклебеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 3 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Поздний срок". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45, 15.50 Т/с "Тайны следствия-5". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00, 22.00 Т/с "Крепостная". [12+]
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.00 Т/с "Сваты-2012". [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Д/с "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Теге өсәү. [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Т/с "Зоя". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Таланты и поклонники". [12+]**
**5.30 "Счастливый час". [12+]**

## 4 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Поздний срок". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
23.55 Право на справедливость. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00, 22.00 Т/с "Крепостная". [12+]
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.00 Т/с "Сваты-5". [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.15 Республика LIVE. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.30, 23.00 История одного села. [12+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 "Времечко".**
**22.00 "Детей много не бывает". [0+]**
**23.15, 5.15 "Вижу сны..." К Всемирному дню борьбы против рака. [12+]**
**23.30 Земляки. [12+]**
**23.45 Т/с "Зоя". [16+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**5.30 "Счастливый час". [12+]**

## 5 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Поздний срок". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
3.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00, 22.00 Т/с "Крепостная". [12+]
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.00 Т/с "Сваты-5". [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.15 Д/с "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "АйТекә!" [6+]**
**15.45 "Сыйырсык". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Республика LIVE. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Зоя". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Женитьба". [12+]**
**5.15 Орнамент. [6+]**
**5.30 "Счастливый час". [12+]**

## 6 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.00 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Поздний срок". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
3.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00, 22.00 Т/с "Крепостная". [12+]
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.00 Т/с "Сваты-5". [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30, 23.30 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00, 22.00 Республика LIVE. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 "Времечко".**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.45 Т/с "Зоя". [16+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Похищение стариков". [12+]**
**4.15 Күстәнәс. [12+]**
**4.45 "Бай". [12+]**
**5.15 Орнамент. [6+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

## 7 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. Все на юбилее Леонида Агутина. [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "История The Cavern Club". [16+]
1.30 На самом деле. [16+]
2.25 Про любовь. [16+]
3.10 Наедине со всеми. [16+]
4.40 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1
05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Тайны следствия-6". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 "Юморина". [16+]
23.25 Х/ф "Деревенская история". [12+]
03.25 Х/ф "Только вернись". [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Д/ф "Насекомые, или миллиметровый мир". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 22.00 Республика LIVE. [12+]**
**12.30, 21.00, 6.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью.**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 Әлләсе... [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Т/с "Мужчины не плачут". [12+]**
**2.15 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## 8 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Больше солнца, меньше грусти". К дню рождения Ирины Муравьевой. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/с "Теория заговора". [16+]
15.00 Х/ф "Карнавал". [0+]
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.30, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Большая игра. [16+]
0.10 Х/ф Премьера. "Берлинский синдром". [18+]
2.10 На самом деле. [16+]
3.05 Про любовь. [16+]
3.50 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
05.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
09.30 "Пятеро на одного".
10.20 Сто к одному.
11.10 Смеяться разрешается.
13.40 Х/ф "Крылья Пегаса". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Замок на песке". [12+]
01.00 Х/ф "Мамочка моя". [12+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсык". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Бирешмә. Йырла. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30, 6.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.45 Колесо времени. [12+]**
**16.45 "Ашҡына ғүмер". Вечер памяти народного артиста РБ Ахата Муртазина. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 3.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Государственному академическому ансамблю народного танца им. Ф.Гаскарова - 80 лет". [12+]**
**1.30 Т/с "Мужчины не плачут". [12+]**
**3.45 Спектакль "Красная звезда". [12+]**
**5.00 Д/ф "Насекомые, или миллиметровый мир". [12+]**

## 9 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.30, 6.10 Х/ф "Моя мама - невеста". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/с "Теория заговора". [16+]
15.00 Д/ф "Игорь Матвиенко. Круто ты попал..." [16+]
16.35 Точь-в-точь. [16+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". [6+]
23.45 Х/ф "Про любовь. Только для взрослых". [18+]
1.40 На самом деле. [16+]
2.35 Про любовь. [16+]
3.20 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1
04.20 Х/ф "Деревенская история". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
09.30 "Устами младенца".
10.20 Сто к одному.
11.10 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
12.05 Х/ф "Возраст любви". [12+]
14.00 Х/ф "Никто кроме нас". [12+]
17.50 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
01.00 Д/ф "Золото Колчака". [12+]
02.10 Х/ф "Родной человек". [12+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 Большое путешествие большой семьи. [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Гора новостей". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.45 Башҡорттар. [6+]**
**16.15 "Дорога к храму". [0+]**
**16.45 Историческая среда. [12+]**
**17.15 "Остров-Джаз". X Всероссийский детско-юношеский фестиваль. [6+]**
**18.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.45 "Красная кнопка". [16+]**
**23.30 "Беҙ Баймаҡтар бит әле-2". Концерт. [12+]**
**1.45 Т/с "Мужчины не плачут". [12+]**
**3.30 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

✓ *Кешеләр менән эш иткәндә мин һәр ваҡыт һүҙемдә торам. Хоҙай менән эш иткәндә һүҙемдә бик үк тормайым, сөнки Ул барыһын да ғәфү итә.*
*(Пол ван Дорен).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АЙ АТАМАЛАРЫ - БАШҠОРТСА




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**4-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тальян. Думбыра. Ҡашыҡ. Мисәт. Ҡумыҙ. Албаҫты. Сенегал. Лемур. Дөңгөр. Лут. Көс. Борғо. Ыҙма. Литр. Лекиф. Адаул. Ҡуҙы. Оя. Аһәң. Ҡурай. Ғайнан. Ня. Йорт.

**Вертикаль буйынса:** Скрипка. Мандолина. Гастелло. Дөйә. Ятаған. Талды. Аймаҡ. Карта. Һорнай. Штангасы. Уңған. Аяҡ. Эт. Ҡыл. Балыҡ. Евро. Ут. Ҙур. Орфей.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 февраль "Эскәмйә"** (А. Гельман), драма. 12+
**6 февраль "Хыялый"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+
**7 февраль "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 16+
**9 февраль "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 11.00 6+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 февраль "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия. 12+
**6 февраль "Калигула"** (А. Камю), трагедия. 16+
**9 февраль "Айболит и Бармалей"** Яңы йыл әкиәте. 12.00, 14.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**8 февраль "Свет сказочной страны"** (Г. Хамиева, Л. Янтилина) 12.00, 14.00 0+
**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 16.00 0+
**9 февраль "Три поросенка"** (С. Михалков) 12.00, 14.00 0+
**"Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен) 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 февраль "Любви все возрасты покорны"** А. С. Пушкин поэзияһы музыкала. 6+
**6 февраль "Ҡомло фантазия" "Арғымаҡ"** төркөмө концерты. 6+
**8 февраль "Музыку слушаем вместе"** 11.00, 13.00 0+
**"Приключения Фунтика"** оффлайн-трансляция сәғәт 15.00 башлана. 0+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Салауат районының Лағыр ауылында тыуып, хәҙерге көндә Өфө ҡалаһында йәшәгән **Дияс Хатип улы Йәндүринды** ошо көндәрҙә **80 йәшен** тултырыуы менән ихлас ҡотлайбыҙ. Бар ғүмерен балаларға, йәштәргә белем биреүгә арнаған Дияс Хатип улы тарих фәндәре докторы, профессор дәрәжәләренә, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы һәм башҡа абруйлы исемдәргә лайыҡ. Шанлы үткәндәрҙә баш ҡалала башҡорт мәктәбен астырыуҙы юллаусыларҙың, "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәген ойоштороусыларҙың, республикаға суверенитет яулау өсөн көрәштең алдынғы сафында тороусыларҙың береһе ул. Оло юбилейы менән ҡотлап уға ныҡлы һаулыҡ, балаларының, ейән-ейәнсәрҙәренең һөйөүенә кинәнеп, уҡытҡан уҡыусыларының һәм студенттарының рәхмәттәрен ишетеп, оҙон-оҙаҡ йәшәүен теләйбеҙ.

**Ҡотлау менән - Салауат районында йәшәүсе барлыҡ туған-тыумасаһы.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (9) дүшәмбе | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 16:24 | 17:54 | 19:24 |
| 4 (10) шишәмбе | 7:34 | 9:04 | 13:30 | 16:26 | 17:56 | 19:26 |
| 5 (11) шаршамбы | 7:32 | 9:02 | 13:30 | 16:29 | 17:59 | 19:29 |
| 6 (12) кесе йома | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 16:31 | 18:01 | 19:31 |
| 7 (13) йома | 7:28 | 8:58 | 13:30 | 16:33 | 18:03 | 18:33 |
| 8 (14) шәмбе | 7:26 | 8:56 | 13:30 | 16:35 | 18:05 | 18:35 |
| 9 (15) йәкшәмбе | 7:24 | 8:54 | 13:30 | 16:37 | 18:07 | 18:37 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҺОРАУ-ЯУАП

# ҺАЛЫМ ТҮЛӘРГӘМЕ, ЮҠМЫ?



**Һуңғы ваҡытта Интернет селтәрендә лә, социаль аккаунттарҙа ла һалым түләүгә ҡағылышлы видеоролик таралды. Уның авторы һалымдың халыҡ тарафынан ирекле (теләк буйынса) түләнергә тейешлеге тураһында мәғлүмәт бирә. Был йәмғиәттә бер аҙ шау-шыу ҙа тыуҙырҙы. Ваҡиғаны һалым органдары нимә тип аңлата икән, әйҙәгеҙ, уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалайыҡ:**

"Был раҫлау ҡануниәт нормаларына ҡаршы килә, сөнки Рәсәй Федерацияһында һалым түләү һәр граждандың конституцион бурысы булып тора (РФ Конституцияһының 57-се статьяһы). Фейк мәғлүмәтендәге РФ "Һалым кодексы"ның 45.1 статьяһы буйынса "Берҙәм һалым түләүе" буйынса шуны аңлатабыҙ: Берҙәм һалым түләүе - ул граждандың милек, ер, транспорт һәм НДФЛ һалымын түләү иҫәбенә ирекле иғәнә индереүе. Ул - ошо атап үтелгән һалымдарҙы дөйөм бер сумма менән, теләгән кеше өсөн, аванс рәүешендә, түләүҙәрҙе йыл дауамында бер тигеҙ бүлеп түләү шарты менән, шулай уҡ бер нисә түләүҙе тултырғанда хаталанмаҫ өсөн түләү индереүе.Индерелгән түләү күләмен һалым органдары, милек һалымын түләү ваҡыты еткәс, үҙ аллы башҡарасаҡ. Тәү сиратта һалым һәм пенялар ҡапланасаҡ.

Һалымды аванс рәүешендә берҙәм түләү менән башҡарыу мөмкинлеге булыуға ҡарамаҫтан, һалым түләүсе 1 декабрҙән дә һуңға ҡалмайынса милек һалымын, килем алған йылдың икенсе йылына 15 июлдән дә һуңға ҡалмайынса килем һалымын түләргә тейеш. Ойошмаларҙың НДФЛ (килем һалымы) түләү тәртибе РФ Һалым кодексының 23-сө бүлегендә билдәләнгән.

Шулай итеп, милек һалымы һәм НДФЛ түләү бурысы ғәмәлдәге ҡануниәт тарафынан билдәләнгән һәм берҙәм һалым түләүе - түләү ваҡыты еткәнгә тиклем һалымдарҙы ай һайын бүлеп түләү ысулы ғына".

✔ *Кейәүең ҡыуалаһа - ишек бауын тот; улың ҡыуалаһа - түргә менеп ултыр.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәлә).*



БЕҘҘЕҢ ДУҪТАР

# ЙОЛАБЫҘ - ГӘЗИТ УҠЫУ

**Беҙҙең Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы үҙенең 50 йыллыҡ юбилейын билдәләргә әҙерләнә. 1970 йылда баш ҡаланың уртаһында башҡорт мәктәбе асыуҙы хәстәрләп йөрөүсе зыялыларыбыҙға рәхмәтлебеҙ һәм улар нигеҙ һалған традицияларҙы һаҡлап килә алыуыбыҙ менән ғорурланабыҙ.**

Был арауыҡ эсендә ниндәй генә үҙгәрештәр булғанда ла белем усағы үҙ асылын юғалтмаған. Беҙҙә 100 процент башҡорт балалары уҡый, уларға 100 процент башҡорт телле уҡытыусылар белем бирә. Балаларына үҙ телен камил белеүҙе маҡсат иткән атай-әсәйҙәр булыу эшебеҙгә еңеллек килтерә, улар юл йөрөүе ауыр тип зарланып тормай, балаларын Өфөнөң төрлә тарафтарынан йөрөтөп уҡыта. Беҙҙең гимназияны тамамлаған уҡыусылар хәҙер үҙ балаларын йөрөтә, эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан уҡытыусыларыбыҙ ейән-ейәнсәрҙәрен етәкләп алып килә. Белем усағыбыҙҙың бына шундай быуындар бәйләнеше, үҙ йолалары бар.

Бер йолабыҙ - "Киске Өфө" гәзитенә бөтә коллектив менән яҙылыу. Нәшер ителә башлағандан алып гимназиябыҙ был баҫма коллективы менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Баш ҡала башҡорттары ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү ниәтендә булдырылған баҫма бөтә республика буйлап милләттәштәрҙе туплаусы, бер фекерле итеүсе лә. Өфө педагогтарының иң яраткан гәзиттәренең береһе ул һәм беҙ уны иң күп дана менән алдырған белем усаҡтарының береһебеҙҙер, моғайын. Бер ваҡытта ла 20-30 дананан кәмерәк алдырғаныбыҙ юҡ, хатта 50 дана менән дә яҙылғаныбыҙ булды. Бөтә коллективты матур итеп ойоштороп, оҙаҡ йылдар гәзиткә яҙҙырып тороусы коллегабыҙ Мәнәүәрә Әбделхай ҡыҙы Мәксүтоваға бик рәхмәтлебеҙ. Сөнки ул матбуғатҡа яҙылыу осоронда бөтәһен дә әүҙемләштереп, ҡыҙыҡһындырып ебәрә белә. Уҡытыусылар гәзитте дәрестә дидактик материал рәүешендә лә ҡуллана, уҡыусыларға өйгә эште лә ҡайһы саҡ гәзиттең фәһемле мәҡәләләре буйынса әҙерләргә ҡушалар, ә китапханабыҙҙа йыллыҡ тупланмалары һаҡланып бара. Мәктәп - ул белем усағы, шуға ла төрлө фәнни китаптар, художестволы әҫәрҙәр менән бер рәттән, ваҡытлы матбуғатҡа ла балаларҙа ҡыҙыҡһыныу уятыу бик дөрөҫ сәйәсәт, тип уйлайым. Хәҙерге заманда бөтә кеше көнө-төнө компьютер артында ултыра, телефонды ҡулынан төшөрмәй. Бәлки, ошо тиҙлектән дә, мәғлүмәттең шул тиклем күп ағылыуынан да арыйбыҙҙыр. Һәм бына өйгә ҡайтып, гәзит-журналды ҡулға алып, элекке ваҡыттағы кеүек рәхәтләнеп ҡыштырлатып һәр битен асып ҡарап ултырыуы үҙе бер ял тойола. Ҡағыҙ баҫма уҡыу менән өсөн камиллашыуҙың бер ысулы: телмәрең дә шымара, тел байлығың арта, яңы мәғлүмәтте күп алаһың, замандаштарҙың фекерҙәре менән танышаһың. Ғөмүмән, гәзит һәм китап уҡыуҙы балаларға модалы, бөгөнгө заман талабы итеп күрһәтергә кәрәк. Сөнки улар ҡағыҙ китап уҡып бармай, аудиокитап тиҙәр ҙә, ҡолаҡса ҡуйып тыңлайҙар. Тыңлау менән үҙең уҡыуҙың айырмаһы ҙур, шуға уҡыусыларға үҙ миҫалыбыҙҙа үрнәк күрһәтеп, барлыҡ милли матбуғатҡа яҙылып уҡыйбыҙ.

Әйткәндәй, йәш уҡытыусыларға ла өлгө был йолабыҙ. Студент әсәмйәһенән килгән ҡыҙ-егеттәргә гәзиткә яҙылырға аҡса йыйыу сәйер күренә, мин уны электрон рәүештә лә уҡый алам, тиеүҙәре бар. Гәзит материалдары бер ваҡытта ла иҫкерә торғандарҙан түгел, бигерәк тә беҙ яратып алдырған "Киске Өфө" мәҡәләләрен күпме ваҡыттан кире алып уҡыһаң да актуаллеген юғалтмай. Бына ни өсөн беҙҙең оло йәштәге педагогтар гәзит алдырайыҡ, уҡыйыҡ тип йүгереп йөрөй. Яратып, һәр номерын һағынып көтөп алған "Киске Өфө"нөң беҙҙең белем усағы кеүек үҙ асылын юғалтмай оҙон-оҙаҡ йәшәүен, ҙур дана менән таратылыуын, гәзит уҡыусыларының ихтыяжын ҡәнәғәтләндергән яңы рубрикалар менән байытылып баҫылып тороуын теләйбеҙ!

**Зөлфиә ҒӘЛИЙӘНОВА,**
**Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы директоры.**



ӘЙҘӘГЕҘ...

# ДИМЛӘЙЕК!

**Халҡыбыҙҙа димселәр институты, йәғни димләү йолаһы бик борондан килә. Йәше уҙып китеп тә һаман да үҙ ишен таба алмай йөрөгән егет һәм ҡыҙҙарға элек-электән димселәр ғаилә ҡорорға ярҙамға килгән.**

Һәм был йоланы үтәү бөгөн бигерәк тә кәрәк. Сөнки беләһегеҙ, ауылдарыбыҙ тулы буйҙаҡ егеттәр. Шулай уҡ кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар йәки ирҙән айырылған 1-2 балалы йәш ҡатындар ҙа бихисап. Шуға ла мин димселәү таланты булған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға (был йоланы башлыса гүзәл заттар башҡарған), бигерәк тә ағинәйҙәргә ошо йоланы яңыртып ебәрәйек әле тип мөрәжәғәт итәм. Ил башлыҡтары ла демографик хәлгә ныҡлы иғтибар бүлгән саҡта был ағинәйҙәребеҙҙең халҡыбыҙ һанын арттырыуға ҙур өлөшө булһын. Беҙ үҙебеҙ, Ғафури районы Ватан ауылы ағинәйҙәре, быйылғы йыл башынан ошо матур йоланы башлап ебәрҙек тә инде. Башҡаларҙы ла ошо изге йоланы үтәүгә ҡушылырға саҡырабыҙ. Йәш ғаиләләр барлыҡҡа килһен, балалар һаны артһын! Саҡырыуҙы ошо шиғыр юлдарына ла һалдым.

*Һәр ауылда тулып ята*
*Кейәүҙәр һәм кәләштәр,,*
*Ана шул йәштәр ҡауышһа,*
*Үәт гөрләр ине эштәр!*
*Илде бәпләр ағинәйҙәр*
*Һәр ауылда туп-тулы,*
*Ошо эште эшләһәгеҙ,*
*Булырһығыҙ сауаплы!*
*Димләү - халҡым йолаһы,*
*Булһын йола дауамлы!*

**Фәүзиә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӨҘӨҢ ЙӘМҺЕҘ БУЛҺА...

## күҙгө ғәйепле түгел

Кейәүең ҡыуалаһа - ишек бауын тот; улың ҡыуалаһа - түргә менеп ултыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлә).**

Бәхет - ул ысынбарлыҡ түгел, ә хәтирәләр: беҙгә һәр ваҡыт йәшәлгән йылдар бәхетлерәк тойола.

**(Василий Ключевский).**

Хәтер - беҙҙе бер нисек тә ҡыуып сығарып булмаған ожмах ул.

**(Жан Поль).**

Әхлаҡи тәрбиә бәхетле булырға өйрәтмәй, ә нисек итеп бәхеткә лайыҡлы булырға өйрәтә.

**(Иммануил Кант).**

Барыһы ла азат булмай тороп, берәү генә ныҡлап азат була алмай. Барыһы ла әхлаҡлы булмай тороп, берәү генә тулыһынса әхлаҡлы була алмай. Барыһы ла бәхетле булмай тороп, берәү генә ысынлап бәхетле була алмай.

**(Герберт Спенсер).**

Әхлаҡ тураһында һөйләү еңел ул, уны нигеҙләү ауыр.

**(Артур Шопенгауэр).**

Әхлаҡһыҙлыҡ - ваҡыттарын беҙҙән яҡшыраҡ үткәргәндәрҙең әхлағы.

**(Генри Менкен).**

Кешеләр менән эш иткәндә мин һәр ваҡыт һүҙемдә торам. Хоҙай менән эш иткәндә һүҙемдә бик үҡ тормайым, сөнки Ул барыһын да ғәфү итә.

**(Пол ван Дорен).**

Мөмкин булмаған эштәрҙә генә вәғәҙә ит, шул саҡта һине бер низә лә ғәйепләй алмаҫтар.

**(Жак Деваль).**

Вәғәҙәне үтәмәүҙең беренсе билдәһе - вәғәҙәнең еңел бирелеүе.

**(Эдгар Хау).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер хаким намаҙ уҡып, доға ҡылып ултырған дин әһеле янынан уҙып бара, ти. "Доғаларыңдың йөкмәткеһе нисек?" - тип һорай дин әһеленән хаким. "Яуызлыҡ ҡылма, изгелек ҡыл. Йөрәгеңде таҙа килеш һаҡла, тигән теләк теләйем", - тигән дин әһеле. "Һуң ул теләктәрҙе өс йәшлек сабыйҙар ҙа белә һәм Хоҙайҙан һорай ала. Һинең теләктәрең ҡатмарлыраҡтыр, тип уйлағайным", - ти хаким. "Бәлки, был теләктәрҙе өс йәшлек бала ла ҡабатлай алалыр, әммә уларҙы һикһән йәшлек ҡартҡа ла ғәмәлдә атҡарыу ауыр", - тип яуап биргән дин әһеле".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99, 246-03-24**
**Матбуғат таратыу** **246-03-23**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
31 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 4007
Заказ - 74/01